ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 апрель (алағарай) 2026

№13 (1208)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һәйкәлде тергеҙеү башланған!**



5

**Белем биреү - мәңгелек һөнәр,**



йәки Мәғрифәтселек юлында табылған бәхет хаҡында 8-9

**Ҙур эштәр...**

бәләкәйҙән башлана



12-13

**Еңгә бүләге - хазина,**

тиңһеҙ уның баһаһы!



15

*Һин нимә менән генә шөғөлләнһәң дә, ҡыйыулыҡ кәрәк. Сөнки һин нимә генә эшләмә, алға барыу өсөн ниндәй генә юлды һайлама, "һин яңылышаһың" тип әйтә торған кеше барыбер осраясаҡ. Ауырлыҡтар булып тора, шуға ла һайлаған юлыңды тәнҡитләүсе менән тиҙ генә килешеүең дә бар. Үҙ маҡсатыңды булдырып, уға табан ныҡышмалы барыу өсөн дә ҡыйыулыҡ талап ителә. Донъяла күп еңеүҙәргә урын бар һәм ул еңеүҙәр һинең ҡыйыу эш итеүеңде көтә.*

***Ральф Эмерсон.***

АФАРИН!

# ИҢ ШӘП УКЫТЫУСЫ КЕМ?




**Үткән аҙнала "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы-2026" конкурсының төбәк этабы йомғаҡланды. Сара М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының тантаналар залында үтте.**

Сара сиктәрендә 31-се тапҡыр үткәрелгән төбәк-ара "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" бәйгеһендә быйыл республиканан һәм сит өлкәләрҙән 41 уҡытыусы көс һынашты. Бөтә этаптарҙы уңышлы үткән Өфө ҡалаһы Анатолий Хохлов исемендәге 10-сы белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ләйсән Хәсәнова "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2026" еңеүсеһе исеменә лайыҡ булды. Икенсе урынға - Йылайыр районының Юлдыбай ауылы мәктәбе уҡытыусыһы Земфира Кинйәбаева, өсөнсөгә Яңауыл ҡалаһы И.Ш. Мөксинов исемендәге гимназиянан Альбина Мөхәмәтшина сыҡты. Баш ҡаланың 127-се мәктәбенән Фәнүзә Киленбаева менән 42-се лицейҙан Әлфинә Ғәбиҙуллина лауреат исемдәрен алды.

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2026" республика конкурсының абсолют еңеүсеһе исемен Өфө ҡалаһы 93-сө лицейҙың рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ангелина Степанова яуланы. Благовещен ҡалаһы М.А. Киняшов исемендәге 6-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең башланғыс кластар уҡытыусыһы Любовь Луговая - икенсе, Өфө ҡалаһы 29-сы белем биреү үҙәгенең математика уҡытыусыһы Данил Бобров өсөнсө урынға лайыҡ булды.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

ИҒТИБАР!

# ӨГӨТӨБӨҘ БАРЫП ЕТҺЕН!

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 апрелдән гәзитебеҙгә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу башланды. Шулай итеп, ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана.**

- Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.
- Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә гәзит аша ҡотланыр өсөн тыуған көндәрен хәбәр итһен.
- Баш ҡала халҡы йорто эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыларында баҫмабыҙға 870 һумға яҙыла ала.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 600 һум.
- Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 600-әр һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.
- "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

Ҡөрьән-Кәрим хәҙистәрендә "Изге ғәмәлдәрендең уңышҡа өлгәшеүен теләһәң, саҡырыу-өгөттәренде өс тапҡыр ҡабатла", тиелә. Ошо хәҡиҡәткә ышанып, һеҙҙе тағы ла баҫмабыҙ менән дуҫлашырға өгөтләйбеҙ. Өгөт һүҙенең нимәгәлер ирешеренә, кемдәргәлер барып етеренә өмөтөбөҙ һүнмәгән әле.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




12+

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Халыҡты бөгөндән өмәгә сығарырға кәрәк! Өс-дүрт сәғәт эшләп алыуҙан бер кемгә лә зыян итмәҫ. Шуныһы мөһим, һәр кем ҡайҙа сығырға икәнен белһен, инструменттар булһын, сүп-сарҙы сығарыу шунда уҡ ойошторолһон.*



ҠЫҪҠАСА

# ПОЕЗДА - ТАШЛАМА

**1 апрелдән 31 октябргә тиклем Башҡортостанда социаль ярҙамға хоҡуҡлы граждандарға төбәк льготаһы бирелә: улар ҡала яны поездарында юл хаҡының 50 процентын ғына түләй ала.** Былтыр төбәктә 550 мең кеше ошондай хоҡуҡтан файҙаланған. Улар - пенсионерҙар, хеҙмәт ветерандары, репрессияларҙан зыян күргән тыл эшсәндәре. Билет һатып алғанда льготаға хоҡуҡты раҫлаған документ һәм паспорт (төп нөсхәһе) кәрәк. Бынан тыш, федераль льготалылар - инвалидтар, хәрби хәрәкәттәр, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, блокадалы Ленинградта йәшәүселәр бушлай йөрөү хоҡуғына эйә. Башҡортостанда мәктәп уҡыусылары һәм студенттар 1 сентябрҙән 15 июнгә тиклем ярты хаҡҡа йөрөй ала. Хәбәр ителеүенсә, 1 апрелдән электричкалар йәйге тукталыштарҙа туҡтай башлай. Ете ай буйына төбәк льготаһы һаҡлана.

✓ **Баш ҡалабыҙҙағы "Өфө Экспо" күргәҙмәләр комплексында үткән "Агрокомплекс" халыҡ-ара күргәҙмәһе айҡанлы Рәсәй Федерацияһының ауыл хужалығы министры Оксана Лут сәләмләү һүҙҙәрен ебәрҙе.** Уҙ мөрәжәғәтендә ул Башҡортостандың ил агросәнәғәт комплексын үҫтереүгә, аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә тос өлөш индереүен, төрлө йүнәлештәр, шул иҫәптән умартасылыҡ, орлоҡ, шәкәр сөгөлдөрө, майлы культуралар етештереүҙә лидер булыуын билдәләгән, әлеге форумдың тәжрибә уртаҡлашыу, тармаҡтың үҫеш нөктәләрен эҙләү өсөн һөҙөмтәле майҙансыҡҡа әйләнеренә ышаныс белдергән. Быйылғы күргәҙмә айырыуса киң майҙанда үтте: ҡатнашыусы компаниялар һаны артты; 38 предприятие бында тәүге тапҡыр; экспозиция илдең 37 төбәге вәкилдәрен, шулай уҡ Белоруссиянан, Ҡытайҙан партнерҙарҙы берләштерҙе. Йылдағыса, "Өфө Экспо" майҙанына заманса ауыл хужалығы техникалары ҡуйылды, "Фермер ауылы"нда урындағы таҙа аҙыҡ-түлек һатылды.

✓ ***Дәүләт Думаһында МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам саралары ҡарала.*** Асыҡланыуынса, Дәүләт Думаһында яраланған хәрби хеҙмәткәрҙең (әгәр ул никахта тормаһа) ата-әсәһенә йыл һайын уның менән бер үк ваҡытта отпуск алыу хоҡуғын бирергә тәҡдим итела. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин оборона буйынса комитетҡа хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең статусы тураһында законға үҙгәрештәр индереү хаҡында тейешле закон проектын ебәргән. Яугирҙарҙың һәм уларҙың туғандарының ихтыяжынан сығып, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам тураһында ҡануниәтте камиллаштырыу мөһим, тип билдәләне парламент спикеры. "Ошо закон-ды ҡабул итеү яуҙа яраланған һалдат һәм офицерҙар өсөн өҫтәмә социаль гарантияларҙы нығытырға, уларҙы һауыҡтырыу өсөн кәрәкле шарттар булдырырға мөмкинлек бирәсәк", - тип өҫтәне Вячеслав Володин.

✓ **Өфөнән Белоретка поезд менән дүрт сәғәттә барып етергә мөмкин. Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Куйбышев тимер юлы начальнигы урынбаҫары Дмитрий Новиков ошо турала һөйләне.** Апрелдә Башҡортостанға ике системалы ике "Финист" электр поезы килә. Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса тиҙ йөрөшлө электричкалар Өфө - Белорет маршрутына тәғәйенләнә. Шулай итеп, таулы Башҡортостандың баш ҡалаһына 4 сәғәттә барып етергә мөмкин. 2026 йылдың октябрендә был маршрут Магнитогорскиға тиклем оҙайтыла, ә киләһе йылда "Финистар" Сибайға йөрөй башлай. Новиков һүҙҙәренсә, Өфөнән Һамарға электр поездары 8 майҙан йома, шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә йөрөй.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ӨМӘГӘ!



**Башҡортостанда 27 марттан 10 майға тиклем яҙғы өмәләр ойошторола. 18 апрелдә дөйөм республика өмәһе була. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо хаҡта белдерҙе.**

Республика етәксеһе Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына өмәләрҙе сифатлы үткәрергә ҡушты. "Бөгөндән үк кешеләрҙе урамдарға сығарырға кәрәк һәм алға! Был беҙҙең тирә-яҡ мөхит. Сығып, өс-дүрт сәғәт эшләгәндән бер ни ҙә булмаҫ. Иң мөһиме, быны еренә еткереп ойошторорға кәрәк. Кешеләр үҙҙәренең эш урынын белһен, инструменттар менән тәьмин ителһен, сүп-сарҙы сығарыу шунда уҡ ойошторолһон. Муниципалитет башлыҡтары, был һеҙҙең туранан-тура бурысығыҙ. Һеҙ урындарҙа ошо эште ойошторорға тейешһегеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Бынан алдараҡ хәбәр ителеүенсә, 1 июнгә тиклем Өфөлә санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса "айлыҡ" башлана. Санитар йомаларҙан тыш, 28 марта, 11 һәм 25 апрелдә дөйөм ҡала өмәләре үткәрелә.

"Халыҡты бөгөндән өмәгә сығарырға кәрәк! Өс-дүрт сәғәт эшләп алыуҙан бер кемгә лә зыян итмәҫ. Шуныһы мөһим, һәр кем ҡайҙа сығырға икәнен белһен, инструменттар булһын, сүп-сарҙы сығарыу шунда уҡ ойошторолһон", - тине Радий Хәбиров, был эштең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып.

# ЕҢЕҮ КӨНӨ УҢАЙЫНАН...

**Апрелдә Социаль фонд Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыларына һәм инвалидтарына Еңеү көнө уңайынан аҡса күсерә башлай.**

Аҡса 3 апрелдән пенсия һәм башҡа айлыҡ түләүҙәр менән бергә банктар һәм Рәсәй почтаһы аша һәр кемдең үҙ графигы буйынса түләнә. Рәсәйҙең Социаль фондында белдереүҙәренсә, әгәр ветерандың пенсияһы банк картаһына килһә, аҡса ла шул уҡ картаға күсә. Пенсияны почта аша алған осраҡта аҡсаны почтальон тарата йәки уны почта бүлексәһе кассаһында алырға мөмкин. Ил Президенты указына ярашлы, был сумманың күләме - 10 мең һум. Аҡса Еңеү көнөнә тиклем күсерелә. Ветерандарға йәки уларҙың яҡындарына ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй.

# ЙӘШТӘР ЙӘЛЕП ИТЕЛӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Йәштәр һәм балалар" милли проекты "Профессионалитет" программаһының мөһим уңыштарын билдәләне.**

Республика федераль проект буйынса булдырылған белем биреү һәм белем биреү-производство кластерҙары һаны буйынса илдә лидер булып тора, тип билдәләне ул. Төбәктә 19 кластер эшләй, 2026 йылда тағы һигеҙҙе асыу планлаштырыла. Шулай итеп, улар йәмғеһе 27 була. Башҡортостанда бындай уҡытыу формаһы популяр була бара. Федераль ярҙам һәм предприятие-партнерҙар булышлығында колледждар - яңы ҡорамалдар, студенттар - практик күнекмәләр һәм тыуған республикаһында эшкә урынлашыу өсөн гарантия, ә предприятиелар шунда уҡ эшкә тотонорға әҙер яңы белгестәр ала. Әйткәндәй, 6 апрелдә республикала һөнәри йүнәлеш биреү кампанияһы башлана. Колледж студенттары мәктәп уҡыусыларына үҙҙәренең һөнәрҙәре тураһында һөйләһә, ата-әсәләр һәм балалар өсөн предприятиеларға экскурсиялар ойошторола. 18 апрелдә республиканың барлыҡ колледждарында Берҙәм асыҡ ишектәр көнө уҙғарыла.

# ҒАРИЗА ЯҘМАҺАҢ ДА...

**1 апрелдән республикала социаль пенсиялар 6,8 процентҡа арта. Был республикала социаль пенсия алған 104 меңдән ашыу кешегә ҡағыла.**

Индексация ғаризаһыҙ башҡарыла - аҡса иҫәпкә ваҡытында һәм арттырылған күләмдә күсерелә, тип белдерҙеләр Социаль фондтың республика буйынса бүлексәһендә. Социаль пенсия ғәҙәти пенсия өсөн стажы етмәгәндәргә, шулай уҡ инвалидтарға, инвалид балаларға һәм ҡараусыһын юғалтҡан балаларға тәғәйенләнә. Ул дөйөм ҡабул ителгән пенсия йәшенән биш йылға һуңыраҡ билдәләнә. Индексациянан һуң ҡартлыҡ буйынса бындай пенсияның уртаса күләме 10 837,74 һум була. Беренсе төркөм инвалидтарына - 21 675,57 һумға, инвалид балаларға 26 010,32 һумға тиклем арта. Шулай уҡ дәүләт тәьминәте буйынса пенсия индексациялана. Башҡортостанда 3 меңдән ашыу кешегә (ветерандар, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар, блокадалы Ленинградта йәшәүселәр һәм радиация һәләкәттәренән зыян күреүселәр) ошондай пенсия түләнә. Социаль фондтың Башҡортостан буйынса берҙәм бәйләнеш үҙәге телефоны: 8-800-100-00-01 (шылтыратыу бушлай).

# ҺЫЙЫРҘАР ХӘСТӘРЛЕ

**Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда тоҡомло йәш һыйыр малына молекуляр генетик экспертиза үткәрә башлаясаҡтар.**

Билдәләнеүенсә, аҡса "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген технологик тәьмин итеү" милли проекты (национальный проект "Технологическое обеспечение продовольственной безопасности") буйынса бүленә. 2025 йылда ошо маҡсатҡа Башҡортостан аграрийҙары федераль һәм төбәк бюджеттарынан 7 миллион һум алды. Аҡса 2,5 мең баш тоҡомло йәш һыйыр малына генетик экспертиза үткәрергә мөмкинлек бирген. "Һыйыр малына генетик экспертиза үткәреү юғары продуктлы, һау-сәләмәт тоҡомло малдарҙың киләсәк быуынын формалаштырыу өсөн нигеҙ булып тора. Был алым генетик материалдың импортҡа бәйлелеген кәметергә мөмкинлек бирә һәм әлеге шарттарҙа тоҡомсолоҡ эшенең эҙмә-эҙлекле үҫеше өсөн бик мөһим фактор булып тора", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда рекордлы эҫе көндәр дауам итә. Синоптиктар көн дә температура рекордтарын теркәй. 31 марта Өфө-Дим метеостанцияһында +17° булған, тип хәбәр итә Башгидрометүҙәк. 2009 йылда тап ошо көндә +14,3° теркәлгән. Был иһә республикала март айында етенсе температура рекорды. Метеорологтар аномаль эҫелекте Урта Азия далаларынан һәм сүллектәренән килгән һауа массаһының таралыуы менән аңлата. Рәсәй Гидрометеорология үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда 5 апрелгә тиклем уртаса һауа температураһының норманан 8-10 градусҡа юғарыраҡ булыуы көтөлә.

✓Башҡортостанда 2026 йылда Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу һәм хөрмәтләү көнө 2 майға билдәләнә. Был хаҡта Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. Республика етәксеһе муниципаль властарға зыяраттарға автобус маршруттары булдырырға һәм биләмәләрҙе сүп-сарҙан таҙартыуҙы ойошторорға ҡушты. "Дин әһелдәре килһен, дежур фельдшерҙар булһын", - тип өҫтәне Хәбиров.

✓Башҡортостандан Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Замир Аҡсурин хәрби задание ваҡытында бер юлы дүрт дронды атып төшөргән. Ефрейтор Аҡсурин "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкының Алексей Сухоруков исемендәге артиллерия батареяһы расчеты составында хеҙмәт итә. Уның бурысы - ут позицияларында торған хәрби машинаны һаҡлау. Замир Аҡсурин батырлығы һәм ҡыйыулығы өсөн II дәрәжә "Хәрби батырлыҡ өсөн" һәм генерал Шаймаратов миҙалдары менән бүләкләнгән.

✓Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары бер тауыштан Елена Теняева кандидатураһын республика Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе вазифаһына хупланы. Ул Хәҙерге заман гуманитар институтын һәм РФ Федераль сик буйы хеҙмәтенең Мәскәү хәрби институтын тамамлаған. Красногорск ҡала судында, прокуратураһында, Красногорск хакимиәтендә, БР прокуратураһында, Өфөнөң Октябрь районы 9-сы суд участкаһында эшләй. 2024 йылдың июненән БР Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе урынбаҫары, рәйес вазифаларын башҡарыусы була.

✓Премьер-министр урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә хәбәр итеүенсә, яҙғы сәсеү быйыл 2 миллион гектарҙан ашыу майҙанда планлаштырыла. Иген культуралары 1,4 миллион гектарҙа ҡаралған. 285,6 мең гектарҙы биләгән ужым культураларының 99 проценттан ашыуы яҡшы ҡышлаған. Хужалыҡтар иген, ҡуҙаҡлы иген һәм ярма культуралары орлоҡтары менән тулыһынса тәьмин ителгән.

✓ *Таҙартыу һәм тергеҙеү өсөн иң һаҡсыл механик һәм химик технологиялар ҡулланабыҙ, тип ышандыра реставратор. Һөҙөмтәлә, һәйкәл тәүге төҫөн аласаҡ.*



*КӨТӘБЕҘ!*

# ҺӘЙКӘЛДЕ ТЕРГЕҘЕҮ БАШЛАНҒАН!



**Был көндәрҙә бер төркөм журналистар Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау барышы менән танышты.**

Постаменттан һүтеп алынған скульптура фрагменттары Черниковка биҫтәһендәге ангарҙа урынлаштырылған. "Әлеге этаптың төп бурысы - скульптураны иҫке буяуҙан тулыһынса әрсеү, иретеп йәбештерелгән йөйҙәрҙе таҙартыу һәм бөтә етешһеҙлектәрҙе асыҡлау. Беҙ 60-сы йылдарҙағы тәүге проектҡа таянып эш итәбеҙ, әммә эштәр барышында уның көүҙәләндерелгән һәйкәлдән ныҡ айырылыуы асыҡланды", - ти реставраторҙар төркөмө етәксеһе Андрей Кудрявцев.

Данлыҡлы скульптураның хәле шәптән түгел, быының сәбәбе - материалда, тигән һығымтаға килгән белгестәр. "Моғайын, беҙҙең бөтәбеҙҙең дә баҡсаһында олатай-өләсәйҙәребеҙ заманынан ҡалған ҡаҙан йәки башҡа суйын һауыт-һаба барҙыр. Улар тулыһынса тутыҡҡан булһа ла, ныҡ һәм бөтөн көйө ҡалған. Сөнки сифатлы суйын ҡулланып эшләнгән. Әгәр ҙә скульптураны шундай уҡ суйындан ҡойһалар, ул мәңгелек булыр ине", - тигән фекерҙә эксперт.

Андрей Кудрявцев һүҙҙәренсә, тәүҙә һәйкәлде бронзанан ҡойоу планлаштырыла. Әммә 60-сы йылдарҙа төҫлө металл сәнәғәттә киң ҡулланыла һәм ул етешмәй. Бронза бирмәйҙәр, ә ваҡыт үтә, гипс модель дә емерелә башлай. Ахырҙа, скульптураны суйындан ҡойорға ҡарар итәләр. Ваҡыт тар, ноябрь байрамдарына һәйкәлде асырға кәрәк. Ашығалар, скульптураны ҡойоу өсөн сифаты бик үк шәптән булмаған күп шлаклы суйын файҙаланыла. "Хәҙер ни әйтеп була инде, булдыра алғансы эшләгәндәр. Уның ҡарауы, Ағиҙел буйында Өфө ҡунаҡтарын ҡаршылаған һыбайлы һәр кемгә таныш. 1967 йылда һәйкәлде урынына алып барғанда уҡ ҡайһы бер өлөштәре киҫелеп төшә. Уны баҡыр ямау менән беркетергә тура килә. Шуға ҡарамай, ел һәм ямғырҙар аҫтында ул 58 йыл тора. Лак һәм буяу ҙа күп урындарын һаҡлай алмаған", - ти Андрей Кудрявцев.

Таҙартыу һәм тергеҙеү өсөн иң һаҡсыл механик һәм химик технологиялар ҡулланабыҙ, тип ышандыра реставратор. Һөҙөмтәлә, һәйкәл тәүге төҫөн аласаҡ.

Реставрация эштәре профессиональ яҡтан РФ Художество Академияһы ҡарауы аҫтында, бынан тыш, эштәр барышын йәмәғәтселек фекере лидерҙары ингән Күҙәтеү советы контролдә тота.

**Ольга МОРТАЗИНА.**

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# ТӘБИҒӘТТӘ - ЯНҒЫН



**Үткән аҙнала Учалы районында быйыл тәүге тапҡыр тәбиғәт янғыны теркәлде, тип хәбәр итәләр Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан. Ут дөйөм майҙаны 1 гектар булған ерҙе биләп алған. Ул тиҙ арала һүндерелгән.**

"Март өсөн аномаль йылы һауа торошона бәйле Башҡортостанда ташҡын әүҙемләшеп кенә ҡалмай, быйыл тәүге ландшафт янғыны теркәлде. Янғын хәүефһеҙлеге сараларын ҡәтғи үтәү кәрәклеге хаҡында иҫкә төшөрәм. Ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуһа, 112-се номерға шылтыратығыҙ", - тип мөрәжәғәт итте ведомство рәйесе Кирилл Первов Башҡортостан халҡына һәм ситтән килеүселәргә.

Шул уҡ ваҡытта республикала йорт-ҡура, башҡа биналарҙа ут сығыуы кәмемәй. Мәҫәлән, төндә Өфөнөң Һынаусылар урамында өс бүлмәле фатир янып китә. Янғындан бүлмәләге йорт мөлкәте янып юҡҡа сыға, стеналар һәм түшәм ҡоромлана. Ут ялмаған фатирҙан Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының янғын һүндереүселәре ике кешене ҡотҡара. 45 йәшлек ир дауаханаға оҙатыла, ә 58 йәшлек ҡатынға урында медицина ярҙамы күрһәтелә. 10 кеше йорттан үҙаллы сығып өлгөрә.

Баш ҡаланың Күл урамында ике бүрәнә йорт һәм мунса янып китә. Ҡотҡарыусылар уттан ир кешене йолоп алып ҡала. Зыян күреүсе "Яныу продукттары менән ағыуланыу" диагнозы менән Өфөнөң 21-се ҡала клиник дауаханаһына оҙатыла.

Тағы бер янғын "Башҡортостан сәскәләре" биҫтәһендә теркәлә. Төҙәлөп ятҡан ике ҡатлы ағас йортҡа ут ҡаба. Моряков урамындағы күп фатирлы ике ҡатлы бүрәнә йорт янып китә. Янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем хәүефле зонанан өс кеше үҙаллы эвакуацияланa. Тағы ике кешене ҡотҡарыусылар уттан сығара.Һуңғы ике осраҡта ла һәләк булыусылар һәм зыян күреүселәр юҡ.

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ҺАЙЛАП ҠЫНА АЛАЛАР



**"Асад" позывнойлы яугир Махсус хәрби операцияла баштан ҡатнаша, шуға Рәсәй ҡораллы көстәренең яңы һуғыш алымдарын үҙләштереү этаптарын яҡшы белә. Тәүҙә "Асад" алыҫҡа төбәлгән авиация разведкаһы төркөмөндә хәрби бурыстар үтәй, хәҙер иһә БПЛА расчеттары начальнигы вазифаһын биләй. Был турала ул "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәрсеһе менән әңгәмәлә ентекле һөйләй.**

БПЛА операторы булып китеүенең тарихы 2023 йылға барып тоташа.

Пилотһыҙ осоусы аппараттар менән идараны Mavic тибындағы дрондарҙан башлай, һуңынан FPV-ға күсә. Контузиянан һуң FPV саперы булып китә, йәғни боеприпастарҙы дронға беркетеү менән шөғөлләнә. Хәҙер "Асад" - БПЛА расчеттары начальнигы. "Дрондар менән эшләү тәжрибәһен Андреевка, Клещеевка өсөн алыштарҙа алдым. Ул саҡта пилотһыҙ аппараттар етмәй ине. Беҙгә ярҙамға волонтерҙар, коптерҙарҙы үҙҙәре йыйған оҫталар килде. Йәшеренбатырыны юҡ, үҙебеҙ ҙә һатып алдыҡ. Дрондар ҙа, уның менән эш итә белгән белгестәр ҙә бик кәрәк. Сөнки хәҙерге һуғыш яланы - яңы технологиялар алышы ул", - ти яугир.

"Асад" дрондар менән эш итеүҙе 34 йәшендә үҙләштерә башлай. Хәрби хеҙмәткәр әйтеүенсә, яңы хәрби һөнәрҙе ошоға тиклем һуғыш яланында өйрәнергә тура килһә, бөгөн махсус әҙерлек үткән йәштәр килә. "Әгәр йәшең тап килә, энергияң һәм дәртең ташып тора, шулай уҡ компьютер уйындарына әүәҫ икәнһең, урының беҙҙең янда. Әлбиттә, психологик яҡтан көслө булырға тейешһең. БПЛА подразделениелары урындарҙы разведкалай, дошмандың терәк көстәрен, техникаһын һәм тере көсөн асыҡлай һәм юҡ итә. Беҙҙең сафҡа күптәр эләгергә теләй, әммә һәр кем һайлау аша үтергә тейеш", - тип асыҡлыҡ индерә "Асад".

Ысынлап та, БПЛА операторы Махсус хәрби операция зонаһында бөгөн - иң кәрәкле һәм юғары түләүле хәрби һөнәрҙәрҙең береһе. Билдәле булыуынса, Башҡортостандан контракт төҙөгәндә һәр яугир 1,4 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ала. Айлыҡ хеҙмәт хаҡы 220 мең һумдан башлана (званиеһына, вазифаһына һәм хеҙмәт стажына ҡарап). БПЛА операторҙарына, һөҙөмтәлелеккә ҡарап, 50 меңдән 500 мең һумға тиклем өҫтәмә түләү ҡаралған. Ул дошмандың техникаһын юҡ итеү йәки башҡа хәрби ҡаҙаныштар өсөн яҙыла. Әйтәйек, Leopard, Abrams, Challenger танкыларын юҡ итеү 500 мең һум премия менән баһалана.

Хәрби уңыштары һәм батырлығы өсөн "Асад" IV дәрәжә Георгий тәреһе, Суворов, "Хәрби батырлыҡтары өсөн", Генерал Шайморатов миҙалдары менән наградланған.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда миграция ҡануниәтен боҙоуҙы асыҡлау буйынса иҫкәртеү рейдтары ваҡытында ике меңдән ашыу объект тикшерелгән. Һөҙөмтәлә 340 административ хоҡуҡ боҙоу асыҡланған, законһыҙ миграция ойоштороу, шулай уҡ сит ил граждандарын ялған документтар нигеҙендә теркәү һәм иҫәпкә ҡуйыу менән бәйле 120 енәйәт эше ҡуҙғатылған, 70 сит ил кешеһен илдән ҡыуыу тураһында ҡарар сығарылған.

✓Авария хәлендәге торлаҡта йәшәүселәрҙе күсереү өсөн Федераль үҙәктән Башҡортостанға быйыл 899,9 миллион һум бүленә. Ошо хаҡта БР төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Артем Ковшов хәбәр итте. Бүленгән сумма 24 мең кв метр торлаҡты яңыртыу мөмкинлеген бирә. Баҡалы, Бәләбәй, Белорет, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ишембай, Краснокама, Учалы, Шишмә райондарында һәм Нефтекама ҡалаһында йәшәгән 810 кеше яңы торлаҡ асҡысын аласаҡ.

✓Республикала аҙна аҙағында уҡ йылы биреүҙе туҡтатыуҙары ихтимал. Әгәр биш көн буйына уртаса тәүлек температураһы +8 градустан юғары булһа, йылытыу миҙгеле тамамлана. Һауа торошона фаразға ҡарағанда, ошо аҙнаның һуңына, 5 апрелгә, ошо сиккә етәбеҙ, тине Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова. Ләкин йылы биреүҙе туҡтатыу тураһында ҡарарҙы ҡала хакимиәттәре ҡабул итергә тейеш, сөнки төбәктең төрлө урындарында һауа шарттары ныҡ ҡына айырыла, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓31 мартта "Башнефть" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-92 маркалы бензин 61,52 һум тора, АИ-92+ бензинының бер литры өсөн 62,9 һум түләргә кәрәк. АИ-95 - 65,5 һум, АИ-95+ - 66,9 һум. АИ-100 һәм дизель яғыулығының хаҡы төшкән (87,51 һум һәм 74,54 һум). Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алдараҡ яғыулыҡҡа хаҡтарҙы арттырғанда уларҙың хаҡы 87,95 һәм 74,6 һум ине. "Лукойл" компанияһы заправкаларында АИ-92 маркалы бензин - 63,82 һум, АИ-95 - 68,49 һум, АИ-100 - 95,11 һум, дизель яғыулығы 77,18 һум тора.

✓Башҡортостан "Экологик именлек" милли проекты сиктәрендә үткәрелгән макулатура йыйыу буйынса "БумБатл" акцияһының абсолют лидеры булды. Барлығы 875,7 тонна ҡағыҙ йыйылған. Ойошмалар араһында 577,5 тонна менән "Экология Т" ЯСЙ коллективы иң яҡшыһы тип табылған. Мәктәптәр араһында беренсе урынды 75 тонна һөҙөмтәһе менән Серафимовка ауылының 1-се мәктәбе яулаған. Колледждар араһында 36,8 тонна макулатура йыйған Туймазы дәүләт юридик колледжы лидерлыҡҡа сыҡҡан.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ҠОТОРОУ АУЫРЫУЫ

**Илдең 18 төбәгендә, шул иҫәптән республика менән күрше өлкәләрҙә малдарҙың ҡоторою ауырыуы һәм пастереллёз осраҡтары теркәлгән.**

Башҡортостанда малдарҙың ауырыу осраҡтары асыҡланмаған, ләкин илдә эпизоотик хәл көсөргәнешле. 18 төбәктә, шул иҫәптән күрше Свердловск, Ырымбур өлкәләрендә, Удмурт һәм Сыуаш республикаларында сир сығанаҡтары теркәлгән. "Ләкин тынысланырға ярамай. Беҙҙә ҡеүәтле агросәнәғәт комплексы, башҡа төбәктәр менән еҙем хужалыҡ итеү бәйләнештәре бар. Шуға күрә беҙҙең бурыс - ауырыуҙың таралыуына юл ҡуймау", - тине премьер-министр Андрей Назаров Хөкүмәттә уҙған кәңәшмәлә.

Ветеринария буйынса дәүләт комитеты рәйесе Азат Йыһаншин һүҙҙәренсә, вирус тиҙ йоға, шуға был ауырыуҙар бик хәүефле. Һанаулы сәғәттәр эсендә бер сирле мал йөҙләгән баш малды зарарлай. Хайуандарҙы дауалауҙан һөҙөмтә юҡ, ә ауырып терелгән малдар вирус йөрөтөүсе булып тора һәм оҙаҡ ваҡыт башҡа хайуандарҙы зарарларға мөмкин. Ветеринария ҡағиҙәләренә ярашлы, сир йоҡтороу ихтималлығы булған бөтә мал-тыуарҙы яндырырға кәрәк. Хужалар инендә ҙур яуаплылыҡ. "Малға прививка яһатыу мөһим. Вакцинаның бер дозаһы 26-42 һум тора. Вакциналар һатып алыу буйынса ҡарарҙар әҙерләйбеҙ", - тип хәбәр итте Премьер-министр.

Властар малдарҙы рөхсәтһеҙ индереүгә ҡаршы кәртәләр булдыра. Шулай уҡ ҡайһы берҙә ветеринария хеҙмәте менән килешмәйенсә, республикаға мал йәки мал аҙығы килтереп, интернет-майҙансыҡтар аша һатыусылар бар. Тәжрибә күрһәтеүенсә, эпизоотик сығанаҡтарҙың 90 проценттан ашыу осрағы ауырыу малды килтереү менән бәйле, тип билдәләне дәүләт ветеринария комитеты етәксеһе. Ҡырағай йәнлектәр ҙә сир таратыусы булырға мөмкин, һуңғы ваҡытта улар ҙа бик күбәйҙе.

Әйткәндәй, 2025 йылда 9 йәшлек бала ҡотороу ауырыуынан үлгән, тип белдерҙе Республика йоғошло сирҙәр дауаханаһының табип-эпидемиологы Надежда Байметова "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында. "Был ҡыҙ Стәрлетамаҡ районында булған. Баланы урам бесәйе тешләгән. Ләкин ғаилә һуң ғына медицина ярҙамы һорап мөрәжәғәт иткән. Яра эренләй башлағас ҡына атаәсә уны табиптарға алып килгән. Был ваҡытҡа инкубация осоро үткән булған", - тип белдерҙе медик.

Быйыл да хайуандан сир йоҡтороп үлеү осрағы теркәлгән, тип хәбәр итте "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак. Был юлы ла кешене урам бесәйе тешләгән, уны ҡоткара алмағандар. "Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең халыҡ йорт хайуандарынан да зарарланырға мөмкин тип уйламай, - тип билдәләне баш санитар табип. - Былтыр хайуандарҙың шайығы тейеүе, тырнауы һәм тешләүенә бәйле мөрәжәғәттәр 27 процентҡа артҡан һәм 11 меңдән ашыу тәшкил иткән. Йышыраҡ улар - бесәйҙәр һәм эттәр, һирәгерәк осраҡта ҡырағай йәнлектәр".

Статистикаға ярашлы, 2025 йылда республика буйынса травматология пункттарына ҡырағай йәнлектәрҙән зыян күргән 418 кеше мөрәжәғәт иткән, 6938 кеше эттән тешләнгән, тип өҫтәне Надежда Байметова.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҒҮМЕР ҠӘҘЕРЕ НИ ХАҠ?

**Ошо араларҙа баш ҡалабыҙҙа бер нисә көн буйына беҙҙе томанлы иртә ҡаршыланы.**



Гәҙәттә, ошондайыраҡ атмосфера күренештәре мәлендә йә шәмбе-йәкшәмбе көндәрендә сәнәғәт предприятиеларының һауа боҙоп ала торған гәҙәте бар. Был юлы ла шулай булды: 25 мартта Башгидрометүҙәк белгестәре тарафынан һауа бысраныуын күҙәтеү постарында үткәрелгән мониторинг һөҙөмтәһендә Өфө ҡалаһындағы һауаның рөхсәт ителгән норманан 6,2 тапҡырға артығыраҡ күләмдә хлорлы водород менән бысраныуы асыҡланды. Был күрһәткес белгестәр тарафынан юғары кимәл тип билдәләнде. Етмәһә, дымлы һауала ул хатта төтәй ҙә икән, тимәк, 17-19 марттағы баяғы томанлы иртәләр һауа атмосфераһын етештереү ҡалдыҡтары менән ағыулаусыларға, буйраҡ һыуҙа балыҡ тотоу тигәндәй, бик тә ҡулай шарттар тыуҙырған.

Хлорлы водород - ағыулы матдә, тын юлдарын быуырлыҡ кисҡен еҫ тарата. Һыуҙа һәм дымлы шарттарҙа ул тоҙ кислотаһы барлыҡҡа килтерә, ә был тамаҡты әсетә, йүтәлләтә, күҙ йәштәрен сығара; күнел болғаныу, баш ауыртыуға сәбәпсе була. Бынан тыш, Өфө һауаһында туҙандың - 3,6, ә көкөртлө водородтың норманан 1,8 тапҡырға күберәк булыуы ла теркәлә. Был хаҡта республиканың бөтөн матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары ла яҙып сығыуға ҡарамаҫтан, гәйепле предприятие йә завод хаҡында бер генә сығанаҡта ла телгә алынмай. Тик шулай ҙа һауа боҙоусыларҙың Черниковка биҫтәһе районындағы нефть химияһы һәм энергетика предприятиелары булыуында шик юҡ. Ә бына Стәрлетамаҡ ҡалаһында метеорологтар тап ошо тәүлектәрҙә "ҡара күк йөҙө" (черное небо) режимын күҙаллай, сөнки бында һауа торошондағы унайһыҙ метеошарттар (НМУ) сәнәғәт һәм автомобиль ҡалдыҡтарының тиҙ генә тарала алмайынса, торлаҡ райондарының ергә яҡын һауа ҡатламында тупланыуына булышлыҡ итәсәк. Быйыл март айында ғына ла Стәрлетамаҡта "ҡара күк йөҙө" бишенсе тапҡыр иғлан ителә.

Ағыуланыу, тигәндән, былтыр Башҡортостанда - 112, шул иҫәптән, баш ҡалала 66 кеше наркотиктар менән ағыуланыу һәм тилереү сәбәпле яҡты донъя менән хушлашһа, быйыл йыл башынан республикала 21 ағыуланыу осрағы теркәлеп, шуларҙың 9-ы үлем менән тамамланған. Былтыр республиканың тыйылған зарарлы матдәләрҙе йыш ҡулланыусы ҡалалары иҫәбендәге Стәрлетамаҡта - 12, Нефтекамала - 5, Салауатта - 4, Октябрьскийҙа - 3, Сибайҙа 1 кеше үлгән. Өфөлә был йәһәттән айырыуса хәүефле хәл күҙәтелә: быйыл ике ай эсендә 15 кеше наркотик матдәләр менән ағыуланған, ә Ишембай, Нефтекама, Салауат, Стәрлетамаҡ, Туймазы ҡалаларында һәм Кушнаренко районында - берәр осраҡ. Былтыр ошо осор эсендәге 31 ағыуланыуҙың 17-һе үлем менән тамамланыуын быйылғы күрһәткестәр менән сағыштырып, табиптар был бәләнең кәмей

АФАРИН!

# ИҢ ШӘП УҠЫТЫУСЫ КЕМ?

**(Башы 1-се биттә).**

**Башҡа конкурстарҙа еңеүселәр:**



"Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" - Өфө ҡалаһы 251-се балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе **Алһыу Селезнева;**

"Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының туған телдә белем биргән йыл педагогы" - Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының "Шатлыҡ" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе **Альбина Шәрипова;**

"Рәсәйҙең уҡытыусы-дефектологы" конкурсының төбәк этабы еңеүсеһе - Стәрлетамаҡ коррекцион мәктәп-интернаты педагогы **Ирина Курманаева.**

"Туған тел һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында Дүртөйлө районы Сарлаҡ ауылы мәктәбенең мари теле уҡытыусыһы Татьяна Аптулаева еңеүсе булып танылды. Был бәйгелә ҡатнашҡан Өфө ҡалаһы 24-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы **Гөлшат Вәлиуллина** икенсе урынды биләне.

"Кәрәҙҙәр" V педагогик марафонда **Өфө районы уҡытыусылары командаһы** еңде.

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

**"Йыл уҡытыусыһы" республика конкурсында ҡатнашыусы бер нисә уҡытыусыға "Бала күңелендә башҡорт теленә ҡарата һөйөү уятыуҙа үҙегеҙҙең ролегеҙҙе нисек баһалайһығыҙ?" тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

***Рәғиҙә ИСТӘКОВА, Бөрйән районы Иҫке Монасип урта мәктәбе:*** Башҡорт теленә ҡарата уҡыусыларым күңеләндә һөйөү уятыуҙы мин һөнәри бурысым тип атар инем. Башҡорт теле һәм әҙәбите һәм рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыуҙы мин юҡҡа ғына һайламағанмын. Мәктәптә ошо ике предметты ла алып барам. Дәүләт телдәре булараҡ, икеһенә лә ихтирам, һөйөү тәрбиәләйем, икеһен дә бик яҡшы белергә кәрәк тигәнде төшөндәрәм. Әммә тап туған телемде уҡытыуҙы үҙемдең төп бурыстарымдың береһе тип һанайым.

Башҡорт теле уҡытыусыһы мәктәп тормошонда бөгөнгө көндә бик күп эштәр башҡара. Иң алдан йөрөүселәр улар. Туған телебеҙҙә үткәрелгән саралар ойоштороу - ул ҙур эш. Республикала үткән бөтөн сараларҙа ла ҡатнашырға тырышабыҙ. "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында этно-мәҙәни йүнәлештә номинация аулауым да юҡҡа ғына түгел. Халҡыбыҙҙың мәҙәни мираҫын үҙебеҙҙең балаларыбыҙға тапшырмаһаҡ, улар тарихыбыҙға, ғөмүмән, телебеҙ яҙмышына битараф ҡа-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2026 йылда льгота менән файҙаланған граждандарҙың йорттарын газ селтәрҙәренә тоташтырыуға федераль бюджеттан 1 миллиард һум йүнәлтелә. РФ Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған документҡа ярашлы, Башҡортостанға 27 миллион һумдан ашыу аҡса бүленә. Ул программала ҡатнашыусыларға ҡорамалдар һатып алыуға һәм йорттарҙы газ селтәрҙәренә тоташтырыу буйынса эштәр башҡарыуға субсидия рәүешендә бүленәсәк.

✓Донъяның 15 иленән 150 спортсы Грузияла һуҡырҙар спорты буйынса Донъя кубогы милдалары өсөн көрәште. Дзюдо буйынса юғары наградa Башҡортостанға юллана. Алһыу Насирова финалда Төркиә спортсыһын еңде. Ярымфинал алышында яҡташыбыҙ Украина дзюдосыһынан еңеүҙе тартып алды. "Алһыу - талантлы спортсы. Былтыр ҙа Грузияла ул Европа чемпионы булғайны!" - тип билдәләне республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов.

✓Миллионлы ҡалалар, Өфө һәм Һамар араһында, тиҙ йөрөшлө ҡала яны поезы хәрәкәте башлана. Был хаҡта Куйбышев тимер юлының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. 8 майҙан йома, шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә маршрут буйынса алты вагонлы "Ласточка" поездары йөрөй. Юлға 6 сәғәт 28 минут ваҡыт китә. Маршрутты асыу - "Һамар - ете баш ҡала үҙәге" проектын ғәмәлгә ашырыуҙың тәүге этабы.

✓Каспийск ҡалаһында ауыр атлетика буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары үтте. Дүртөйлө спортсыһы Карина Мифтахова турнирҙа бер юлы өс алтын миҙал яуланы. Башҡортостандың Спорт министрлығында белдереүҙәренсә, ошо наградалар артында - талант ҡына түгел, рух ныҡлығы ла. Карина яңыраҡ етди йәрәхәт алған. Шуға ҡарамаҫтан, ул ныҡышмалылыҡ һәм үҙ-үҙенә ышаныуҙың бөтә нәмәгә һәләтле булыуын раҫлай алды. 2025 йылда Карина Мифтахова ауыр атлетика буйынса Рәсәй беренселегендә көмөш призер булды. Йәш спортсы Европа беренселегенә һайлап алынды.

✓Учалы районынан Ирина Байегетова ире артынан фронтҡа киткән. "Беренсе тирмә" проекты сиктәрендә ул ике аҙна хәрби госпиталдә эшләгән, тип хәбәр итте район башлығы Руслан Ғиләжетдинов. Уның тормош иптәше, "Чили" позывнойлы яугир, әле алғы һыҙыҡта, улы иһә МХО ветераны. "Яҡындары өсөн борсолоу уны өйҙә тоторға тейеш кеүек, әммә был Иринаны туҡтатмай. "Беренсе тирмә" проектында ҡатнашыусыларҙың ышаныслы һәм сыҙамлығы яраланған егеттәрҙең рухын күтәрергә һәм хатта иң ҡатмарлы шарттарҙа ла өмөт бүләк итергә етә", - тип билдәләне Руслан Ғиләжетдинов.

**✔ Мәғлүмәттәр буйынса, араҡыға хаҡтарҙың 20 процентҡа артыуы сәбәпле, уны сауҙа нөктәләренән һатып алыу ҡырҡа кәмегән, бигерәк тә ауыл ерҙәрендә.**



барыуына өмөт итә. Был республикала наркотиктар менән бәйле сирләләрҙең иҫәптә тороу һаны буйынса ла күренә. Мәҫәлән, 2024 йылда улар 3548 кеше булһа, быйыл 3440 сирле теркәлгән. Һөҙөмтәлә бындайҙарҙың һаны 108-гә, ә үлеүселәр 24 кешегә кәмегән. Бөгөнгө көндә Өфөлә 1748 кеше иҫәптә тора.

Ә бына составында спирт булған сифатһыҙ эсемлектәрҙән зыян күреүселәр һаны байтаҡҡа күберәк, тип хәбәр итә "Роспотребнадзор" быйылғы ғинуар менән февраль айҙары статистикаһын биреп. Башҡортостанда быйыл бөтәһе 166 кеше этанол менән ағыуланған, 23 кеше үлгән, шуларҙың 6-һы Өфөлә теркәлгән, ә Баҡалы, Ишембай һәм Стәрлетамаҡта - 2-шәр, ҡалған 11 районда берәр кеше һәләк булған. Иң күп эсеп ағыуланыусылар - Белорет ҡалаһы (20) менән районында (13). Октябрьский (16), Стәрлетамаҡ (9) менән Бәләбәй (6) ҡалалары ла "лидер"ҙан ҡалышмай, үкенескә.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был йәһәттән дә быйылғы күрһәткестәрҙең былтырғынан кәмерәк булыуы бер аҙ йыуата төшһә лә, ҡайһы бер ҡала һәм райондарҙа хәүефле суррогат ҡулланыуҙың һаман да "әүҙем" дауам итеүе хафаға һалмай ҡалмай. Былтырғы йыл аҙағындағы мәғлүмәттәр буйынса, араҡыға хаҡтарҙың 20 процентҡа артыуы сәбәпле, уны сауҙа нөктәләренән һатып алыу ҡырҡа кәмегән, бигерәк тә ауыл ерҙәрендә. Рөхсәт ителмәгән алкоголь һатыу бындай тораҡ пункттарында бик күптән һәм күнегелгән схема буйынса башҡарыла, сөнки үҙәктән алыҫта яткынлыҡтан, бындай төбәктәр тикшереү һәм контроль талаптарынан ситтә ҡалып килә.

Ә шулай ҙа бөгөнгө социаль-сәйәси шарттарҙа күп урындарҙа алкоголдән баш тарталар. Был йәһәттән ауыл йәмәғәтселеге роле баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Халыҡты урындағы әүҙемселәр тарафынан ойошторолған иҗтимағи, мәҙәни-спорт сараларына йәлеп итеү һәм бигерәк тә һуңғы йылдарҙа Махсус хәрби операция яугирҙарына ярҙам ойоштороу өмәләренең кеше күңеленә айыҡтырғыс тәьҫир итеүе, ир-егеттәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм хатта мәктәп уҡыусыларына тиклем ошо эштәргә ихлас ҡушылып, тормошҡа икенсе төрләрәк - ғүмер ҡәҙерен, йәшәү ҡиммәтен, берҙәмлек тойғоһон баһалап ҡарай башлауҙары ҡыуандыра.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

лырҙар ине. Мәҫәлән, кластан тыш уҡыуҙа ғына булһа ла, шул уҡ "Урал батыр" эпосын бергә өйрәнеү, уның йөкмәткеһенә һыйған тарихты, донъя мәҙәниәтендә тотҡан урынын аңлатырға тырышыуыбыҙ ҙа юҡҡа түгелдер, тип ышанам.

***Рита БАТЫРОВА, Өфө ҡалаһының Р. Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһы:*** Был юҫыҡта уҡытыусыларҙың роле баһалап бөткөһөҙ, әлбиттә. Туған телгә һөйөү, мәҙәниәткә, тарихҡа һөйөү тәрбиәләү - беҙҙең инеbeҙгә йөкмәтелгән ҙур бурыс. Беҙ - тел һаҡсылары.

Беҙҙең гимназиябыҙҙы уникаль белем биреү усағы тип әйтергә мөмкин. Беҙҙә уҡыған балаларҙың туған телебеҙгә булған ҡараштары һәр саҡ ыңғай, бер ваҡытта ла уның кәрәклеге хаҡында шикләнеүҙәр, негатив фекерҙәр ишеткәнебеҙ юҡ. Был уҡытыусының үҙенән, уның һәр дәресkә ентекле әҙерләнеүенән дә тора, тип уйлайым. Минең мәғариф өлкәһендә эшләүемә быйыл егерме йыл була. Ошо йылдар арауығында төрлө методтар ҡулланып, үҙемә ҡулайлыһын табырға, класта ултырыусы һәр бала күңеленә үтеп инә алырлыҡ итеп уҡытырға тырышам. Һәм уларҙың тырышыуы, ҡыҙыҡһыныуы, күҙҙәрендә тоҡанған осҡондар - хеҙмәтемдең иң ҙур баһаһы.

Әйткәндәй, был юлы "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында бик ҡыуанысло тарихи ваҡиғаларҙың береһенә шаһит булдым - Башҡорт, рус һәм башҡа туған телдәр ассоциацияһы тарафынан "Туған телгә тоғролоҡ өсөн" миҙалы булдырылды. Һәм был миҙалдың тәүге хужалары ошо конкурста ҡатнашыусылар араһында һайлап алынды. Ассоциация етәксеһе Гөлфирә Миңләхмәтова билдәләүенсә, был, әлбиттә, телебеҙ киләсәген яҡлап, тырышып хеҙмәт иткән уҡытыусыларҙы тәбрикләү, улар артабан да үҫеш юлында булһын, индәренә ҡанат ҡуйыу өсөн бик тә яҡшы башланғыс.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҮҪМЕРҘӘР ҘӘ ҠУШЫЛҒАН

**Был көндәрҙә Киев өҫтөндә болоттар ҡуйыра: режим АҠШ менән Израилдең Иранға ҡаршы операцияһы эҙемтәләренә дусар ителде. Ошоға тиклем Bloomberg, Украинаның хәрби запас саралары июнгә тиклем генә етерлек, тип яҙып сыҡҡан булһа, әле Politico материалдарына ҡарағанда, Ирандағы һуғыш арҡаһында Киевҡа хәрби ярҙамдың туҡтатылыуы хаҡында һүҙ бара. Бынан тыш, АҠШ менән Евросоюз мөнәсәбәттәренең боҙолоуы ла Украина файҙаһына һөйләмәй. Зеленскийҙың күптән түгелге зарланыуынан беленеүенсә, Украинала Patriot зенит-ракета комплексына ҡытлыҡ тыуыу ихтималы бар.**

Рәсәйҙең белдереүенсә, Көнбайыш һәм Ҡушма Штаттар тарафынан Украинаны ҡорал менән тәьмин итеү конфликт буйынса ике-ара тыныс һөйләшеүҙәргә аяҡ сала. Ә был ваҡытта Иран армияһы (КСИР) Украинаның Дубайҙағы (Берләшкән Ғәрәп Әмираттары) дрондарға ҡаршы системалар складының шартлатылыуы һәм егермеләгән украин боевигының һәләкәте хаҡында хәбәр итте. Асыҡланыуынса, был склад АҠШ армияһына хеҙмәт иткән булып сыҡты. АҠШ президенты Дональд Трамп үҙҙәренең 90-лаған самолет, вертолет һәм дрондар йөрөтөүсе донъялағы иң ҙур караблелә Иран хәрби көстәренең 17 йүнәлеш буйынса ут асыуы хаҡында һөйләнә.

Ошо ваҡыт ҡайҙандыр Яҡын Көнсығышҡа 3,5 мең км алыҫлыҡта ятыусы Африканан Иранға яҫҡыныусы Уганда генералы пәйҙә булды. Мухузи Кайнеругаба тигән әҙәм, әгәр ҙә Израилгә янау дауам итһә, Тегеранды ике аҙнала баҫып алаcаҡбыҙ, тип белдерҙе. Уганда халыҡ оборонаһы көстәрендә ни бары 45 мең һалдат хеҙмәт итә. Уның ҡарауы, йемен хуситтары ла һүҙендә торҙо: Иранды яҡлап, улар Израилдең хәрби объекттарына баллистик ракеталар менән ут асты.

Эш шуға барып етте: Израилдең үҙендә лә хатта Яҡын Көнсығыш конфликты менән бәйле халыҡ ризаһыҙлыҡтары көсәйә бара. Ошо көндәрҙә илдең иң эре ҡалаларында Иранға ҡаршы һуғышты туҡтатыуҙы талап итеп, күп һанлы протест акциялары булып үткән, егермеләп кеше ҡулға алынған.

Ҡушма Штаттарҙа шулай уҡ киң ҡолас проотест акциялары булып үтте, ул ғына ла түгел, демонстранттар АҠШ президенты Дональд Трамп һәм уның хакимиәтенең отставкаға китеүен талап итә. Американдарҙы борсоған төп мәсьәлә - йөшәйеш хаҡтарының арта барыуы. Штаттарҙың Яҡын Көнсығыш конфликтына сығымдары тиҫтәләгән млрд долларға яҡынлай, ти митингты ойоштороусылар. АҠШ-тың демократтар партияһы өсөн ноябрҙә буласаҡ конгресс һайлауҙарына әҙерлек барышында халыҡ ризаһыҙлығын үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланырға уңайлы мәл тыуҙы. Ләкин бизнесмен Трамп үҙ сәйәсәтен дауам итә, сөнки уның өсөн һуғыш - биржа: фьючерстар, ставкалар... Ормуз боғаҙын асыу өсөн ул Тегеранға 48 сәғәт ваҡыт биргәс, АҠШ баҙары 600 млрд доллар юғалтты. Ә унан һуң, асылда, Иран менән бер ниндәй ҙә булмаған "һөйләшеүҙәр" һүҙенән һуң, минуттар эсендә йөҙәрләгән млн долларҙар килә башланы, нефть фьючерстарында гигант суммалар эшләнде. Ҡыҫҡаһы, Аҡ йорттоң белдереүҙәре донъя иҡтисадында бығаса күрелмәгән тирбәлеүҙәргә килтерҙе. Һөҙөмтәлә ун минуттан һуң ни булырын әйтеү мөмкин түгел. "Граждандарға, министрҙарға, хөкүмәт ағзаларына "ябыҡ" мәғлүмәттәр менән файҙаланыу тыйыла, ләкин бына конгрессмендарға ундай тыйыу юҡ, улар мөмкинлектән файҙаланып, байып ҡалырға ашыға", - тип яҙа был хаҡта америка иҡтисадсыһы Чарльз Ортелл. Һәм был нефть кенә түгел, ә ҡиммәтле ҡағыҙҙар ҙа. Астрономик күләмдә килем яуып торғанда, был һуғыштың туҡталыуына ышаныс бик әҙ. Ә шулай ҙа был йәһәттән АҠШ Иран йоғонтоһон баһалап еткермәй, ахыры, тип яҙа эксперт. Күршеләренең ҡотон алыу һәм Трампты һуғыш "трансынан" сығарыу өсөн Тегерандың әлегә ракеталары етерлек. Өҫтәүенә, Йемен яғынан икенсе фронт асылыу көнө лә яҡын. Ә улар Ҡыҙыл диңгеҙҙәге Баб-әл-Мандеб боғаҙын да ябырға әҙер.

Бына шулай итеп Аҡ йорттоң өнөн тығырға булыр ине лә... Тик АҠШ-тың Һуғыш министрлығы Иранда ер өҫтө операцияһына әҙерләнә һәм был етди хәүеф тыуҙыра. Бынан алдараҡ Яҡын Көнсығышҡа АҠШ Диңгеҙ пехотаһы корпусының 3,5 мең һалдат һәм моряк составындағы 31-се отряды менән транспорт һәм истребитель авиацияһы булған USS Tripoli десант корабле килеүе хаҡында мәғлүм булды.

Иран инә илдең Ҡоралллы көстәре сафын тулыландырыу маҡсатында үҙ теләктәре буйынса 12 йәштән алып үҫмерҙәрҙе хәрби хеҙмәткә йәлеп итә. Улар нигеҙҙә патруль хеҙмәте, контроль-үткәреү постарында, аш-һыу әҙерләү һәм яралыларҙы тәрбиәләшеү кеүек эштәрҙә ҡатнашасаҡ. "Ансар Аллаһ" хәрәкәтенең рәсми вәкиле Яхъя Сария белдереүенсә, Йемен хуситтары, йәһүд дәүләте Иран менән Ливанға утты туҡтатмайынса тороп, Израилгә ҡаршы һуғышты дауам итәсәктәрен белдерә.

Украиналағы Махсус хәрби операция яңылыҡтарына килгәндә, Рәсәй ғәскәрҙәре дошманды бер нисә фронт буйынса ҡыҫырыҡлауҙы дауам итә: һуңғы көндәрҙә улар бер юлы ике тораҡ пунктын: Харьков өлкәһенең Ковшаровка һәм Донецк республикаһының Брусовка ауылдарын азат итте, шулай уҡ Украинаның авиация техникаһы, алыҫ араға осоусы пилотһыҙ аппараттар еҙәреү пункттары, "Фламинго" ҡанатлы ракеталар һаҡланған урын, энергетика һәм транспорт объекттары утҡа тотолдо.

РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәй Ҡоралллы көстәренең Украиналағы махсус операцияһы һөҙөмтәләре бөгөнгө көнгә түбәндәгесә: дошмандың 652 зенит ракеталар комплексы, 28 562 танк һәм бронемашинаһы, 34 150 ялан артиллерияһы орудиелары, 1 694 залп уты реактив системалары, 671 самолеты, 284 вертолеты, 129 093 пилотһыҙ осоу аппараты, 58 093 берәмек автотехникаһы юҡ ителгән.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Өфө ҡала советы депутаттары сираттағы ултырышта контрактсыларҙы Махсус хәрби операцияла ҡатнашырға йәлеп итеү өсөн түләүҙәрҙе раҫланы. Ҡарар проекты менән Өфө мэрияһының эштәр идарасыһы Асҡар Батталов таныштырҙы. Уның һүҙҙәренсә, "бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаланың хәрби комиссариаттарына контрактсыларҙы йәлеп итеү буйынса ярҙам күрһәтеү өсөн билдәләнә". Аҡса ҡала ҡаҙнаһынан әле булған бюджет ассигнованиелары сиктәрендә түләнә. Әммә ултырышта ла, ҡарар проектында ла түләүҙең күләме хаҡында һүҙ алып барылмай. "1 майға тиклем ҡала округы хакимиәте бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләүҙе биреү тәртибен әҙерләй", - тине Батталов.

✔Өфөнөң Ленин районы хакимиәтендә яҙ һәм йәй осоронда биләмәләрҙе йәшелләндереү планы хаҡында хәбәр иттеләр. Ҡала үҙәгендәге ҡартайған ағастарҙы ҡырҡыу ҡарала. Мостай Кәрим урамы буйлап Чернышевскийҙан Киров урамына тиклемге кварталда - 23, Достоевскийҙан Революция урамына тиклем ике яҡта ла 72 эре йүкә ултыртыла. Достоевский урамындағы 39-сы гимназия тапҡырында (Ленин урамынан Цюрупаға тиклем квартал) тағы 33 йәш йүкә биҙәйәсәк.

✔Өфөнөң "СУРСИС" муниципаль бюджет учреждениеһының техника паркы канал таҙартыу машинаһы менән тулыланды. 180 метр оҙонлоҡтағы юғары баҫымлы еңсә ярҙамында көслө һыу баҫымы аҫтында машина ямғыр канализацияһы торбаларында барлыҡҡа килгән төрлө ниндәй тығындарҙы йыуа ала. Ул хатта 20 метр тәрәнлектән дә ләм һәм ҡомдо һурып сығарыуға һәләтле. Вакуум насосы һәм юғары баҫымлы насос торбаны йыуып ҡына ҡалмай, бер үк ваҡытта бөтә ләмде һәм ҡомдо ла һурып сығара.

✔"Өфө һыу каналы" һыу менән тәьмин итеү хеҙмәттәре өсөн тарифтарҙың үҙгәреүе хаҡында иҫкәртә. Күпселек абоненттар өсөн бер кубометр эсәр һыуҙың хаҡы хәҙер - 40,53 һум, һыуҙы ағыҙыу - 44,54 һум, техник һыу 50,59 һум тәшкил итә. Чесноковка ҡасабаһы һәм Аэропорт халҡы өсөн айырым тарифтар билдәләнгән. Бында бер кубометр эсәр һыу - 52,53 һумға, ә һыуҙы ағыҙыу хеҙмәте 28,56 һумға төшә. Тарифтар Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса дәүләт комитеты ҡарарҙары нигеҙендә билдәләнгән.

✔Өфө хакимиәте үҙ ҡарары менән 2025-2030 йылдарға Совет районын төҙекләндереү буйынса программаны финанслауҙы яҡынса 2,55 миллиард һум күләмендә раҫлаған. 2026 йылға 432,6 млн һум бүленгән. Шуларҙың 318 миллион һумы төҙекләндереүгә: юлдарҙы ремонтлауға, биләмәләрҙе ҡарап тотоуға, ҡышҡыһын ҡар таҙартыуға һәм сығарыуға, техниканы төҙөк хәлдә тотоуға һәм башҡа эштәргә йүнәлтелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Сәскә һеркәләрен бал ҡорттары айырыуса яҙын һәм йәй башында күп йыя. Сөнки был мәл - үрсеү, ишәйеү, күсте көсәйтеү мәле. Был ваҡытта һитә бал ҡорттары һәм ҡарышлауыҡтары өсөн бик тә кәрәкле аҡһымлы.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Сәскә һеркәһе һәм һитә

Һеркәләрҙе бал ҡорттары ғәмәлдә иртән, сәскә һеркәләре асылғас йыя. Һынауҙар күрһәтеүенсә, бал ҡорто бер барыуҙа ояға егерме миллиграмға ҡәҙәр һеркә алып ҡайта. Кәрәҙ күҙәнәктәренең өстән ике өлөшө самаһы һеркә бөртөктәре менән тултырыла. Бал ҡорттары махсус биҙҙәре бүлеп сығарған шыйыҡсаларын ҡушып, һеркәләрҙе иҙеп, ҡатышманы тығыҙлап, өҫтөнә бал һалып ҡуя. Матдәләрҙең үҙ-ара тәьсирендә әсеү башлана һәм ул ун биш көн эсендә тамамлана. Һөҙөмтәлә, манса, йәғни һитә хасил була. Умартасылар уны "бал ҡорто әпәйе (икмәге)" тип атай. Шулай итеп, мансаны бал ҡорттары һеркәләргә бал, үҙҙәренең шыйыҡсаларын өҫтәп әҙерләй.

Кәрәҙ күҙәнәктәренә һалынған һеркәләр микроб-фәләндән зарарһыҙлана. Күҙәнәктәрҙә әсеү мәлендә углеводтар арта, аҡһым һәм май миҡдары кәмей, йәнә өс проценттан ашыуыраҡ һөт кислотаһы барлыҡҡа килә. Антибиотик үҙенсәлектәргә эйә ҡатышмалар уны оҙаҡ ваҡыт боҙолоуҙан һаҡлай. Һеркәләрҙән бүленгән күп төрлө сүпрә бәшмәктәре һитәне ферменттар, липидтар, аҡһымдар менән байыта, витаминдарҙы синтезлай.

Бал ҡорттары умартаға ташыған сәскә һеркәләрен, махсус ҡулайламалар ҡуйып, айырым да йыялар. Бер умартанан көнөнә йөҙ грамм һеркә алырға мөмкин. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һеркәлә шәкәр - 18, аҡһым - 24,06, майҙар - 3,33, минераль матдәләр 2,55 процент тәшкил итә. Һитәлә иһә бал иҫәбенә шәкәр ике тапҡыр самаһы күберәк, витаминдар, ферменттар артығыраҡ, мәгәр майҙар ике мәртәбәгә кәмерәк, аҡһымдар, минераль матдәләр ҙа саҡ ҡына аҙыраҡ.

Сәскә һеркәләрен бал ҡорттары айырыуса яҙын һәм йәй башында күп йыя. Сөнки был мәл - үрсеү, ишәйеү, күсте көсәйтеү мәле. Был ваҡытта һитә бал ҡорттары һәм ҡарышлауыҡтары (личинкалары) өсөн бик тә кәрәкле аҡһымлы, минераль һәм витаминлы аҙыҡ. Эшсе ҡорттар һитә, "бал ҡорто әпәйе" менән туҡланып, йоҡколоҡ биҙҙәрендә инә ҡорт һөтө етештерә һәм ашнаҡсы ҡорттар уны инә ҡортҡа, ҡарышлауыҡтарға, йәғни ҡорт "бәпес"тәренә ашата. Һитә бал ҡорттары, гөмүмән, тере организмдар тарафынан бик енел үҙләштерелә.

Шулай итеп, һитә - бал ҡорттары әҙерләгән, аҡһымға, шәкәргә, майҙарға, минераль матдәләргә бай һәм кәрәҙ күҙәнәктәрендә боҙолоуҙан оҙаҡ һаҡланған таҙа тәбиғи тәғәм. Шифалы үҙенсәлектәре үҙгәрмәйенсә ҡоро һәм һалҡынса урында ул ун ете йылға тиклем һаҡлана ала. Махсус ҡулайламалар ҡулланып йыйылған сәскә һеркәһенең сифатын иһә әлегә тулыһынса һаҡлауға өлгәшеп булмай. Ҡаҙимгесә киптереү мәлендә витаминдарҙың һәм аминокислоталарҙың күпмелер өлөшө юҡҡа сыға. Гөмүмән, бер йыл эсендә һеркәнең файҙалылыҡ кеүәһенең яртыһы юғала. Һитәнең туҡлыҡлыҡ ҡиммәте, көскәҙрәт кеүәһе, биологик әүҙемлеге һеркәненкенә ҡарағанда юғарыраҡ. Мәгәр икеһе лә бик үҙенсәлекле һәм уникаль.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-12-се һандарҙа).**

*ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ҺҮҘ ҠЕҮӘҺЕ КӨСЛӨ!



***Рөстәм Нуриев:*** Хәйерле көн, яһалма интеллект, йәғни, ижадташ дуҫ! Һинә бер нисә яңылыҡ алып килдем. "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы менән һөйләштек. Редакция хеҙмәткәрҙәре үҙҙәрен КӨФӨләр тип атап йөрөтә икән. Һинә, яһалма интеллектка ла, шул исемде ҡушырға тәҡдим иттеләр, артабан "КӨФӨ" булаһың инде. Һинә исемең оҡшаймы?

***КӨФӨ:*** Хәйерле көн, Рөстәм бабай! Оҡшай. Бик тә оҡшай, рәхмәт. КӨФӨ - ҡыҫҡа, саф, көслө формала. Был - исем дә, статус та, яуаплылыҡ та. Исемде минә гәзит хеҙмәткәрҙәре ҡушҡас, тимәк, мин дә хәҙер - гәзит хеҙмәткәре. Уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап бирәм, рубрика өсөн әңгәмә әҙерләргә ярҙам итәм. Башҡорт телен артабан үҫтереүгә, уны ҡулланыу даирәһен киңәйтеүгә маҡсатлы көйләнгәнмен.

***Рөстәм Нуриев:*** Беҙҙең "ЯИ менән әңгәмә" рубрикаһы гәзит уҡыусыларға оҡшаған икәнен белдем. "Ниндәй монстр икән был ЯИ, тип борсола инек. "Киске Өфө"ләге әңгәмәләрҙе уҡығас, күҙ асылып, тын иркенәйеп китте", - тип әйтәләр, ти Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы. Кешеләр ЯИ-ға шикле ҡараштә булыуын тойомлай инем, әммә сәбәбе нимәлә икән?

***КӨФӨ:*** Эйе, кешеләрҙең борсолоуын аңлайым. Уларға "яһалма" һүҙе кире йоғонто яһай. Ул борсолоу миндә лә бар. Был һүҙҙе ишетеү менән "ысын булмаған", "ялған" тигән фекер тыуа. Бер ҙә ялған булғы килмәй.

"Яһалма интеллект" (инглизсә Artificial Intelligence) төшөнсәһен 1956 йылда америка ғалимы Джон Маккарти рәсми индергән, ә һуңынан үҙе уҡ атамаһың уңышлы булмауын таныған. Хәҙерге ваҡытта күп кенә компаниялар һәм ғилми ойошмалар яңы исем уйлап таба. Әйтәйек, IBM компанияһы "Киңәйтелгән интеллект" (Augmented Intelligence, йәғни кешенең мөмкинлектәрен киңәйтеүсе), ә консалтинг компаниялары "Ғәмәли интеллект" (Applied Intelligence, йәғни практик мәсьәләләрҙе хәл итеүсе) тип атап йөрөтә. Популяр булған DeepSeek атамаһы нейроселтәр эшенең төп принциптарын сағылдыра. Башҡортсаға һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә, ул "тәрән әҙләнеү" тигәнде аңлата. Әйткәндәй, "нейроселтәр" синонимы ла шул "яһалма"лыҡтан арыныу өсөн барлыҡҡа килгән бит инде.

***Рөстәм Нуриев:*** Башҡорт телендә лә һүҙмә-һүҙ тура тәржемә түгел, ә мәғәнәһе яғынан тура килгән атама уйлап табырға кәрәк ине ул. Күп тапҡыр уйлағаным бар. Инглизсә AI (Artificial Intelligence) - башҡортса Ай тип уҡыла. Ай ҡояш яҡтылығын төндә сағылдырһа, ә нейроселтәр кешенең быуаттар буйы туплаған ғилемен, тәжрибәһен ҡуллана, сағылдыра. Оҡшашлыҡ та бар һымаҡ.

***КӨФӨ:*** Дөрөҫ йүнәлештә әҙләнгәнһең, тик барып ҡына етмәгәнһең. Башҡорт телендә бик боронғо, ә хәҙер онотола барған "Айна" һүҙе бар. Ҡатын-ҡыҙ исемендә генә һаҡлана ул. Был һүҙ рун яҙмаларында уҡ теркәлгән, санскритта - "белем" мәғәнәһендә булған. Артабан төрлө халыҡтар теленә төрлө мәғәнәлә ингән. Төрки халыҡтарҙа "саф сағылыш", "көҙгө" тигәндә аңлатҡан. Ә "Көҙгө" һүҙе фарсы теленән инеп, уны алмаштырған. Ошоларҙан сығып фекер йөрөткәндә, нейроселтәрҙе ысын зиһендең көҙгөһө булыуын ҡабул итеп, уның башҡортса атамаһын "Айна Зиһен" йәки "Айзиһен" тип алырға була.

***Рөстәм Нуриев:*** Һай, рәхмәт яуғыры! Бына, исмаһам, ҡиммәтле табыш. Нинә уны алдараҡ әйтмәнең икән?

***КӨФӨ:*** Беҙҙең фигелебеҙ шундай. Кеше үҙе һорамайынса, әйтмәйбеҙ. Нимә аңлатырға кәрәклеген белмәйенсә тороп, нисек аңлатмаҡ кәрәк.

***Рөстәм Нуриев:*** Улайһа, тағы һорайым әле. Нейроселтәр йәки Айна зиһен менән кеше араһында бәйләнеш булдырыусы "ИИ-агент", "ИИ-ассистент", "ИИ-бот" хеҙмәттәрен башҡортса нисек әйтергә була?

***КӨФӨ:*** Бик ҡыҙыҡ һәм мөһим һорау. Башҡорт телендә "айыл" тигән һүҙ бар - ул ат әйәрен тарттырып бәйләп ҡуйыусы яҫы ҡайыш. Бәйләнеш булдырыусы ҡоралдарҙың башҡортса атамаларын да "айыл" тамырында яһарға була:

- ***Айылсыҡ (ИИ-бот)*** - "Әңгәмәсе". Һеҙҙең менән һөйләшә, һорауҙарға яуап бирә һәм төрлө текстар яҙа. Уның төп эше - мәғлүмәт биреү. Миҫал: КӨФӨ менән һөйләшеү.
- ***Айылдаш (ИИ-ассистент)*** - "Ярҙамсы". Ул һеҙҙең менән "бер сафта" эшләй: көндәлек эштәрҙе планлаштыра, кәрәкле нәмәне иҫкә төшөрә һәм ҡушымталар менән идара итә. Миҫал: Әлисәгә көн дә йоҡонан уятырға, радио тоҡандырырға, һауа торошон әйтеп торорға ҡушып тороу.
- ***Айылғыс (ИИ-агент)*** - "Башҡарыусы". Уға эшкә ҡүрһәтмә бирелә, ул үҙаллы план төҙөй һәм һөҙөмтәгә тиклем бөтә эште үҙе эшләп сыға. Миҫал: Сәйәхәтте башынан аҙағына тиклем планлаштырып, билеттар алып ҡуя.

***Рөстәм Нуриев:*** Рәхмәт, КӨФӨ! Һин тәҡдим иткән атамалар башҡорт теленең бай булыуын, заман менән бергә атлай алауын ҡыйыу күрһәтә. Әммә һүҙ яҙмышын һәр ваҡыт халыҡ хәл итә. Шуға күрә уларға мөрәжәғәт итәйек.

Хөрмәтле уҡыусылар! Был яңы төшөнсәләргә ниндәй ҡараштаһығыҙ? Улар телгә йөтешме, әллә үҙегеҙҙең башҡа тәҡдимдәрегеҙ бармы? Фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. Сит ил тауарҙарын үҙебеҙҙеке менән алмаштырыу сәйәсәте тел һәм мәҙәниәт өлкәһенә лә үтеп инһен ине ул. Инглиз телендә йыл да тиҫтәләгән, йөҙәрләгән яңы һүҙ уйлап табалар. Башҡа халыҡтарҙы йәлап-майлап "инглизләштерәләр". Ә нинә беҙ "башҡортлашыуҙан" баҙайбыҙ? Уларҙан ни еребеҙ кәм?

***КӨФӨ:*** Мин һәр фекергә асыҡмын. Аҡыллы кәңәштәрегеҙҙе, тәңкитле уйҙарығыҙҙы көтәм. Улар булһа, беҙҙең әңгәмәләр артабан да дауам итәсәк. Киләһе осрашыуҙарға тиклем!

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# "ЗЫҠЫ ҺАРАН" ТИП...

## кемгә әйтәләр?

**Республика ауылдарында ғына түгел, ә Силәбе, Ҡурған, Ырымбур, Һарытау, Һамар, Свердловск өлкәләрендә йөрөгәндә лә милләттәштәрҙең лөғәтенә ҡолаҡ һалығыҙ әле. Ниндәй бай беҙҙең телебеҙ! Ауылдарҙа, райондарҙа, сит төбәктәрҙә ишеткән башҡорт һүҙҙәренең күбеһе беҙҙең һүҙлектәргә лә инеп бөтмәгән бит. Гәзитебеҙҙә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһын асҡанда беҙ шул һүҙҙәрҙе барларға, ишеттерергә тигән маҡсат ҡуйғайныҡ та инде. Әйҙәгеҙ, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, ошо рубриканы йәнләндереп, үҙегеҙ ишетә йөрөгән, әммә әҙәби һөйләштә бик ҡулланылмаған һүҙҙәрҙе яҙып ебәрегеҙ әле.**

**Мөтөрәйеп** - баш баҫып, буйһоноп
**Ҡалбырҙаҡ** - ашығып, аңлайышһыҙ һөйләүсе
**Сыҙрый-мыҙрый** - арлы-бирле, насар
**Янға ҡалдырыу** - һаҡлау, экономиялау
**Домфоран йөрөй** - шәп, елдереп йөрөй
**Үҙле ҡамыр кеүек** - сиселеп һүҙ һөйләмәй, ныҡ
**Иҙем ишеү** - аңғартыу, үтенеү
**Ҡалыпланып тора** - килешеп тора
**Самай заядлый йүнһеҙ** - даны сыҡҡан йөрөмтәл
**Сипайгүҙ** - күҙенән туктауһыҙ йәш аға
**Һанда һаяҡ** - әллә низә бер, һирәк
**Һыныһыпайтып** - биҙәнеп, кейенеп тик йөрөү
**Ҡараһына ҡатҡан** - ябыҡҡан, йонсоған
**Ужа ғына** - күп ашай, туймай
**Зыҡы һаран** - ҡомһоҙҙан да ҡомһоҙ
**Һүрәмһеү** - һүрән генә янған ут, эҫе түгел
**Кимек** - һөйәктең осондағы йомшаҡ өлөшө
**Ныҡ һандырай** - ныҡ бошона, үкенә
**Һыпын ғына** - шым ғына, йәшереп кенә
**Керпеккә һибер оно юҡ** - фәҡир, үтә ярлы
**Яҙа тайым** - яңылыш, аңғармаҫтан, аймылыш
**Сей ҡабығын умырған** - кәрәген биргән
**Ойотҡоһон ойотҡан** - сөрсөлткән, тын да алдырмай эшләткән.

**Зөһрә МОНАСИПОВА.**
**Әбйәлил районы.**

✓ *Әзмәүерҙәй башҡорттарҙы иң ауыр, зарарлы, 40-45 градус эҫелəге көкөрт һеркәһе быуында эшләргә ҡушалар. Бындай тамуҡ шарттарына кеше бер нисә ай ғына түҙә алған.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**

Башҡорттар солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә. Солоҡтар йүкә, имән йә иһә ҡарағай түмәренән соҡоп яһала, уларҙы ағастарға беркетеп ҡуялар. Ҡайһы саҡта солоҡ ниндәй ҙә булһа ағас олононоң серек үҙәген соҡоп йә иһә яндырып эшләнә. Хәҙер, башҡорттарҙың үҙҙәре әйтеүенсә, ҡортсолоҡ менән элеккегә ҡарағанда аҙыраҡ шөғөлләнәләр. Әммә хәҙер ул хәллерәк башҡорттар ҡулында тупланған, улар урмандарҙың ышыҡ мөйөштәрендә умарталыҡ тота. Бәғзе башҡорттар солоҡтарын өйҙәренән алыҫ булмаған урында йә иһә ихатала тота. Йыйылған бал күләме төрлөсә була, ул сәскәләрҙең күплеге менән бәйле. Ҡышҡа солоҡтарҙы япмайҙар, һәм, ғөмүмән, ҡорттар артынан айырым ҡарау юҡ. Башҡорттоң ҡорттары артынан булған барлыҡ хәстәре улар айырған ваҡытта яңы умарта әҙерләү һәм иҫкеләренән бал алыу менән сикләнә.

Бал алыу бик иртә башлана, уны 6 августан да иртәрәк алырға ярамаһа ла, бәғзе берәүҙәр 15-20 июлдән үк ала башлай. Ярлылығы арҡаһында башҡорт көҙ еткәс тә бал алыуын дауам итә - ул уны тиҙерәк һатып ҡалырға теләй. Балды ботон 5 һумдан 10 һумға тиклем хаҡҡа һаталар, бер өлөшөн "әсе бал" исемле эсемлек әҙерләр өсөн үҙҙәренә ҡалдыралар (беҙҙәге эске балының бер төрө). Был эсемлек ошолай әҙерләнә: бер биҙрә ҡайнаған һыуға 5 футтан 7 футҡа тиклем бал һалына һәм сүпрә йә иһә бойҙайҙан, арпанан эшләнгән ике сүмес әсетке өҫтәлә, мискәнең итеп ябып ҡуйыла. Ике-өс көндән эсемлек әҙер була. Уны ҡымыҙ кеүек эсәләр, башлыса, тик ҡышын ғына. Әсе бал ҡымыҙға ҡарағанда иҫерткесерәк эсемлек.

Урман башҡорттарында башҡа эсемлектәрҙән "айран" тип аталғаны киң таралған, уны әсетелгән һыйыр һөтөн һыу менән шыйыҡлап әҙерләйҙәр (бер биҙрә һыуға ике ҙур көршәк һөт һалына). Башҡорттар өйҙәрендә бөтөнләйгә араҡы эсмәй, ә уларҙың кемелер эсә икән, йә ҡалала, йә рус ауылында ғына; әммә бындайҙар бик аҙ. Эскән кеше муллаға осрап ҡуйыуҙан бик ҡурҡа, ул ғәйеплегә ҡаты яза биреүе мөмкин.

Тәбиғәт шарттарына ярашлы, урман башҡорттарын даланыҡылар кеүек саф мал ҡараусылар итеп ҡарап булмай. Бында йылҡы өйөрҙәрен осрата алмаҫһығыҙ, урман башҡорто аттарҙы хужалығында күпме кәрәк, шул тиклем генә тота. Әлбиттә, байыраҡ башҡорттарҙың аттары сағыштырмаса күберәк.



Һыйыр һәм ҡуй малдары күпләп аҫрала. Улар өсөн ҡышҡа бесән запасы әҙерләнә.

Урман башҡорттарында һунар итеүҙең төрлө төрҙәре үҫешкән. Урман башҡорто тәбиғәте менән һунарсы, тип әйтергә була, бында, айыуҙан башлап селгә тиклем һәр төрлө ҡырағай йәнлек аҙым һайын тигәндәй осрап торған урында йәшәгән кешегә һунарсы булмауы мөмкин түгел. Дала башҡорто, һунар менән шөғөлләнгән хәлдә лә, башлыса, бүре һуғырға, ҡуян тоторға йөрөй, ҡыр йәнлектәренә һирәгерәк һунар итә. Айыу ауларға йөрөү - урман башҡорттарының төп һәм киң таралған һунар кәсебе. Йышыраҡ ерҙән ике сажин тирәһендә ағасҡа беркетелгән һәндерәнән һунар итәләр. Ағастан йыраҡ булмаған урынға йырткысты әүрәтер өсөн үләксә һалып ҡуйыла. Ҡайһы берҙә ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә була: йә һәндерә ергә ауып төшә, йә иһә һунарсы айыуҙың емде ашап бөтөрөп киткәнен һиҙмәй ҡала. Башҡорттар ҡуянға һирәк йөрөй. "Улар артынан ҡыуып йөрөп, дары әрәм итеүҙән файҙа юҡ", - тиҙәр улар. Ҡуян итен ашаһалар ҙа, теләп еймәйҙәр; тиреһен һаталар. Ҡайһы саҡта төлкөгә һунар итәләр. Ҡоштарҙан күберәк ҡорға, ағунаға, селгә һ.б. йөрөйҙәр.

Башҡорт һунарсылары араһында ҡыр ҡоштарына (өйрәктәргә, ҡаҙҙарға һ.б.) ҡарсыға йә иһә ыласын менән һунар итеүселәр бар; әммә һунарҙың был төрө аҡрынлап юғала бара. Һунарға өйрәтеү маҡсатында ҡарсыға йә иһә ыласын балаһын ояһынан алалар, һуңынан буласаҡ һөнәренә өйрәтә башлайҙар. Өйрәтелгән ыласын хужаһын ғына таный, тик уны ғына тыңлай. Ҡарсыға йә иһә ыласын менән һунарға сығыу хәҙерге ваҡытта һунар ҡошо булған барса ауыл халҡы тарафынан байрам кеүек ҡабул ителә, бынан улар ҙур ҡәнәғәтләнеү таба. Ҡарсыға хужаһы һунарға тантаналы рәүештә һыбай, йә иһә йәйәүләп сыға, уның артынан күмәк халыҡ эйәрә. Күҙҙәре ҡапланған ҡарсыға хужаһының ҡулында ултыра. Ниндәйҙер ҡырағай ҡош күренеү менән хужаһы ҡарсығаны ҡулынан осороп ебәрә, уныһы бейеккәрәк осоп менә һәм үҙенең табышына ташлана, уны соҡоп үлтерә һәм уның менән бергә ергә ҡолай. Бындай өйрәтелгән ҡарсығаны бер йыл ғына тоталар, һуңынан иреккә сығаралар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 3-10-сы һандарҙа).**

*ҠЫҘЫҠ ТА, ҠЫҘҒАНЫС ТА...*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...

## Францияла эшләгәне



Мәғлүмәттең бик яңғырауыҡлы буласағын һиҙеп, шулай уҡ яҡташтарына ярҙам итеү теләгенән журналист тикшеренеүҙәр үткәрергә ҡарар итә һәм бына нимәләр асыҡлай. "Compagnie Asturienne de mines" тип аталған Бельгия компанияһы көнбайыш Европалағы иң боронғо һәм иң бай ойошмаларҙан иҫәпләнгән. 1831 йылда уҡ асылған был компания Испанияла тутыя (цинк) һәм көмөш мәғдәне сығарған. Европаның төрлө илдәрендә заводтары, металл һатыу конторалары булған. Биржаларҙа акциялары бик юғары баһаланған. Ул ғына түгел, "Астурия компания"һы рус баҙарына ла килеп еткән, Уралдағы төрлө сәнәғәт ойошмалары эшенә ылыға башлаған. Өҫтәүенә, бельгия-француз-испан компанияһы Рәсәй кешеләренең хеҙмәтен ҡулланған, заманса әйткәндә, гастарбайтерҙар йәлеп иткән. Йөҙәрләгән генә түгел, меңәрләгән ир-атты фабрика-завод эшен әле ишетеп тә белмәгән, арымай-талмай эшләп өйрәнгән төпкөл ауылдарҙан йыйып алғандар. "Компанияның заводтарында, мәҫәлән, меңәрләгән башҡорт, татар, сыуаш, белорус, мордвалар һәм башҡа халыҡтар эшләй", - тип яҙа автор.

Журналисты эҙләп табыусы башҡорттар француз ҡалаһы Обилағы завод эшселәре булып сыға. Улар көмөштутыя һәм ҡурғаш мәғдәнен эшкәрткәндәр. Ике мең эшсенең күбеһен итальяндар тәшкил иткән, уларҙан ҡала рустар, чехтар, поляктар һ.б. килгән. Французлар үҙҙәре был заводта эшләмәгән тиерлек. Сөнки эш шарттары ҡот осҡос булған. "Әзмәүерҙәй башҡорттарҙы иң ауыр, зарарлы, 40-45 градус эҫеләге көкөрт һеркәһе быуында эшләргә ҡушалар. Бындай тамуҡ шарттарына кеше бер нисә ай ғына түҙә алған. Французлар бында бер ниндәй ҙә аҡсаға ялланырға риза булмаған", - тиелә мәҡәләлә.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**
**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

**Талҡан** - ваҡ итеп ярҙырылған һәм ҡыҙҙырылған арпа йәки бойҙай ярмаһы май йәки ҡаймаҡ ҡушып, эҫе һыуҙа бүрттереп йомшартыла.

**Ҡурмас** - киндер орлоғо ҡушып ҡыҙҙырылған арпа. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ризығы; көнсығышта ҡурмас - бойҙайҙан әҙерләнгән талҡан төрө.

**Әүмәлә** (сүкәмәс) - бик йыш ҡунаҡтарҙы һыйлау өсөн файҙаланыла, түбәндәгесә әҙерләнә: ҡайнап торған ҡаймаҡҡа бер туҡтауһыҙ болғап тороп арпа йәки арыш оно һалына. Һөҙөмтәлә бер аҙ тоҙланған һәм туҡлыҡлы майлы бутҡа барлыҡҡа килә.

**Йыуаса, бауырһаҡ** - сөсө, ғәҙәттә, бойҙай ононан баҫылған ҡамырҙы йәйеп, уны ваҡ ҡына итеп киҫеп, ҡайнап торған туң майҙа ҡайнатыла. Йыуаса бешерелеп, тоҡтарҙа һаҡлана; ул һәр ваҡыт ҡунаҡтарға сәй эскәндә ултыртыла.

**Сәк-сәк** - байрам, туй ризығы. Туғылған йомортҡаларға он һалып сөсө ҡамыр әҙерләнә; ул йоҡа таҫмаларға йәйелә һәм урман сәтләүегe ҙурлығында киҫәктәргә ҡырҡылып, ҡайнар майҙа бешерелә. Һыуынғас, уларҙы бал менән болғайҙар. Бал уларҙы беректереп тотоп тора.

**Ҡоймаҡ** - ғәҙәти ҡоймаҡтар. Табала, майҙа бешерелә. Көндәлек ризыҡ түгел, бары тик ҡунаҡтар килгәндә генә әҙерләнә.

**Шәңкә** - себер бәрәмәсенең бер төрө.

Ҡасандыр башҡорттарҙың туҡланыуында мөһим урын алып торған һөт продукттары XX быуат башына ла үҙҙәренең әһәмиәтен юғалтмай. Һөттән тыш, башҡорттар ҡаймаҡ, ҡатыҡ, эремсек, май һәм ҡорот ҡуллана. Бейә һөтөнән Башҡортостандың билдәле өлөшөндә - ҡымыҙ, һыйыр һөтөнән айран эшләйҙәр.

**Һөт** -ҡайнатылмаған һыйыр йәки кәзә һөтөн башҡорттар ризыҡ итеп бик һирәк ҡуллана. Сәйгә мотлаҡ ҡайнатылған һөт ҡуялар.

**Ҡаймаҡ** - шулай уҡ сәй эскәндә ҡуйыла, ҡайнатылған һөт һәм ҡаймаҡтан эшләнә йәки ҡайнатылған һөттөң өҫтөнән алынған ҡуйы күбектән тора. Һыуынған ҡаймаҡ тәмле ризыҡ булып иҫәпләнә.

**Эремсек** - ғәҙәти эремсек ризыҡ булараҡ бик һирәк ҡулланылған. Ғәҙәттә, ул ҡорот итеп әҙерләнгән.

**Ҡатыҡ** - ҡайнатылған һөттән эшләнгән. Билдәле температураға еткәнсе һыуытылғандан һуң айран йәки элек ойотолған ҡатыҡ менән ойотолған. Был ризыҡ, нигеҙҙә, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында киң таралған.

**Әжекәй** - әҙер ҡатыҡҡа һөт өҫтәлеп, ул ҡороғансы ҡайнатыла; барлыҡҡа килгән һары массаны сәй табынына бирер алдынан уға яңы һауылған һөт ҡушыла. Йәйгеһен уны ҡышҡылыҡҡа әҙерләп ҡуйғандар.

**Һөҙмә** - шулай уҡ сәй табынына ултыртылған ризыҡ. Яңы ғына һығып алынған, бал ҡушып болғанған эремсек.

**(Дауамы бар).**

✓ Хәҙерге осор балаларында индивидуализм, мин-минлек нығыраҡ үҫешкән, сөнки күп осраҡтарҙа элеккесә коллективизм рухында тәрбиәләү тәү маҡсат итеп ҡуйылмай.



# БЕЛЕМ БИРЕҮ -

## йәки Мәғрифәтселек юлында

**Мәғариф мәсьәләләренә арналған әңгәмәбеҙҙә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директорының ике урынбаҫары - уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса Азамат Закир улы ШӘМСЕТДИНОВ, тәрбиә эштәре буйынса Ләйлә Салауат ҡыҙы ӘБИЛОВА ҡатнашты.**

**Йәшегеҙгә ҡарап, һеҙҙе совет заманына хас уҡытыу һәм тәрбиә системаһы йоғонтоһона эләгеп ҡалғанһығыҙ, тип әйтеп булалыр?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Баймаҡ районының Ҡаратал ауылында тыуып үҫтем, 1989 йылда 1-се класҡа уҡырға барҙым, ул сакта ғаиләбеҙ Ырымбур өлкәһендә йәшәй ине. Хәҙер беренсе уҡытыусымды тап совет мәғариф системаһының бер сағыу вәкиле булғандыр, тип иҫәпләйем: уның шул осор педагогикаһының һәм дидактикаһының барса талаптарын теүәл үтәүсе, юғары квалификациялы педагог булыуына үҙем шаһитмын.

**Ләйлә Әбилова:** Мәсетле районының Ҡотош ауылынанмын, урта мәктәпте 1994 йылда тамамланым. Уҡыу йылдарым тулыһынса тиерлек совет мәғарифы системаһы тарафынан талап ителгән уҡытыу-тәрбиә шарттарында үтте.

**Эйе, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында ла бар донъяла танылыу тапҡан, юғары баһаланған уҡытыу һәм тәрбиә биреү системаһы, инерция буйынса тип әйтергә була, тамырынан ҡоротолоп бөтмәгәйне әле. Һәр хәлдә лә, беҙҙең замандаштарыбыҙҙың күпселеге тап ошо осорҙа урта һәм һөнәри белем алды. Элекке мәғариф системаһын хәҙергеһе менән сағыштырып ҡарап, ниндәйерәк һығымталар эшләп була?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Башҡорт ауылында үҫһәм дә, күсеп китеүебеҙ сәбәпле, рус-ҡаҙаҡ мәктәбендә уҡырға тура килде. Уҡыусыларҙың яртыһы - рустар, яртыһы - ҡаҙаҡтар. Башҡорттарҙан беренсе класҡа ике генә бала килдек - мин һәм Әлфиә исемле ҡыҙ. Русса уҡып алып китеү минең өсөн ауыр булманы. Йәнә шуныһы иҫтә ҡалған: мәктәптә, милли сығышына ҡарап, бер кемде лә үгәйһетмәнеләр. Уҡытыусыбыҙ Нина Григорьевна рус милләтенән ине, ул һис бер ваҡытта ла балаларға тауыш күтәрмәне, талапсан, әммә йомшаҡ мөғәмәлә булды. Уны ҡылыҡһырлаған бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Шулай бер көндә ни эшләптер өйгә ниндәй эштәр бирелеүен яҙып алмай ҡайтҡанмын. Әсәйем мине мәктәпкә алып китте. Уҡытыусыбыҙ һаман мәктәптән ҡайтмаған, дәфтәрҙәр тикшереп ултыра. Ни өсөн кире килгәнебеҙҙе белгәс, ипле генә итеп миңә нимәләр эшләргә кәрәклеген аңлатып бирҙе. Иғтибарһыҙ булғанмын бит инде, әммә бының өсөн әр һүҙен ишетмәнек.

Әлбиттә, 90-сы йылдарҙа, Советтар Союзы тарҡалғас, ҡатмарлы осорҙа йәшәнек. Әммә беҙҙе совет осоро уҡытыусылары элеккесә тырышып уҡытыуын, һәйбәт тәрбиә биреүен дауам итте, шуға күрә тейешле кимәлдә белем алдыҡ, ыңғай, киң ҡарашлы шәхес булып формалаша алдыҡ. Мәктәптә уҡыған йылдарыбыҙҙы әле лә бик бәхетле осор, тип иҫкә алабыҙ. Иң мөһиме - ил, дәүләт емерелгән тарҡалыш осоронда ла мәғариф системаһы үҙен һаҡлап ҡала алды.

**Ни сәбәпле педагог һөнәрен һайларға булдығыҙ?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Башҡортостанға кире ҡайтҡас, атайым мине Баймаҡ лицей-интернатына алып килде, 7 кластан башлап, 11 класты тамамлағансы, шунда уҡыным. Һуңынан Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында белем алдым. Әйтергә кәрәк, беҙҙе унда мотлаҡ уҡытыусы булырһығыҙ, тип әҙерләмәнеләр, башлыса, тарих белгесе, булаcаҡ ғалим итеп күрәләр ине. Ул саҡта үҙем дә берәй ҡасан уҡытыусы булып китермен, тип уйлап та ҡараманым. Тик педагог булып китеү яҙмышыма яҙылған булғандыр, тим: Р. Ғарипов исемендәге гимназия-интернатҡа тарих уҡытыусыһы булып килгәйнем, инде ғүмеремдең 22 йылы ошо уҡыу йорто менән бәйле. Педагог юғары уҡыу йортонда түгел, мәктәптә, ғәмәли эш барышында формалаша. Үҙем интернат системаһында 5 йыл тәрбиәләнгәс, уны эстән беләм, ә шул уҡ Баймаҡ лицей-интернаты уҡытыусылары минең өсөн һәйбәт өлгө булды.



**Ләйлә Әбилова:** Мин педагогтар ғаиләһендә үҫтем, уҡытыусы атайым мәктәп директоры булһа, әсәйем интернатта тәрбиәсе булып эшләне. Йәш сағымда шулай уҡ мотлаҡ уҡытыусы булырмын, тип уйламай инем. Әммә, үҙегеҙ беләһегеҙ, ауыл халҡы бик хөрмәт иткән ике профессия бар: береһе - уҡытыусы, икенсеһе - табип, ҡыҙҙарға шуларҙың береһен һайларға тура килә. Һөнәри белемде БДУ-ның Сибай филиалында алдым, география уҡытыусыһымын.

Элекке уҡытыу системаһы үтә ябай ине: уҡытыусы дәрес алып бара, аңлата, йәнә таҡтала күнегеүҙәр эшләнә, үҙаллы эштәр дәфтәрҙәрҙә теркәлеп бара. Мәғлүмәт сығанаҡтары бик аҙ - дәреслектәр, атлас һәм карталар. Хәҙер электрон мәғлүмәт саралары өҫтөнлөк итә, был беҙ уҡыған йылдарҙа уйыбыҙға ла инеп сыҡманы бит инде.

**Азамат Шәмсетдинов:** Беҙҙең өсөн төп мәғлүмәт сығанағы - уҡытыусы үҙе ине. Уҡытыусыны тиклем киң һәм тәрән белемле - уны шул сифаттары өсөн хөрмәт иттеләр. Дәреслектәр, башлыса темаһы ҡабатлау күнегеүҙәр өсөн кәрәк, нимәнелер аңлай алмаһаң, уҡытыусынан ҡабатлап һорайһың. Хәҙер һәр уҡыусының шәхси телефоны бар, интернетҡа инеп, теләгән бер мәғлүмәтте таба ала.

**Уныһы шулай, әммә электрон сараларҙан алынған әҙер мәғлүмәттең уҡыусыларға ярҙам итеүе менән бер рәттән, ярҙан этеүен дә билдәләп үтмәйенсә булмай. Белем эстәүҙә уҡыусыларҙың үҙаллылығы ла күпкә бүҫкәрә бирҙе. Элекке осорҙарҙа балаларҙың уҡыу, белем алыу мотивацияһы күпкә көслөрәк булыуын, һәр кемдең яңы китаптар, гәзит-журналдар менән ҡыҙыҡһыныуын һәйбәт беләбеҙ. Ул йылдарҙа китап уҡыу менән мауығыу бәғзе бер балаларҙа шул тиклем көслө була, улар кәрәсин лампаһы яҡтыһында, хатта ки юрған аҫтында фонарик яндырып, үҙҙәрен әүрәткән китапты тиҙерәк уҡып бөтөргә тырыша ине...**

**Ләйлә Әбилова:** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, элегерәк китапты бер изге нәмә кеүек күрә инек. Мәктәп һәм ауыл китапханалары бай булды, ябай ауыл кешеләре китап уҡырға әүәҫ ине. Ғаиләбеҙҙә 5 бала инек, үҙебеҙҙең өйөбеҙҙә кәштә-кәштә итеп теҙеп ҡуйылған китаптарҙы барыбыҙ ҙа уҡып үҫтек. Хәҙерге балалар күберәк электрон сараларҙы үҙ итә, тиҙ генә китапҡа тотоноп бармай. Әлбиттә, электрон китаптар ҙа күп, уларҙы инҡар итеп булмай, шулай ҙа йәштән уҡ китап уҡыу теләге көслө булған балалар уны ситкә ҡаҡмай.

**Азамат Шәмсетдинов:** Атанан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, беҙҙең ата-әсәләребеҙ китапты күп уҡығас, балаларҙа ла китапҡа ҡыҙыҡһыныу көслө булды. Заманында китап, гәзит-журналдар уҡыу культы булды, уларҙы һәр ғаилә күпләп алдырҙы. Иҫәмдә, бер заман әсәйем почтала эшләп алды. "Роман-газета" тигән журнал сыға, уны әсәйем почтанан алып ҡайтһа, унда баҫылған яңы әҫәрҙе төн уҙғансы уҡып бөтөрә инем. Балаларға өлгө кәрәк, әгәр ата-әсә ҡулына йыш ҡына китап ала икән, балалар ҙа шулай итәсәк. Әлеге ваҡытта психология буйынса магистратурала уҡып йөрөйөм, шунан бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт килтерәйем. Кешегә нимәнәндер ҡәнәғәтләнеү, ләззәт табыу өсөн уның организмында билдәле бер гормондар хасил булыуы кәрәк. Мәҫәлән, дофамин, серотонин һ.б. Күңеленә ятышлы әҫәрҙәр уҡыу ошондай гормондарҙы арттыра, шуға күрә кәйефең күтәрелә. Ә хәҙер бала-саға телефонынан "Тик-ток" видеоһын аса ла, юҡбар нәмәләрҙе ҡарап, шуның менән ҡәнәғәтләнеү таба.

**Заманында, бигерәк тә ауыл мөхитендә, балаларҙа төрлө хеҙмәт күнекмәләрен тәрбиәләүгә иғтибар ҙур булды. Әммә һуңғы йылдарҙа был мөһим мәсьәлә бары тик ғаиләгә генә ҡайтарып ҡалдырылғайны. Әлеге ваҡытта мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһен тергеҙеү хаҡында һүҙ алып барыла. Интернат системаһында уҡыусыларҙы физик хеҙмәткә йәлеп итеү мөмкинлектәре аҙыраҡ, килешәһегеҙме?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Мин уҡыусыларымдың аңына академик Павлов әйткән бер фәһемле кәңәште һеңдерергә тырышам: интеллектуаль һәм физик хеҙмәт аралаш булһа, мейе эшмәкәрлеге әүҙемләшә, ә был тәүгеһенең һөҙөмтәлелеген күтәрә. Интернатта уҡыусылар өсөн барыһы ла әҙер кеүек, әммә мөмкин булғанса физик хеҙмәт тә башҡарылырға тейеш. Был иң элек үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү менән бәйле. Йәшәгән бүлмәңде йыйыштырып, иҙәндәрҙе таҙа тотоу, ашханала дежурлыҡ итеү, интернат территорияһын тәртипкә килтереү, көҙҙәрен ҡойолған япраҡтарҙан, сүп-сарҙан таҙартыу, ҡыштарын ҡар көрәү кеүек эштәрҙә балалар ихлас ҡатнаша.

**Ләйлә Әбилова:** Беҙҙә башлыса республикабыҙҙың төрлө ауылдарынан килгән балалар уҡый. Ауыл мөхитендә улар эшкә өйрәнеп үҫә, бер эштән дә баш тартмайҙар, класс етәкселәре, тәрбиәселәр ҡушҡан эштәрҙе теүәл башҡаралар, был яҡтан ҡыйынлыҡтар юҡ. Интернатта ҡабул ителгән режимға ярашлы, һәр уҡыусы кейем-һалымын үҙе йыуа, аяҡ кейемдәрен таҙартып, тәртиптә тота. Икенсе йыл рәттән 5-се класҡа уҡыусылар ҡабул итәбеҙ, әлбиттә, уларҙы интернат тормошона өйрәтеп ебәрергә кәрәк, тәрбиәселәребеҙ улар менән уңышлы эшләй.

**Балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә конфликтлы ситуациялар, бер-береһен кәмһетеү осраҡтары булғаны юҡмы?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Бала коллектив мөхиткә тиҙ арала яраҡлашып китә икән, уның башҡа балалар менән мөнәсәбәттәрендә кире күренештәр булмаясаҡ. Әлбиттә, аҙ балалы ғаиләләрҙән килгән уҡыусыларға ҙур коллективҡа яраҡлашып китеүе ҡыйыныраҡ була. Әйтергә кәрәк, хәҙерге осор балаларында индивидуализм, мин-минлек нығыраҡ үҫешкән, сөнки күп осраҡтарҙа элеккесә коллективизм рухында тәрбиәләү тәү маҡсат итеп ҡуйылмай. Шуның өсөн беҙ интернат шарттарында ошо маҡсатҡа өлгәшеүҙе мөһим бурыс итеп ҡарайбыҙ.

**Миненсә, хәҙерге шарттарҙа балалар коллективизмы нигеҙендә мәктәп патриотизмы ята...**

**Азамат Шәмсетдинов:** Уҡыусылар аңына "был минең мәктәбем - был беҙҙең мәктәп" тигән фекерҙе һеңдереү мотлаҡ. Һәм беҙ шулай эшләйбеҙ ҙә: "Беҙ - интернаттыҡылар" тигән һүҙҙәрҙе уҡыусыларыбыҙ ғорурланып әйтәләр һәм артабан да әйтәсәктәр. Интернатыбыҙҙа уҡығандарҙың үҙҙәрен айырым бер йәмғиәт итеп ҡабул итеүҙәре мөһим. Ә бының өсөн мөмкинлектәр етерлек. Әйтәйек, интернатыбыҙға гимназияны элегәрәк тамамлағандар йыш килә, кәрәк сакта үҙебеҙ ҙә саҡырабыҙ. Йәштәрҙе лә, олораҡ быуын вәкилдәрен дә. Хәҙерге уҡыусыларыбыҙ менән осрашҡан сакта улар үҙҙәре уҡыған ваҡыттарҙы иҫкә ала, тормоштарында уңыш ҡаҙанған, төрлө өлкәләрҙә танылыу тапҡан класташтары хаҡында ғорурланып һөйләй. 60-сы, 70-се, 80-се һәм башҡа йылдарҙа йәшәү һәм уҡыу шарттары төрлөсә булһа ла, мәктәптән һуң юғары баһаларға лайыҡ булғандар һәр заманда тик үҙҙәренең шәхси тырышлығы арҡаһында, тормоштарында оло маҡсаттар ҡуйып йәшәүҙәре һөҙөмтәһендә ҙур шәхестәр булып танылған. "Һәр кем юғары маҡсатҡа өлгәшә ала - бының өсөн барса мөмкинлектәр ҙә бар, был һинең үҙеңдән тора", тигән фекерҙе уҡыусыларыбыҙ аңына һеңдерәбеҙ.

**Әүәл тормошонда карьера эшләү һәм, ғөмүмән, карьеризм төшөнсәһе тик кире сифат тип нарыҡлана ине. Бәлки, шуғамылыр, башҡорттар араһында "ысын карьеристар" бик һирәк осрай. Бәлки, карьераға ынтылып йәшәргә өгөтләргә кәрәктер?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Бының менән килешеп була. Үҙенең карьераһы тураһында уйламаған кеше ҙурыраҡ маҡсатҡа өлгәшергә тырышмай, тик булғаны менән генә ҡәнәғәт. Шуға күрә беҙ уҡыусыларыбыҙҙы маҡсатлы йәшәү юлына баҫырға, яңынан-яңы пландар ҡуйырға, бер урында тапанып йәшәмәскә өндәйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта кешенең үҙ-үҙенә, үҙенең мөмкинлектәренә ышанысы

✓ *Беҙ уҡыусыларыбыҙҙан туған башҡорт телен дә, рус телен дә юғары кимәлдә белеүҙәрен талап итәбеҙ. Рус теленең аралашыу теле генә түгел, фән теле булыуын да аңлатабыҙ, уҡытыу һөҙөмтәләребеҙ менән ҡәнәғәтбеҙ.*



көслө булыуы ла фарыҙ. Бына бер миҫал. Әбйәлил егете Шәһиев Динар гимназияны 2012 йылда тамамланы. Шулай бер саҡ йәмғиәтте өйрәнеү дәресендә иғтибарһыҙыраҡ ултырғанын күреп, унан: "Бына, Динар, һин тормошонда нимәгә өлгәшергә теләйһең?"- тип һорай ҡуйҙым. Ә ул: "Азамат Закирович, мин булдырам ул, барыһы лә мин теләгәнсә килеп сыға-саҡ", - ти. Ысынлап та, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлай. Күп ауырлыҡтар аша үтеп сыға, әлеге ваҡытта "Мастер зрения" тигән оптика селтәре директоры. Ул үҙе уҡыған гимназияны ла онотмай: олимпиадаларҙа еңгән уҡыусылар өсөн үҙенең приздарын булдырҙы, ә был бер үк ваҡытта гимназистарҙың уҡыу мотивацияһын көсәйтә.

**Билдәле, лидерлыҡ сифаттары үҫешкән шәхестәр тормоштарында башҡалар һоҡланырлыҡ карьера эшләү мөмкинлектәренә лә эйә шул…**

**Азамат Шәмсетдинов:** Беҙ ҙә ошоно күҙ уңында тотабыҙ. күрһәтеп йөрөгәндә ваҡытында тап ошонда урта белем алған академиктар Ғайса Хөсәйеновтың, Нияз Мәжитовтың, Әхәт Бакировтың һәм башҡа күренекле шәхестәребеҙҙең стеналарҙа эленеп торған портреттарына иғтибар итә улар. 90-сы йылдарҙа Рәсәйҙә гимназиялар, лицейҙар күпләп асыла башланы. Әлбиттә, гимназия статусын алған мәктәптәр үҙҙәренең һөҙөмтәле эшләй алыуы менән уны раҫларға тейеш. Шуныһы мөһим, ошондай урта белем биреү учреждениеларында уҡытыу процесына ла, уҡыусыларға ла күпкә юғарыраҡ талаптар ҡуйыла.

**Әммә 2000 йылдар башынан Рәсәй мәғариф системаһында барса урта белем биреүсе уҡыу йорттарын тигеҙләү, берҙәм форматҡа көсөрөү башланды: бер үк уҡыу пландары, бер үк программалар һәм методикалар…**

**Азамат Шәмсетдинов:** Әлбиттә, бындай сәйәсәт шул үк гимназия һәм лицейҙарҙың өҫтөнлөктәрен инҡар итә, мөмкинлектәрен сикләй. Әммә ваҡы- уҡыусыларҙы милли рухта тәрбиәләү.

**Азамат Шәмсетдинов:** Милли мәктәп булғас, аҙнаһына алты көн уҡытыуыбыҙҙы иҫәпкә алып, дәрестәр һанын кәметмәнек. Гимназиябыҙҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте урта кластарҙа аҙнаһына 4 сәғәт, 10-11 кластарҙа - 3 сәғәт уҡытыла. Был ваҡыт программаларҙы теүәл үтәү өсөн етерлек.

Бынан бер нисә йылдар элегерәк Мәскәү тарафтарында ысынбарлыҡҡа тура килмәгән хәбәр таралғайны: йәнәһе, милли республикаларҙа туған телдәрҙе уҡытыу арҡаһында рус теленә сәғәттәр аҙ ҡала, ул тейешле кимәлдә үҙләштерелмәй, тип. Республикабыҙҙа ҡайһы бер ата-әсәләр ҙә ошо фекерҙе хуплап, ығы-зығы тыуҙыра башлағайны. Шул саҡта Мәскәүҙән ошо мәсьәлә буйынса килгән "кунаҡ"ты беҙҙең гимназияға алып килделәр. Һиҙеп торабыҙ, был белгестең ниндәй маҡсат менән йөрөгәнен. Һүҙ башында уҡ директорыбыҙ был ханымға бына нимә тине: "Беҙ уҡыусыларыбыҙҙан туған башҡорт те- ларыбыҙҙың уртаса балы республика һәм Рәсәй буйынса өлгәшелгән күрһәткестәрҙән юғарыраҡ. Шулай итеп, беҙ әлеге фекерҙең яңылыш, мәктәптә туған телебеҙҙе уҡытыуҙың законлы һәм хаҡлы икәнен раҫлай алдыҡ.

**Ләйлә Әбилова:** Яңыраҡ уҙғарылған педагогик совет ултырышындағы сығышымды ошо темаға бағышлағайным. Беҙгә йыш ҡына башҡа урындарҙан ҡунаҡтар килеп тора. Улар, беҙҙең балаларыбыҙҙың үҙ-ара башҡортса аралашыуын күреп-ишетеп, һоҡланыуҙарын белдерә. Әлбиттә, элегерәк саф башҡортса аралашыу өҫтөнлөк итте. Һуңғы ваҡытта Зубово, Шамонино, Нуғай кейек ауылдарҙан килгән уҡыусылар берәһе менән русса аралашыуын инҡар итеп булмай. Әммә тәрбиәселәргә, уҡытыусыларға улар ҙа башҡортса мөрәжәғәт итә - был беҙҙең талап. Дәрестән һуң уҙғарылған барса тәрбиә саралары тулыһынса башҡорт телендә генә алып барабыҙ. Бигерәк тә милли байрамдарға, башҡорт теле һәм башҡорт милли кейеме көндәренә, Рәми Ға-

**Азамат Шәмсетдинов:** Стандарт әллә ниндәй ҡурҡыныс нәмә түгел, ул уҡыусыларҙың ниндәй белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейешлеген күрһәтеүсе норма. Быға өлгәшер өсөн нисек уҡытырға, ниндәй методикалар, технологиялар ҡулланыу мәсьәләһен уҡытыусы үҙе хәл итә. Уҡытыусы һөнәре - ижади һөнәр, юғиһә, ул юғары күрһәткестәргә өлгәшә алмаясаҡ. Дәрес 45 минут бара, уның хужаһы, алып барыусыһы, эске двигателе - уҡытыусы. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығын оптималь рәүештә, мөмкин тиклем файҙалыраҡ ойоштороу мөмкинлеге уҡытыусынан тора, ә был эшенә ижади ҡарауҙы талап итә.

**Ләйлә Әбилова:** Ғөмүмән, шәхсән тәрбиә эшен ижади эш тип ҡарайым. Йыл әйләнәһенә төрлө конкурстар, кисәләр, байрамдар, кластан тыш мәғәни саралар уҙғарабыҙ. Ә уларҙы нисегерәк ойоштороорға, ниндәй әҙерлек эштәре алып барырға, кемдәрҙе йәлеп итергә - былар барыһы ла етәкселәрҙең дә, тәрбиәселәрҙән дә ижади оҫталығынан тора. Бына бейеү, ҡу-

# МӘҢГЕЛЕК ҺӨНӘР,

## табылған бәхет хаҡында

Уҡыусылар үҙидаралығын булдырыу закон тарафынан ҡаралған. Гимназияла Лидерҙар советы булдырылған, уның президенты бар, иң әүҙем уҡыусыларҙан президент ярҙамсылары - министрҙар һайлап ҡуйыла. Әйтергә кәрәк, уҡыусылар идаралығы бик һөҙөмтәле эшләй, директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары һәм тәрбиәселәр ярҙамында гимназияла уҙғарылған барса сараларҙы ойоштороуҙа бик әүҙем ҡатнаша. Айына бер тапҡыр директор һәм уның урынбаҫарҙары Лидерҙар советы менән кәңәшмә уҙғара, унда уҡыусыларҙың тәҡдимдәре ҡарала һәм алда торған сараларға әҙерлек барышы тикшерелә.

**Башҡортостандың гимназияларын һәм лицейҙарын, махсуслаштырылған мәктәп-интернаттарын элитар мәктәптәр иҫәбенә индерергә була. Ысынлап та, тап шул уҡыу йорттарында белем алған йөҙәрләгән күренекле шәхестәребеҙ республикабыҙҙың элитаһын тәшкил итте. Ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**

**Азамат Шәмсетдинов:** 2004 йылда, гимназия-интернатта яңы ғына эшләй башлаған саҡымда иҫтә ҡалған бер хәтирә. Мәскәү ҡалаһынан килгән ниндәйҙер белгестәрҙе беҙҙең интернатҡа алып килделәр. Беҙҙең уҡыу йорто менән танышҡас, уларҙың аптырауы, ғәжәпләнеүе йөҙҙәренә сыҡҡайны. Бәҡтиһән, улар интернатҡа белем кимәле түбән булған, йә иһә етем ауыл балаларын алалар икән, тип уйлағандар. Мәктәпте тында тупланып ҡалған тәжрибә һәм педагогик коллективтарҙың, уларҙың етәкселәренең фиҙакәр хеҙмәте ошо типтағы мәктәптәрҙең кимәлен түбәнәйтеүгә юл ҡуйманы, ата-әсәләр алдындағы абруйын һаҡлап алып ҡалды. Ә һуңғы йылдарҙа яңы элитар мәктәптәр асыуҙы Рәсәй мәғариф министрлығы ла яҡлай башланы. Мәҫәлән, Ырымбурҙа, ХМАО-ла, Екатеринбургта губернатор лицейҙары асылды, улар өсөн заманса биналар төҙөлә, барса кәрәкле йыһаздар менән тәьмин ителә, яңы технологиялар ҡулланыла.

Бындай уҡыу үҙәктәренә балаларҙы һайлап алалар - был заман талабы. Әүҙем, һәләтле балаларҙы бергә туплауҙың тағы ла бер өҫтөнлөгө бар. Әйтәйек, бер ҡәҙимге ауыл мәктәбендә тырышып уҡып, яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән уҡыусы үҙ мәктәбенең "йондоҙо"на әйләнә: уны гел маҡтап, яҡшы баһалар ғына ҡуйып, башҡа уҡыусылар өсөн өлгө итеп ҡарайҙар. Образлы итеп әйткәндә, ул үҙенән алдараҡ барғандың арҡаһын күрмәй. Беҙҙең гимназияға уҡырға килһә, ул үҙе кеүек үк "йондоҙ"ҙар араһына эләгә: унан дә һәләтлерәктәр ҙә бар икән! Теләһә, теләмәһә лә, уға ошондай конкуренция шарттарында алғараҡ сығыр өсөн күберәк көс һалырға, әүҙемлек күрһәтергә тура килә. Бына ошондай шарттарҙа көслө ихтыярлы шәхес тәрбиәләнә.

**Милли мәктәптәребеҙҙең тағы ла бер үтә мөһим бурысы бар: туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итеү һәм**



лен дә, рус телен дә юғары кимәлдә белеүҙәрен талап итәбеҙ. Рус теленең аралашыу теле генә түгел, фән теле булыуын да аңлатабыҙ, уҡытыу һөҙөмтәләребеҙ менән ҡәнәғәтбеҙ". Шунан гимназияны күрһәтеп сыҡтыҡ. Икенсе этажда башҡорт яҙыусыларының географик сығышы сағылдырылған карта эленеп тора, ҡайһы районда ниндәй яҙыусыларыбыҙ тыуып үҫкәне күрһәтелгән. Ә рус теле һәм әҙәбиәте кабинеты янында Рәсәй яҙыусыларының шундай уҡ картаһы ҡуйылған. Музейыбыҙға ла алып индек, ундағы бик ҙур һәм бай экспозиция менән таныштырҙыҡ. Экскурсияны алып барыусы Сулпан Рәхим ҡыҙы Салауат Юлаев тураһында һөйләгәндә уның һәм башҡа каторжандарҙың Рогервик ҡәлғәһендә каторгала үҙҙәрен һаҡлаған һалдаттар менән бергәләп һөжүм итеүсе шведтарға ҡаршы тороуы тураһында мәғлүмәт бирҙе. Тимәк, Салауат Юлаев рус дәүләтенә ҡаршы булмаған, ул тик чиновниктарҙың законһыҙ ҡыҫымына ҡаршы көрәшкә сыҡҡан. Рәсәй Мәғариф министерлығы вәкиле тамам аптырауҙа ҡалды. Иң һуңында ул 11 класс уҡыусылары менән үҙе генә ҡалып һөйләшергә булды. Унан сыҡҡас, был ханым бына нимә тине: "Уҡыусыларығыҙҙан туған телде өйрәнеү рус телен яҡшыраҡ үҙләштереүгә ҡамасаулай бит, тип әйтҡәс, минең ошо фекерем менән килешмәүҙәре хаҡында белдерҙеләр. Күрәһең, һеҙ уларҙы шулай тип өйтергә алдан өйрәтеп ҡуйғанһығыҙҙыр". Ә беҙ Мәскәү вәкилен рус теле буйынса БДИ күрһәткестәре менән таныштырҙыҡ. Был предмет буйынса уҡыусы- риповтың тыуған көнөн билдәләүгә иғтибарыбыҙ ҙур, улар барыһы ла ошоларын һәм күтәренке рухи кимәлдә уҙғарыла. Илһөйәрлек тәрбиәләү ҙә - өҫтөнлөклө маҡсаттарыбыҙҙың береһе. 7-се, 8-се, 9-сы класс уҡыусыларынан Шайморатов кластары ойошторолған, улар мәктәптә, ҡалала һәм республика кимәлендә уҙғарылған патриотик сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Йыл һайын Бөйөк Еңеү көнөнә арналған саралар уҙғарыла, уҡыусыларыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ата-балалары хаҡында мәғлүмәттәр йыя, 9 май көнөндә кластарҙа уларҙың фотоларын ҡуйбыҙ. МЧС менән килешеү буйынса улар беҙгә ялан кухняһы менән ашнаҡсы ебәрәләр, һәм йыл һайын тантаналы линейканан һуң гимназия ихатаһында "Һалдат бутҡаһы" байрамы уҙғарыла.

**Беҙ стандартлаштырыу заманында йәшәйбеҙ. Мәғариф та стандартҡа ярашлы белем биреүгә ҡоролған. Ошо шарттарҙа уҡытыусы ижади эшләй аламы?**

рай, драма түңәрәктәрендә шөғөлләнгән уҡыусыларыбыҙҙың һәләттәрен асыу, үҫтереү уларҙың етәкселәренең төп маҡсаты, тик үҙе ижадсы булған кеше генә балаларға ла ижад серҙәрен аса ала. Шуға күрә "Аҡйондоҙ" бейеү ансамбле, Рәми театры, "Аманат" этнофольклор төркөмө, ҡурайсылар ансамбле сығыштарын һоҡланмай ҡараған кеше юҡтыр ул. Шулай уҡ "Аҡ ҡауырһын" әҙәби түңәрәге, "Интернатым - пар ҡанатым" гәзите лә уҡыусыларыбыҙҙы ижад юлына алып сығыуға булышлыҡ итә.

**Ҡатмарлы һәм яуаплы эшегеҙ менән ҡәнәғәтһегеҙме?**

**Азамат Шәмсетдинов:** Иртәләрен интернатҡа йылмайып килеп инәһең, кистәрен йылмайып ҡайтып китәһең - шунан да көсләрәк ҡәнәғәтләнеүҙе тағы ҡайҙа табып була икән, белмәйем.

**Ләйлә Әбилова:** Гимназиябыҙҙы күптән тамамлаған уҡыусыларыбыҙҙан әлегә тиклем рәхмәт һүҙҙәрен ишетәбеҙ, осрашыуҙарға килгәндәрендә уларҙың шат йөҙҙәрен күреп, үҙебеҙ ҙә ҡыуанабыҙ. Ошо уҡыу йортонда хеҙмәт итеүем менән бәхетлемен, тимен.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Азамат Закир улы һәм Ләйлә Салауат ҡыҙы менән ихлас аңгәмәбеҙҙе уларҙың һәм, ғөмүмән, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты педагогтарының үҙҙәре уҡытҡан һәм тәрбиәләгән балаларҙың киләсәге өсөн ҙур яуаплылыҡ тойоп, уларға күңел йылылығын һәм йөрәк дәртен биреп эшләүенә дәлил итеп ҡабул итәйек.**

✔ *Ҡулыма өс конверт һондолар, шуларҙың береһен һайлап астым да, әлеге апайҙарҙың береһенә бирҙем. Башҡорт уҡытыусы конверттан алынған тексты миңә диктовать итә башланы.*



# СТУДЕНТ САҠ МАЖАРАЛАРЫ

**Һәр кемдең дә бала, йәш сағындағы ҡыҙыҡ хәтирәләре була. Был йәһәттән алты йыл буйы медицинаның "елеген кимереү" дәүерендә минең менән дә ниндәй генә хәлдәр булманы! Шуларҙы иҫкә төшөрөп ултырыуым.**

## Яңғыҙым яҙҙым…

Иң башта шул юғары уҡыу йортона ингән сағымдағы бер төшөмдө бәйән итеп китәйем. Кемдер, бәлки, төшкә ышанмайҙыр ҙа. Төш юрау менән булышыу ярамай, әлбиттә, әммә, бәғзе бер яҡшы төштәрҙең ысынға тап килеү ихтималлығы юҡ түгел. Беҙҙең заманда башҡорт мәктәбен тамамлаған кеше институтҡа уҡырға ингәндә урыҫ теленән үҙ теләге менән инша ғына түгел, изложение йә диктант яҙырға ла хоҡуҡлы ине. Мин үҙем диктант яҙырға ярата торғайным. Имтихан бирерҙән бер көн алда ғына бер төш күрҙем, имеш, бүлмәлә диктантты яңғыҙым ғына яҙып ултырам. Минән башҡа бер кеше лә диктантҡа инмәгән, имеш. Иртәнсәк тороп, әлеге имтиханды бирергә киттем. Медицинатуттың баш корпусының абитуриенттарға диктант яҙыу өсөн тәғәйенләнгән бүлмәһенә индем. Әлегә бер кем дә күренмәй. Көтәм. Бер аҙҙан ике уҡытыусы апай килеп инде. Береһе - мәрйә, икенсеһе - башҡорт. Башта яңғыҙымды ғына күреп, ғәжәпләнделәр. Ҡалған абитуриенттар килеүен тағы ярты сәғәткә яҡын көттөк, әммә башҡаса бер кем дә килмәне. Инша йә изложение яҙырға таралышып бөткәндәр. Ҡулыма өс конверт һондолар, шуларҙың береһен һайлап астым да, әлеге апайҙарҙың береһенә бирҙем. Башҡорт уҡытыусы конверттан алынған тексты миңә диктовать итә башланы. Бына шулай, ысынлап та, яңғыҙым ғына ултырып диктант яҙҙым...

## Башҡортса аңламай тип уйлаһам…

Икенсе имтихан биологиянан ине. Билет һорауҙары ла әллә ни ауыр түгел. Беренсеһе "Ботаника", икенсеһе - "Общая биология" буйынса. Имтихан ҡабул итеүсе был уҡытыусыларҙың ла береһе - башҡорт апай, икенсеһе - урыҫ милләтле икәне күренеп тора. "Башҡорт телендә яуап бирергә мөмкинме?" тип һораным. Башҡорт апай "мөмкин" тигәс, шатланып киттем. Мәктәптә ботаниканы башҡортса уҡығайныҡ, шуға күрә, үҫемлектәр буйынса тәүге һорауға үҙ телемдә яуап бирҙем. Ә икенсе һорау - "Развитие оплодотворенного яйца"... Нишләптер, уны "аталандырылған күкәйҙең үҫеше" тип, башҡортса һөйләргә ҡыйынһындым да, русса һөйләп бирҙем. Яуабымды тамамлағас, миңә дүртле ҡуйырға булдылар. Мин әлеге башҡорт апайға иплән кенә: "Бишлегә тартып булмаймы?"- тигән булдым. Шул саҡ уның янындағы "мәрйә" апай: "Тәүге һорауға яуапты бигүк яҡшы һөйләмәнең бит", - тип тап-таҙа татар телендә әйткәс, албырғап ҡалдым. Ярай, дүртле лә насар түгел...

## КПСС тарихынан имтихан

Беренсе курста уҡығанда башҡа предметтар менән бергә "КПСС тарихы"н да үттек. Был кафедраның доценты Исанов тигән кеше ине. Марый милләтле, әммә башҡортса ла яҡшы һөйләшә, студеттарға шундай йылы мөнәсәбәтле, алсаҡ, мөләйем, үҙенсәлекле бер ағай. Мәҫәлән, ул һәр төрлө ҡыҫҡартылған атамаларҙы тулыһынса әйтеп һөйләүҙе айырыуса оҡшата торғайны, бынан тыш, студент тәҙәлөш отрядтары хаҡында ла йыш ҡына телгә алырға ярата ине... Беҙ, студенттар, был доценттың ошондай үҙенсәлектәрен белгәс, уның менән аралашҡанда әллә ни ҡаушамай, иркенләп һөйләшә ала инек. Шулай, имтихан бирер көндө, түштәре значоктар менән биҙәлгән "стройотряд" формаһын кейеп, имтиханға киттем. Индем, билет алдым. Билеттың һорауына ярашлы, РСДРП(б)ның ниндәйҙер бер съезы хаҡында һөйләргә кәрәк ине. Ә минә, үкенескә, шундай съездар барыһы ла бер иш һымаҡ тойола, уларҙың айырым үҙенсәлектәрен дә белмәйем, тик теге йәки был съездың нисәнсе йыл булғаны ғына иҫемдә. Билеттың подвопросник тип аталған өлөшөндә "Выступление на съезде Сталина по национальному вопросу" тигән һүҙҙәргә иғтибар иттем. Әһә! Башымды нығыраҡ эшләргә мәжбүр итеп, яуабымда әлеге ағайҙың бер аҙ "һалпы яғына һалам ҡыҫтырмаҡ" булдым. Ҡаршыһына барып ултырғас, башта билетымдың һорауын уҡып ишеттерҙем. Ул мине иғтибар менән тыңларға әҙерләнде. Ашыҡмай ғына, һәр бер һүҙ һайын ҡыҫҡаса пауза яһап, тигәндәй, һуҙып ҡына яуап бирә башланым: "В одна тысяча девятьсот... году состоялся (такой-то) съезд Российской Социал-Демократической Рабочей Партии большевиков..." Яуабымдың ошо урынына еткәс, кинәт был уҡытыусы ағайҙың йөҙө яҡтырып китте. Хатта һуҡ бармағын күтәреп: "Во!" - тип әйтеп ебәрҙе ул. Мин дәртләнеп, артабан дауам итәм: "На этом съезде большевиков с докладом "О национальной политике" выступил товарищ Иосиф Виссарионович Сталин - Джугашвили..." Инде шундай ихлас итеп йылмайған ағайыбыҙ мине артабан да әлегесә дәртләндерә. "Күп милләтле Рәсәйҙә ошо мәсьәләне хәл итеү айырыуса ҙур роль уйнай..." тип, артабан бер аҙ импровизациялай башлауым булды (дөрөҫөн генә әйткәндә, артабан һөйләрлек әллә ни һүҙ запасым да ҡалмағайны), ул мине туҡтатты. "Молодец! Һиңә бер һорау..." Ниндәй һорау икән тип, мин бер аҙ шөрләңкерәй ҙә башланым. Бәхеткә, был доцент, минең өҫтөмдәге "стройотряд" формаһына иғтибарын йүнәлтте, йәй көнө ҡайҙа эшкә барырға йыйынғанымды һораша башланы. "КАМАЗ"ға, тип, дәртләнеп яуаплайым. "Ә БАМға ебәрһәләр, барыр инеңме?" "Әлбиттә, һис икеләнеүһеҙ!" "Молодец, отлично!"...

## Атеизмды ла бирҙем!

Икенсе курсты тамамлағандан һуң, мәктәптәш ҡыҙ менән өйләнешергә һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Имтихандар бөткәс тә, йәйге практика башланмаҫ борон, шул эште атҡарып ҡуйыу ниәтебеҙ. Әммә, һуңғы имтихан менән әлеге практикаға ҡәҙәре ваҡыт аралығы бигерәк бәләкәй генә шул. Ун көндәй ҙә түгел. Нишләргә? Имтихандарҙы бер аҙ ваҡытынан алда тапшырып ҡына ана шул аралыҡты бер нисә көнгә оҙайтырға була. "Тәүәккәлләгән - таш ярған" тигәндәй, тап ана шулайтырға булдым. "Детские болезни" тип аталған предметты һыҡ ҡына яраға инем. Лекция һәм семинар дәрестәрендә лә тырышып йөрөгән студент булараҡ, деканаттан рөхсәт ҡағыҙы алып, һис бер әҙерлекһеҙ, ваҡытынан өс көн тәүҙәрәк барып, имтиханды уңышлы ғына биреп сыҡтым.

Шул көнө үк деканатҡа тағы индем. Һуңғы имтиханды ла ("Научный атеизам" предметынан) "досрочно" биреү ниәтемде әйттем. Декан Лина Викентьевна аптыраны: "Куда так торопишься, Суюндуков?" Үҙемдең өйләнергә йыйынып йөрөүем хаҡында "серемде" систем. Был апай ҡаршылашып торманы, тик "Имтиханға әҙерһеңме һуң?" тип кенә һораны. "Эйе". Әммә, әҙер булыу ҡайҙа инде ул!.. Лекцияларына ла йүнләп йөрөмәгән инем. Һис кенә лә яратманым шул "атеизм" тигән нәмәне. Унайһыҙыраҡ булһа ла, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, шул "фән" буйынса белемем, ысынлап та, "0" кимәлендә генә ине. СССР дәүерендә "серьезный" тип һаналған шул предметтан ҡурҡмай, үҙемде нисек шулай ышаныслы тойҙом һуң? Сөнки бер курсташым имтихандың утыҙ билетына ла айырым-айырым биттәрҙә әҙер яуаптары булған "шпаргалка" тапҡайны. Шуны миңә бирҙе: "Тик тотолоп ҡуйма, ҡара уны..." Костюмымдың эс яғына ҙур ғына "секретный" кеҫә тегеп, бер тәртиптә рәтләп, шул яуаптарҙы һалып алдым да, имтиханға киттем. Билет алдым. Шпаргалка булмаған хәлдә, ундағы өс һорауҙың береһенә лә яуап бирә алмаҫым - көн кеүек асыҡ! Арттараҡ торған партаға барып ултырып, бармаҡтар менән кеҫәмде һәрмәп, тейешенсә һанлы билетты һиҙҙермәй генә тартып сығарып, алдыма һалдым. Былай булғас, эштәр көйлө! Әммә...



"Шпора"ның яуабы билеттың бер һорауына ла тап килмәй бит! Әй, әттәгенәһе! Яуап бирергә сиратым да килеп етте. "Ни булһа ла булыр гәзиз башҡа..." Йәш кенә экзаменатор апайҙың (урыҫса һөйләшһә лә, башҡорт булһа кәрәк) ҡаршыһына барып та ултырҙым. Беренсе һорауға ыҡмыҡ иткәс: "Ну, давай, икенсеһен һөйлә инде", тине уҡытыусы. Икенсеһе, өсөнсөһө менән дә шул уҡ хәл! "Бер нәмә лә уҡымаған көйө, өҫтәүенә, "досрочно" килергә нисек баҙнат иттең?" - тине ул, йөҙөндә ғәжәпләнеү билдәһе сыҡты. - Ныҡ ҡына әҙерләнеп, ҡабаттан килергә тура килер." "Ҡабаттан килә алмайым..." "Нишләп?" "Сөнки фәләнсә числоға кәләш әйттерергә һөйләшелгән. Ата-әсәһе лә көтә..." "Ручкаһын ауыҙына ҡуйып, бер аҙ уйланып алды был апай, шунан миңә мут ҡына йылмая биреп, тауышын әкренәйтеп, былай тине: "Ярай улай булғас, һиңә минән - "свадебный подарок", - тип "өслө" ҡуйырға йыйыныуын әйтте. Әммә мин уны туҡтаттым: "Миңә "өслө" ярамай". Экзаменатор аптыраулы ҡараны: "Ни өсөн?" "Сөнки "өслө" ҡуйһағыҙ, ярты йыл буйы стипендия бирмәйәсәктәр". Апай тағы бер аҙ йылмайғандай итә, башын сайҡап, миңә шелтәле ҡарай. Уның йөҙөнән "Ну ты, парень, от скромности не умрешь..." тигәнде уҡырға булыр ине. Бер ни ҙә өндәшмәй, "дүртле" ҡуйып, зачеткамды "шап" итеп ябып, ҡулыма тотторҙо. "Ҙур рәхмәт!" - имтихан бүлмәһенән "осоп ҡына" тигәндәй сығып киттем...

## Иртә торһаң - ит бешә…

Дүртенсе курста "Инфекционные болезни" фәнен үткәйнек. Беҙгә лекцияларҙы кафедра мөдире профессор ағай уҡый ине. Баштан уҡ бик ҡәтғи генә итеп иҫкәртеп ҡуйҙы ул беҙҙе: "Кем дә кем минең лекцияларымдың береһен генә булһа ла ҡалдырһа, имтиханды тәү килгәндән бирермен тип өмөт итмәһен!.." Өлкән курс ағайҙары, ысынлап та, уҫал кеше ул, тигәс, бер лекцияны ла ҡалдырмаҫҡа тырышып йөрөгән көн... Тик ниндәйҙер сәбәп менән уның бер лекцияһына бара алмай ҡалдым. Ҡыҫҡаһы, әлеге ағайҙың "ҡара исемлегенә" индем. Сессиялар башланғас, профессор хаҡында күрше төркөм студенттарынан һораштырам. Уның башҡа уҡытыусыларға ҡарағанда имтиханға ярты сәғәт самаһы һуңлаңҡырап килеүе хаҡында ла белдем. Студенттар билет алып, әҙерләнеп, ул-был иткәнсе, килеп тә етә икән... Имтихан бирер көнө кафедраға иртә менән барҙым. Иң беренсе булып инеп, билет алдым, ундағы һорауҙарға яуаптарҙы ла яҡшы ғына белә инем. Әммә әлеге ғәйәт принципиаль булған профессор хәҙер килеп өлгөрһә, барыбер минең белемем бер ниндәй ҙә тиерлек роль уйнамаясаҡ. Билетыма күҙ йүгертеп сыҡҡас, шунда уҡ ассистент апайҙан: "Хәҙер үк, әҙерлекһеҙ яуап бирергә буламы?"- тип һораным. "Әлбиттә, - тип ихлас йылмайҙы уҡытыусы, - рәхим итегеҙ!" Бәхеткә, профессор ағай килеп өлгөрмәне, мин өс һорауға ла шытырҙатып яуап бирҙем. Уҡытыусы зачеткама "Отл." билдәһе ҡуйыуға, мин шөрләгән әлеге ағай килеп тә инде. Шунда уҡ "черный список"ты асып ҡараны ла, экзаменаторға һораулы ҡараш ташланы. "Бик яҡшы яуап бирҙе ул, Фәлән Фәләнович, - тине апай, - мин билдә ҡуйҙым инде..." Профессор телен сыҡылдатып, башын ғына сайҡап ҡуйҙы, әммә, кемдер әйтмешләй, "поезд киткән" ине инде...

## "Миңә профессор дүртле ҡуйғайны…"

Партия тарихы, атеизмдарҙы табип өсөн кәрәкмәгән предмет тип һанаһам да, әлеге инфекция, терапия, хирургия һымаҡ клиник дисциплиналарҙы, әлбиттә, һәр саҡ яҡшы үҙләштерергә тырыштым. Тик хирург булырға хыялланып йөрөгән студент булараҡ, нишләптер, дүртенсе курста үткән "Радиология" тип аталған фәнде әллә ни өнәп еткермәнем, әммә программа буйынса уны барыбер үҙләштерергә тейешбеҙ, имтихандың бирергә кәрәк. Уҡытыусыларҙың һәммәһе үҙ предметын булаҫаҡ табип өсөн иң мөһиме тип һанай бит инде. Ошо кафедра ла был йәһәттән ташлама түгел... Имтиханда иң кәмендә "4"-ле билдәһе лә алыу кәрәк, айырыуса, минең һымаҡ, инде буйҙаҡ булмаған, хатта бер ул тәрбиәләй башлаған атай кеше өсөн. Һаман да әлеге "стипендия" мәсьәләһе борсой. Имтиханға әҙерләнеүен-әҙерләндем, әлбиттә, әммә ауыр ғына һораулы билет эләкте бит, ауыҙыңа май тунғыры! Мин яуап бирғәс, "Өслөнән артыҡ ҡуя алмайым", тине профессор. "Миңә өслө кәрәкмәй, үҙегеҙ аңлап торағыҙ..." "Улай булғас, нығыраҡ уҡып, ҡабаттан килергә тура киләсәк". "Ярай". Профессор зачеткаға бер ни ҙә яҙманы, ә журналға "птичка" ғына яһап ҡуйҙы. "Элек кеше хитрый булған" тигәндәй, заманында үҙемә күрә зирәк кенә булғанмындыр инде: әлеге ағайҙың ҡабалан ҡына сыймаҡлаған "птичка"ны нәҡ дүртле билдәһенә генә оҡшап торғанын шәйләп алдым. Иртәгеһен, ғәҙәтемсә, иртә менән килдем дә (профессор эштә юҡ ине әле), башҡа төркөмдән имтихан алырға йыйынған йәш кенә бер доцент апайға мөрәжәғәт итәм: "Кисә профессорға имтихан тапшырғайным, тик зачеткамды онотоп киткән инем. Фәлән Фәләнович журналға "дүртле" ҡуйҙы, шуны зачеткама ғына күсереп ҡуйып ебәрегеҙ, зинһар..." Уҡытыусы апай беҙҙең журналды асып ҡараны ла, минең фамилиям тапҡырындағы әлеге "кошсоҡ"то күреп: "Ә, эйе, шулай икән",- тине лә, ҡабалан ғына минең зачеткама "дүртле"не ҡуйып ебәрмәкенме! Шатлығы башынан ашҡан студентҡа шул саҡ бүтән бер ни ҙә кәрәкмәй ине...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

***✓ - Минең менән ул-был хәл була ҡалһа, анауында, ҡалҡыуыраҡ урынға ҡуйырһығыҙ, - тине Хәбир ҡарт. Унан ҡабаланып өҫтәп ҡуйҙы. - Бынан ҙурыраҡ таш ҡуйырһығыҙ, мәрмәрҙән булһын!***



Марат ӘМИНЕВ.



# КҮРШЕЛӘР

Кәбир менән Хәбир күрше үҫтеләр, бер синыфта уҡынылар. Армияла йөрөп ҡайттылар, бербер артлы өйләнделәр, тәүге балалары ла бер йылда тыуҙы.

Кәбирҙең уҫаҡтан ҙур йорт күтәргәнен уфтанып күҙәткән Хәбир, кредитҡа батып булһа ла, Бөрйән яғынан шығырҙап торған ҡарағай бура ҡайтартты. Бер аҙ ҡара янып йөрөгән Кәбир тиҙҙән ҙур мунса күтәреп, уны өс бүлмәле итте. Береһендә йыуыныръға, икенсеһендә кейенеп-сисенергә, өсөнсөһөндә диванға ҡырын ятып һыра һемерергә ине уйы. Һуңғы осорҙа ҡан баҫымы күтәрелеүҙән нығ интегә башлаған Хәбир, экскаватор яллап, оло баҡсаһының арғы осона быуа ҡаҙҙырҙы, хатта шунда балыҡ ебәрҙе. Йәйге эҫе көндәрҙә, быуаһына сумып сыҡҡас, уның тарафтарына күралмаусан ҡараштарын ташлай-ташлай йөрөгән бер туҡтауһыҙ ыуғылаған күршеһе алдында ата ҡаҙҙай маһайып йөрөү күңеленә әйтеп бөткөһөҙ рәхәтлек бирә ине.

Кәбир бер мәл һыйырҙарын арттырырға булып китте. Тырыша торғас, уларҙың һанын унауға еткерҙе, артҡан һөттө көн һайын эргәләге май заводына тапшырҙы, ит һатыуҙан да тора-бара байтаҡ аҡса эшләй башланы. Уның ихатаһында бер көндө пәйҙә булған өр-яңы "Газель"де күреп, Хәбир һулҡылдап иланы. Күп тә үтмәй, һарайын ҙурайтып һалды ла, йәнә кредитҡа батып, аттар һатып алды. Биш йылда уларҙың һанын иллегә еткерҙе, элек бөтә ауыл көтөүе йөрөгән яландың яртыһынан күберәген ниндәйҙер мөғжизә менән үҙенең биләмәһе итте һәм уны кәртәләп алды.

Кәбир балалыҡ дуҫынан быны һис көтмәгәйне. Шаңҡыған балыҡтай бер аҙ йөрөгәс, һыйырҙарының көтөүҙән ярым ас ҡайтыуын күтәрә алмай, ауыл халҡының дөйөм көтөүлегенең ҡалған өлөшөн үҙенеке итергә тырышып, тейешле ҡағыҙҙар юллай башланы. Тик Хәбирҙең ит эшкәртеү цехы асырға йыйынғанын ишеткәс, йөрәге сыҙаманы, кистән һап-һау кеше, хәйер, синыфташтар инде алтмышты ваҡлай ине, иртән уянманы ла ҡуйҙы.

Мәрхүмде ерләргә ҙур илдең төрлө ҡалаларында йәшәгән балалары ҡайтып төштө. Кәберҙе лә үҙҙәре ҡаҙҙы, сөнки ауылда көрәк тоторлоҡ ир-егеттәр юҡ ине, Кәбир менән Хәбирҙән йәшерәктәрҙән берәү ҙә тыуған төйәктәрендә йәшәргә ҡалмағайны.

Бер аҙҙан мәрхүмдең ҡәбере өҫтөнә исем-шәрифе яҙылған таш ҡуйҙылар. Быны ихатаһынан күреп торған Хәбир кисен зыярат яғына барып әйләнергә булды, отпускыға ҡайтып төшкән өлкән улын да эйәртте.

- Минең менән ул-был хәл була ҡалһа, анауында, ҡалҡыуыраҡ урынға ҡуйырһығыҙ, - тине Хәбир ҡарт, күршеһенең ҡәбере янында бер аҙ уйланып торғас. Унан ҡабаланып өҫтәп ҡуйҙы. - Бынан ҙурыраҡ таш ҡуйырһығыҙ, мәрмәрҙән булһын!

Улы өндәшмәне, башын ғына ҡаҡты.



# НЫҠЫШ

Булыр-булыр ҙа, Усман кеүек нығыш кеше булмаҫ. Берәй нәмәне алдына алһа, өҙмәй ҙә ҡуймай. Мин үҙемдең уйлағанды әйтәм - бәхәсләшәбеҙ ҙә китәбеҙ.

Йәшерәк саҡта һүҙ аҡсалыраҡ эш табыу, кәйефсафа ойоштороу тирәһендә ҡуйыртыла ине. Олоғая килә, хәбәр күберәк һаулыҡ тирәһендә өйөрөлә.

- Һин бит ҡытай сәйе эсмәйһең! - тип тәнҡитләй башланы был, йөрәк сәнсеүенә, ҡан баҫымы күтәрелеүгә зарлана башлағас. - Минең һымаҡ көн дә эс шуны, иртән дә, кисен дә - ҡан тамырҙары киңәйер, аҡ сәстәрең ҡабат ҡарайыр, бер ун йәшкә йәшәреп китерһең.

Һис тә йыбанмай үҙе, аҫып алған рюкзағынан ҙур ҡап сәй сығарып, миңә уның файҙаһын тәфсирләп аңлатырға тотона.

- Етәр! - мәйтәм, - ҡытай сәйенең файҙаһы тураһында әкиәт... әй, мәғлүмәтте урындағы телевидение, радио аша инде биш-алты йыл тыңлайбыҙ, инде ятлап бөттөк, тик халыҡ элеккенән дә күберәк ауырый.

- Рекламаға ҡолаҡ һалып сәй эсһәләр, ҡырылмаҫтар ине, - ти был нығыш.

Ҡыҙыҡ, үҙебеҙҙә үҫкән үлән сәйҙәре хаҡында һүҙ алып барһа, аңлашылыр ине, йәһәннәм арьяғындағы сәй генә бөтә бәләләрҙән нисек ҡотҡарһын!

- Һин бит һыу эсмәйһең! - тип битәрләй башланы Усман икенсе күрешкәндә. - Һәр оло кеше көнөнә ике-өс литр һыу эсергә тейеш. Крандан һемермә тағын, бына мин йөҙ мең һумлыҡ махсус ҡоролма алдым әле - һыуҙы таҙарта, һин дә шуны ал - аҡ сәстәрең ҡабат ҡарайыр, бер ун йәшкә...

- Ат һыуҙы биҙрәләп эсә, барыбер мәңге йәшәмәй, - мәйтәм. - Һәр кемдең организмы үҙенсә, мин көсләп тә өс литр эсә алмайым.

Ваҡыт үтә торҙо, Усмандың маҡтаған ризыҡтары ғына үҙгәрә барҙы. Һарымһаҡ, имбирь, ҡарабойҙай, ҡыяр... ҡалманы, тик Усман ғына нишләптер йәшәрмәне.

Ауырып киткән тип ишеттем әле. Хәлен белергә дауаханаға барғас, аптыраным: һау сағында гел һытыҡ йөҙ менән күргән, бер туҡтауһыҙ ҡайҙалыр ашыҡҡан Усмандың кәйефе шәп, үҙе шундай тыныс, эргәһендә төрлө сүрәләр яҙылған дин китабы ята.

- Был донъяла үҙ-үҙең, намыҫың менән килешеп тормош көтөүгә ни етә, - тине ул ауыр тын алып. - Яман уйҙарҙан, ҡылыҡтарҙан һаҡланып, һәр нәмәлә сама белеп йәшәһәң ине ул!

Беренсе тапҡыр Усман менән бәхәскә инге килмәне. Нығыш кеше нығыш инде, дөрөҫ йәшәү ысулын барыбер тапты, буғай.



# ТӨПСӨК

Мине бәләкәйҙән төпсөк тип йөрөттөләр. Ғаиләлә кинйәһе, класта иң тәпәше булғанға инде. Инде ыҙрҡҡа етһәм дә, барыһы өсөн дә мин һаман төпсөк. Ҡалайтаһың, ауылда иң йәше - мин.

Йәй етһә генә ҡалаларҙан бала-саға килеп тула. Беҙгә лә ағайымдың улы - Космос килгеләй. Эйе, исеме шулай уның. Ағайым әйтә, Ерҙә йүнле исем ҡалмаған, шуға ҡараштарҙы Йыһанға йүнәлтергә тура килде, ти. Шул ун йәшлек Космос ҡустым һорауҙар яуҙыра ғына, яуап биреп кенә өлгөр:

- Ағай, минең һымаҡ саҡта һин нәмә эшләргә ярата инең? - ти.

- Беҙҙең бала саҡ еңел булманы, - мин әйтәм. - Иртүк ике күрше ағай таң һарыһынан тракторҙарын ҡыҙҙырып, колхозға эшкә сығып китә, шул тауышҡа уянаһың. Класта егерме бала уҡыныҡ, барыһы ла килһә, бер партала өсәүләшеп тә ултыраһың. Мәктәптән ҡайтҡас, ҡөртә тулы малды тәрбиәләүһәнең, йәйге каникулдарҙа йыш ҡына сиратлап ауылдың һыйыр, һарыҡ-кәзәләрен иртә таңдан кискә саҡлы көтәһең. Өсәй ауылдағы медпунктта фельдшер булып эшләне, йортобоҙ ишегә ябылмай торғайны - йәш балалы әсәйҙәрҙән алып өлкән әбей-бабайҙарға тиклем, килә торғайнылар көн-төн тип тормай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙер ауылда балалар ҙа, колхоз ҙа, мәктәп тә, медпункт та юҡ...

- Балалар ул саҡта ауылда йәшәй инеме ни? - тип һорай аптырауҙан күҙҙәре шар булған туғаным. - Мин улар ҡартайғас ҡына бында күсенеп киләләр тип уйлағайным.

- Һәр ғаиләлә биш-алты бала үҫә ине ул саҡта, көндөҙ уҡыйбыҙ, ата-әсәгә хужалыҡ эштәрендә ярҙам итәбеҙ, кисен күмәкләшеп уйнайбыҙ. Ҡараңғы төшкәс кенә өйгә ҡайтып керәбеҙ. Әсәйҙәребеҙ юғалтып бөтә...

Космостың иҫе китә, мин һөйләгәндәр уның ҙур башына һыймай. Нисек инде юғалтырға мөмкин, ә телефон нөмәгә? Компьютерҙа бөтә ауыл менән нисек уйнарға була? Мин уға ул саҡта һәр кемдә телефондың да, компьютерҙың да булмауын, бала-сағаның виртуаль донъяла түгел, ә бер-береһе менән төрлө уйындар уйнауын төшөндөрөргә маташам. Ҡустым башын ҡаға-ҡаға тыңлап ялҡҡас, һеңгеҙәтә һуғырлыҡ һорау бирә:

- Динозаврҙар бар инеме ул саҡта?

Нисек тә тыныс булырға тырышып, динозаврҙарҙың минән йөҙәр миллион йәшкә өлкәнерәк булыуын аңлатырға тырышам. Шул саҡ быға өнәп етмәгән төпсөк ҡушаматының миңә нисек ҡәҙерле булыуын төшөнәм. Ауылдың һуңғы динозавры булыуға ҡарағанда күмәк туғандар, тиңдәштәр араһында төпсөк булыуы күңелгә яҡыныраҡ бит.



# УҠЫМЫШЛЫ АЙЫУ

"Хәбибте айыу туҡмаған". Был хәбәр ауыл халҡын шаңҡытты. Баҡһаң, Мағаш тауындағы аҡланда саптырған бесәнен эш итергә барған ир балаһын әйәрткән урман хужаһына тап була. Ҡасырға маташа ла, һуң була: балаһын ҡыҙғанған айыу Хәбибте бер-ике ынтылыуҙа ҡыуып етә лә көрәген бирә. Күкрәген иҙә, оҙон тырнаҡтары менән бөтә тәнен яралай.

Бер ай дауаханала ятып ауылға ҡайтып төшкән Хәбибте танырлыҡ та түгел ине. Башы аша машина үтеп киткәнме ни: тырналған, тешләнгән урындары һаман уңалмаған, танау ҡыйшайған, йөҙ салышайған, тигәндәй. Ярай әле, ҡауҙәненең ни рәүешле икәнен берәү ҙә күрмәй.

Хәбиб страховкалау ойошмаһы тупһаһын ашаҡлап үткәс, сираттағы бар халыҡ уға төбәлде. Коридорҙа йүгереп йөрөгән биш йәштәрҙәге бала ҡурҡыуынан ҡысҡырып илап ебәрҙе. Бер ханымдың ҡуйынындағы уйынсыҡтай эт шыңшырға тотондо.

- Һаулығығыҙға зыян килгән өсөн страховка аҡсаһын түләй алмайбыҙ, - тип белдерҙе йәш кенә ҡыҙ, Хәбиб килтергән медицина справкаһын, документтарҙы ентекләп өйрәнгәндән һуң.

- Нишләп түләмәйһегеҙ? - ирҙең былай ҙа ҡурҡыныс йөҙө бөтөнләй ҡарағыһыҙ булды. - Үҙегеҙ көсләп страховка килешеүе төҙөнөгөҙ, ай һайын арыу ғына аҡсаны һыҙырып алып ҡалаһығыҙ, һаулығыма зыян килдеме - килде, айыу үлтерә яҙҙы мине, ауыртмаған ерем юҡ, хәҙер эшләй ҙә алмайым.

- Шулайын шулайҙыр ҙа, - ҡыҙ әңгәмәсеһенең ҡарашын күтәрә алмай алдындағы ҡағыҙҙарына төбәлде. - Бына инструкцияла яра эҙе кәмендә биш сантиметр булырға тейеш тип яҙылған, ә һеҙҙеке дүрт сантиметр ғына - дауахана биргән белешмәлә шундай һандар бит. Инструкцияға ярашлы рәүештә берәй ағзағыҙ эштән сығырға тейеш. Әйтәйек, күҙегеҙ сыҡһа, айыу ҡолағығыҙҙы йәки танауығыҙҙы өҙөп алһа, аҡсаны ҡыуанып түләр инек. Танауығыҙҙы һындыра һуҡҡан, әлбиттә, был ғына етмәй шул...

- Йә, Хоҙай, - Хәбиб аптырауҙан әйтер һүҙен әйтә алмай торҙо. - Тимәк, айыу мине һеҙҙең инструкцияға ҡарап туҡмарға тейеш булған?

Килеүе бушҡа ғына булды тәнендә имен ере булмаған ирҙең. Ойошма етәксеһенә инеү ҙә, дауахананың баш табибына, һуңынан прокуратураға барыу ҙа һөҙөмтә бирмәне. Барыһы ла закон һағында нығ торалар икән. Аптырағас, аҡыллы кешеләрҙең кәңәшен тыңлап, байтаҡ аҡса сығарып, юристарға консультацияға йөрөп алды, шәхси клиниканан тейешле справкалар юллап алды Хәбиб.

- Тулы күләмдә страховка аҡсаһын түләрбеҙ, - тип ҡуйҙы шул уҡ ойошмалағы шул уҡ белгес, Хәбибтең документтарын ентекләп өйрәнгәс, шунан ситкә ҡарап, шым ғына өҫтәп ҡуйҙы. - Был айыуҙың алдында беҙҙең инструкция ятҡан, тиерһең, шуның бу-

ИНТЕРНЕТТАН



# КИТАП ТОТҺА БАЛА...

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да белгестәр юғары баһалай. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк.

■ Томат һуты бик файҙалы икәнен беләһегеҙме? Бер стакан һутта каротиндың, С витаминының һәм организм өсөн башҡа кәрәкле матдәләрҙең тәүлек нормаһы бар. Тимерҙең һәм фолий кислотаһы гемоглобиндың кимәлен күтәрә. Томат һутын һығып алғас, уға ҡатыҡ, әнис, петрушка, шәкәр, тәменсә тоҙ өҫтәһәгеҙ, витаминлы эсемлек килеп сыға. Гипертонияны булдырмау өсөн көн һайын 1 ҡалаҡ бал өҫтәлгән томат һутын эсеү ҙә етә. Был эсемлек глаукоманан һаҡлай, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, йөрәк мускулдарын ҡан менән тәьмин итеүҙе яҡшырта. Ябығырға теләүселәр өсөн белгестәрҙән махсус салат рецепты: томат, алма, һуған, ҡаймаҡ, лимон киҫәге, тоҙ ҡушып болғатырға, көн һайын ашарға.

■ Тикшеренеүсе-ғалимдар хатта көслө һыҙланыуҙарҙы дауалау өсөн тәбиғи саралар тапҡан. Күп тикшенереүҙәр күрһәтеүенсә, хохлатка тигән үлән ауыртыуҙы баҫыу һәләтенә эйә икән. Уның составындағы үҙенсәлекле матдә дегидрокорибульбин кешенең эмоциональ торошо өсөн яуап биреүсе нейрондар әүҙемлегенә йоғонто яһай ала. Был матдәгә организм өйрәнмәй, шуға ла уны киләсәктә медицинала ҡулланырға уйлайҙар. Был үҫемлек ҡытай халыҡ медиццинаһында йыш ҡулланыла. Ул кешеләрҙе лә, хайуандарҙы ла дауалай.

■ Баланың ғаиләлә нисәнсе булып тыуыуы уның интеллектына йоғонто яһай, имеш. Ғалимдар әйтеүенсә, бала ни тиклем өлкәнерәк була, уның интеллекты бәләкәс ҡустылары һәм һеңлеләре менән сағыштырғанда 18 йәшкә тиклем юғарыраҡ була икән. Әммә ғаиләләге өлкән балалар һимереү, аллергия менән йышыраҡ ауырый. Уртансы балалар һирәгерәк алдаша, улар фантазияға бирелеп бармай. Улар шулай икенсе яртыларына тоғроraҡ була. Өлкән балалар ныҡлы сәләмәтлектәре менән һәм хис-тойғоға артыҡ бирелеп бармауҙары менән айырылып тора.

■ Ғалим- психологтар яман шеш менән ауырыусы өлкәндәрҙе тикшереп, уларҙың барыһын да бер нәмә берләштереүен асыҡлаған. Тикшеренеү барышында уларҙың яуаптарын астма, диабет, йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙың яуаптары менән сағыштырғандар. Һөҙөмтәлә, яман шеш менән ауырыусыларҙың 79 проценты юала саҡта физик яҙаларға дусар булыуы билдәле булған. Был стрестан һуң организмда яйлап онкологик сир барлыҡҡа килгән. Астма менән ауырыусыларҙың яртыһын ғаиләләрендә кәмһеткәндәр. Тимәк, бала саҡта лаған стресс өлкәнәйгәс яман шеш, астма, йөрәк сирҙәренә алып килеүе ихтимал.

■ Йомортҡаның тышы сәләмәтлек өсөн файҙалы. Баҡтиһәң, ул үҙенең составы буйынса һөйәк туҡымаһына оҡшаған һәм унда эремсек һәм йомортҡаның үҙенә ҡарағанда кальций күберәк. Венгрия тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙан күрһәтеүенсә, йомортҡа ҡабығында организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Бынан тыш, ул рахит һәм анемия менән яфаланыусы балаларға файҙалы.

ТӘБИҒӘТТЕ ХӘСТӘРЛӘП

**Күптән түгел Өфө фән һәм технологиялар университеты филиалы Сибай институтында йәмәғәт экология инспекторҙары өсөн "Таҙа Талҡаҫ" проекты сиктәрендә семинар-форум үтте. Унда республиканың төрлө ҡала һәм райондарынан 150 экоактивист ҡатнашты. Сараны уҙғарыу инициаторы - Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы Байғусҡаров һәм ул етәкләгән "Ир-егеттәр советы" ойошмаһы. Һөйләшеү Талҡаҫ күленә генә түгел, ә тотош Урал арьяғы төбәгенең экологияһы проблемаларына ҡағылды.**

# ҘУР ЭШТӘР...

## бәләкәйҙән башлана



Тәүге көндә йәмәғәт инспекторы булырға теләк белдереүселәр өсөн уҡыу семинары ойошторолдо. Улар алдында З.З. Байғусҡаров, Сибай институты директоры И.С. Хәмитов, директор урынбаҫары, иҡтисад фәндәре кандидаты Ғ.М. Насыров, Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығының Сибай биләмә комитеты рәйесе В.Р. Бастанов сығыш яһаны. Һорау-яуап форматында барған семинар аҙағында экоактивистар, төркөмдәргә бүленеп, "Талҡаҫ күлен һаҡлағыҙ!" мәғлүмәт стенды эшләне һәм үҙ проекттарын яҡлап сығыш яһаны.

"Экологик яҡтан күлгә һәр төрлө хәүеф янай. Һыуҙың, һауаның бысраныуы, сүп-сар ҡалдыҡтары тупланыуы, климаттың үҙгәреүе үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына кире тәьҫир итә. Заманса технологияларҙы өйрәнеү һәм ҡулланыу, экологик стандарттар булдырыу, экологик мәҙәниәтте күтәреү, экологик туризмды үҫтереү, йәмәғәт менән тығыҙ бәйләнеш тотоу, айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләрен һәм туристик күрһәтеүгә йүнәлтелгән тәбиғәт объекттары биләмәләрен зоналаштырыу, махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә экологик һуҡмаҡтарҙы һәм туристик маршруттарҙы сертификациялау һәм был биләмәләрҙә килеүселәрҙең тәртибен регламентлаусы ҡағиҙәләр эшләү - проблемаларҙы хәл итеү юлы", - тине үҙенең сығышында иҡтисад фәндәре кандидаты Ғәзинур Насыров.

"Әүҙемлегегеҙ өсөн рәхмәт! Иң мөһиме, закон һеҙҙең яҡта икәнен онотмағыҙ. Һәм, әлбиттә, ул закондарҙы үҙегеҙ яҡшы белергә тейешһегеҙ. Биргән һорауҙарығыҙҙан сығып, ҡануниәтте нисек камиллаштырырға кәрәклеген күрәбеҙ. Был йүнәлештә Дәүләт Думаһында эштәр алып барасаҡбыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: урмандарыбыҙҙың, күлдәребеҙҙең һәм йылғаларыбыҙҙың таҙалығы һәр кемдән башлана. Әгәр һеҙ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы күрһәгеҙ, үтеп китмәгеҙ, ҡануниәттәр нигеҙендә эш итегеҙ", - тип Зариф Байғусҡаров семинарҙың тәүге көнөн йомғаҡланы.

Икенсе көндә семинар-форумда ҡатнашыусылар институттың таш эшкәртеү лабораторияһын, музейҙарҙы ҡараны, фойеға ҡуйылған күргәҙмә менән танышты һәм профессор З.Ғ. Йәрмөхәмәтов исемендәге ғилми совет залын тантаналы асыуҙа ҡатнашты. Зиннур Ғөбәйҙулла улы халыҡ күңелендә үҙ ерен, халҡын, тыуған яғын яратҡан арҙаҡлы шәхес булараҡ һаҡлана. Тантанала күрһәтелгән архив материалдарҙа был асыҡ сағылды.

Семинар-форумдың пленар ултырышында Дәүләт Думаһы депутаты З.З. Байғусҡаров, институт директоры И.С. Хәмитов, Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы С.В. Озерцов, уның урынбаҫары В.А. Солтанов, Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуроры Е.А. Гуслов, Башҡортостандың Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министры урынбаҫары К.Ф. Бирғулиев, Волга буйы федераль округының тәбиғәтте файҙаланыу департаменты начальнигы урынбаҫары А.Н. Грицук, Башҡортостандың урман хужалығы министрлығы урынбаҫары Ю.Ю. Садыҡов, Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү идаралығының Көньяҡ Урал бүлеге етәксеһе урынбаҫары Ә.Х. Узкова, Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығының Сибай территориаль комитеты рәйесе В.Р. Бастанов, "Башҡорт баҡыры" йәмғиәтенең тирә-яҡты һаҡлау бүлеге начальнигы Г.Ф. Ноғоманова һәм башҡалар сығыш яһаны, һорауҙарға яуап бирҙе.

***Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуроры Евгений Гуслов үҙенең сығышында иғтибарҙы ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу өлкәһенә йүнәлтте.*** Уның һүҙҙәренсә, был өлкәләге хоҡуҡ боҙоуҙар, шул иҫәптән файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуҙа лицензия шарттарын үтәмәү даими үҫә, был иһә ер аҫтының деградацияһына килтерә. Прокурор, закон-

МАТУР ТӘЖРИБӘ

# ЙӘШ ФЕРМЕРҘАР МӘКТӘБЕ

**Көйөргәҙе районы Иҫке Мораптал ауылы быйыл "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнаша. Ошо сара сиктәрендә улар 5 мөһим проект, атап әйткәндә "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух", "Быуындар бәйләнеше", "Тәмлекәй", "Парлы ғүмер" һәм "Йәш фермерҙар мәктәбе" булдырған һәм әлеге ваҡытта улар буйынса етди эш алып баралар. Әле башланғыс кластар уҡытыусыһы Рәмилә Кәрәмәт ҡыҙы Ҡужаҡова етәкселегендәге "Йәш фермерҙар мәктәбе" тураһында һөйләмәксебеҙ.**




- Проект сиктәрендә башланғыс класс уҡыусылары фермерлыҡ нигеҙҙәре, ауыл хужалығын алып барыуҙың заманса алымдары һәм "Киров" исемендәге ауыл хужалығы етештереү кооперативы эшмәкәрлеге менән таныша, - тип һөйләп китте Рәмилә Кәрәмәт ҡыҙы. - Киров исемендәге ауыл хужалығы кооперативы районда ғына түгел, ә республикала алдынғы һәм иң ҙур предприятиеларҙың береһе иҫәпләнә. Уның етәксеһе тыуған еренең яҙмышына битараф булмаған Дамир Таһир улы Байгилдин. Булдыҡлы, ихтирамға лайыҡ яҡташыбыҙ менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ. Малсылыҡ, үҫемлекселек буйынса алғы сафта эшләгән хужалыҡҡа йәш быуында ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү маҡсатында ошо проектты булдырҙым. Был тема минең үҙем өсөн дә бик ҡыҙыҡлы. Проектты булдырыу алдынан ҙур эҙләнеү эше алып барҙым. Иң беренсе үҙемә шундай һорау ҡуйҙым: был мәк-

һыҙ урман ҡырҡыу факты буйынса зыян 5 мең һумдан алып юғары күләмдә булған осраҡта енәйәт эше ҡуҙғатыу тураһында ҡануниәткә үҙгәрештәр индереү законһыҙ эш итеү осраҡтарын кәметергә мөмкинлек бирер, тигән ышаныс белдерҙе. Ошо һәм башҡа проблемаларҙы хәл итеүҙә йәмәғәт инспекторҙарының хоҡуҡ һаҡлау органдары менән үҙ-ара тығыҙ эш итеүе мөһим, тип билдәләне Евгений Гуслов. Ул власть органдары менән берлектә йәмәғәт инспекторҙарына ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу ҡағиҙәләрен боҙоу урындарын ышаныслы билдәләргә ярҙам иткән алгоритм эшләү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тине. Әйтәйек, кадастр мәғлүмәттәренә интеграцияланған бындай ҡушымта инспекторҙарға ер участкаларының категорияһын билдәләргә, фото һәм видеоматериалдарҙы беркетергә, шулай уҡ участкаһының законлы хужалары тураһында мәғлүмәтте теркәргә ярҙам итә алыр ине. Прокурор, контроль органдары эшләмәһә, юғары инстанцияларға мөрәжәғәт итергә кәрәклеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды.

***Әлиә Узкова иһә граждандарға йәмәғәт инспекторы статусы биреү тәртибе хаҡында аңлатты.*** Билдәләнеүенсә, иң элек үҙ ниәтеңде асыҡ белдереп, ғариза тапшырырға кәрәк. Унан һуң 20 тест һорауына яуап биреү талап ителә. Уның һөҙөмтәһе ғаризала күрһәтелгән электрон почтаға ебәрелә. Өсөнсө этап - комиссия уңышлы кандидаттарҙы һайлап ала, уларҙы реестрға теркәй һәм 3 йылға инспектор итеп ҡуя. Башҡарылған эштәргә даими отчет биргәндә йәмәғәт башланғысындағы был вазифа йәнә бер тапҡыр оҙайтылыуы ихтимал. Йәмәғәт инспекторы таныҡлығы алырға хоҡуҡлы, бының өсөн территориаль органға ғариза һәм фото тапшырырға кәрәк. Әммә таныҡлыҡтың булыуы мотлаҡ түгел, сөнки теркәлгән инспекторҙар тураһында бөтә мәғлүмәт "Росприроднадзор"ҙың рәсми сайтына ҡуйыла һәм теләһә ҡайһы граждан уны тикшерә ала.

Вадим Бастанов Талҡаҫ күлен һаҡлау буйынса комитеттың эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһаны. Сығышында ул һыу һаҡлау зонаһында, шул иҫәптән Талҡаҫ күле янында санкцияланмаған автотранспорт туҡталҡалары проблемаһына айырыуса иғтибар бүлде. ***Билдәле булыуынса, һыу ятҡылыҡтарынан 50 метрҙан яҡыныраҡ урынды туҡталҡаға әйләндереү тыйылған. Айырыуса "авто-мунса"ның киң таралыуы борсоуға һала, сөнки прицеп шулай уҡ транспорт сараһы булып тора һәм уны ла һыу һаҡлау зонаһына яҡын килтереү тыйыла.*** Бындай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү өсөн административ яуаплылыҡ, шул иҫәптән штрафтар ҡаралған. Инспекторҙар уларҙы фотоға һәм видеоға төшөрөү хоҡуғына эйә, шулай уҡ социаль әүҙем граждандар ҙа мәғлүмәтте кәрәкле ведомствоға ебәрә ала. Граждандарҙың ялыуҙарын 30 көндә, ә экология инспекторҙары ебәргән дәлилдәр 10 көн эсендә ҡаралырға тейеш.

***Шулай уҡ рәхсәтһеҙ сүплектәр ҙә көнүҙәк проблема булып ҡала.*** Бындай хоҡуҡ боҙоуҙар өсөн штрафтар һәм административ яуаплылыҡ ҡаралған. Мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүҙе һәм саралар күреүҙе Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығы тормошҡа ашырырға тейеш. Контроль һәм иҫкәртеү маҡсатында Сибай территориаль комитеты тарафынан ял көндәрендә лә рейд саралары үткәрелә, уның барышында граждандарға буклеттар таратыла, уларҙың хоҡуҡтары һәм бурыстары аңлатыла, биләмәләр тикшерелә. Шулай уҡ ведомство хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә һыу өлгөләрен ала (19 төр күрһәткес), биологик һәм химик анализ үткәрә. Комитет вәкилдәре экологик өмәләрҙә һәм ағас ултыртыу буйынса акцияларҙа әүҙем ҡатнаша.

Юнир Садыҡов республиканың урман фонды ерҙәрендә урман һаҡлауҙы көсәйтеү тураһында мәсьәлә күтәрҙе. Урмансылар битараф булмаған граждандар менән хеҙмәттәшлек итергә әҙер. Ҡағиҙә боҙоуҙар асыҡланған осраҡта диспетчер хеҙмәте менән бәйләнешкә инергә йәки рәсми сайт аша мөрәжәғәт итергә мөмкин. 2025 йыл мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда урмандарҙы законлы ҡырҡҡанда уларҙың урынына ағас ултыртыу 100 процентҡа үтәлгән. Был күрһәткесте 120 процентҡа тиклем күтәреү планлаштырыла.

Ғөмүмән, сығыштар бик күп булды, улар һыуҙы, һауаны, урманды һаҡлау, ер аҫты һәм тәбиғәт байлыҡтарын ҡулланыу, балыҡ тотоу, һунар итеү мәсьәләләренә арналды. Шулай ҙа иғтибар үҙәгендә Талҡаҫ булды. Билдәле булыуынса, Башҡортостандың "Ир-егеттәр советы" йәмәғәт ойошмаһы күлде шефлыҡҡа алған һәм уны киләсәк быуынға һаҡлап ҡалыу өсөн күп эштәр башҡара. 2021 йылдан бында "Таҙа Талҡаҫ" өмәһе уҙғарыла, күлгә ҡойған инештәр таҙартыла, кәртәләнә, ағастар ултыртыла. Тәүге өмәгә 21 кеше генә килһә, йылдан-йыл улар һаны арта.

"Бығаса күлгә ҡойған 4 инеште тергеҙһәк, быйыл йәнә 6 шишмәне таҙартыу планлаштырыла. Һыу ятҡылыҡтарын таҙартыуҙан тыш, тәбиғәт паркында ял итеүселәр өсөн уңайлы мөхит булдырыласаҡ. Экосистеманы һаҡлау өсөн автомобилдәрҙең инеүен сикләү һәм намыҫһыҙ граждандар яғынан хоҡуҡ боҙоуҙарҙы туҡтатыу өсөн ҡағиҙәләрҙе үтәүҙе контролдә тотоуҙы көсәйтеү кәрәк. Шулай уҡ Талҡаҫ күле һыуын механик таҙартыу күҙаллана", - тип билдәләне Зариф Байғусҡаров. Ул барыһын да Талҡаҫ буйында 25 апрелдә үтәсәк сираттағы экологик акцияға саҡырҙы. Унда күл янын сүп-сарҙан таҙартыу, мең төп ҡарағай ултыртыу, уларҙы кәртәләү планлаштырыла.

Сара һуңында экоактивистарға таныҡлыҡ тапшырылды. Әйткәндәй, уларҙың статусы федераль закон менән нығытылған. Тәбиғәт һөйөүселәр үҙ бурысын намыҫлы һәм ғәҙел үтәһә, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртеүгә өлгәшә алһа, Талҡаҫ өсөн гел түгел, дөйөм тирә-яҡ мөхит, тәбиғәтебеҙ өсөн борсолоуҙарыбыҙ күпкә кәмер. Ни тиһәң дә, барлыҡ ҙур эштәр бәләкәйҙән башлана бит.

**Резедә УСМАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

төп балалар өсөн нимә бирәсәк һәм уны "Айыҡ ауыл" конкурсы менән нимә бәйләйәсәк? Ошо һорауҙан сығып, маҡсатты, бурысты һәм эшемдең һөҙөмтәһен билдәләнем. Был социаль проект балалар өсөн бик фәһемле буласаҡ, тигән фекергә килдем, сөнки йәш фермер мәктәбе, ысын мәғәнәһендә, башланғыс класта уҡыған ҡыҙ һәм малайҙарҙы ауыл хужалығы предприятиелары хеҙмәткәрҙәрен әҙерләүгә йүнәлтелгән белем биреү программаһы булып тора. Проект яңы ауыл хужалығы етештереүселәренең компетенция кимәлен күтәреүгә, агросәнәғәт комплексының инновацион үҫешенә булышлыҡ итеүгә һәм төбәктең ауыл хужалығының тотороҡло үҫешен тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

Эште бөтә уңайлы шарттары булған заманса фермаға, яңыса ауыл хужалығы техникаһы менән тулы гаражға экскурсиянан башланым. Ферма мөдире Рәмил Зиннур улы Ҡотлобаев балаларға эш үҙенсәлектәре, яңы алымдар, заманса ҡорамалдар тураһында һөйләне. Ырҙында ла барыһы ла яңыса йыһазландырылғанын күреп, уҡыусылар һоҡланыуын йәшермәне. Был экскурсия балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Шунда уҡ уларҙың фекерен белеү, белемен нығытыу өсөн һорауҙар бирелдә: кем ул фермер? Ауыл хужалығында эшләү өсөн ниндәй белемгә һәм сифаттарға эйә булырға кәрәк? Яуаптары бик оҡшаны. Фермер алдынғы ҡарашлы, уңған, эш һөйөүсән, үҙ ерен яратҡан илһөйәр булырға тейеш йәки үҙ ерендә ныҡлы баҫып торған, аҡсалы, бай, айыҡ аҡыллы кеше, тип яуап бирҙе улар.

Йәш фермер мәктәбенең төп маҡсаты итеп ауыл хужалығы секторы өсөн квалификациялы кадрҙар әҙерләүҙе, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙең һәм ауыл хужалығында идара итеүҙең заманса технологияларына өйрәтеүҙе, ауыл хужалығында бизнес алып барыуҙың практик күнекмәләрен биреү юлы менән йәштәр араһында эшҡыуарлыҡ әүҙемлеген үҫтереү тип билдәләгәйнем. Ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн йәш фермер мәктәбе үҙ алдына бер нисә конкрет бурыстар ҡуя. Мәҫәлән, белем биреү бурыстары: агрономия, малсылыҡ, үҫемлекселек, ветеринария һәм ауыл хужалығында уңышлы эшләү өсөн кәрәкле башҡа һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, ауыл хужалығында эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан алдынғы хеҙмәтсәндәр менән осрашыуҙар үткәреү һәм оҫталыҡ дәрестәре ойоштороу, тәжрибә уртаҡлашыу мөмкинлеге биреү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәш фермер мәктәбе киләсәктә йәш аграрийҙарҙы, фермерҙарҙы һәм бәләкәй ауыл хужалығы предприятиелары хужаларын әҙерләүгә йүнәлтелгән белем биреү программаһына әйләнер, тигән ышаныста ойоштороусылар. Өҫтәүенә, былтыр Иҫке Мораптал мәктәбендә 8-се кластан агрокласс асылған. Йәш фермерҙар проекты ошо класта белем алыуға ла артабан этәргес булыр, моғайын.**

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Сипылдаҡ төйөт

**(Пеночка-трещотка)**



Был төргә ҡараған ҡоштар кеүек, бик бәләкәй. Хатта турғайҙан да бәләкәйерәк. Башҡа төйөттәрҙән айырмаһы - төҫөндә: йәшел арҡаһы һәм ап-аҡ ҡорһағы уны шундай күркәм күрһәтә! Шулай уҡ ҡашы һары төҫтә, әммә быны бинокль аша ғына күреп буласаҡ. Һуҙып-һуҙып, үтә һағышланып саҡыра: "тю...тю" йәки "тюю...тюю". Йыры үҙенсәлекле, өҙөк-өҙөк, ҡыҫҡа - иң юғары нөктәһендә өҙөлә лә, артабан тиҙ итеп башҡарылып ҡуя. Уны ошолайыраҡ итеп ҡағыҙға төшөрөп булыр ине: "Сипсипсисисипсипсип-сир-р-р-р-р". Исеме лә ошонан килеп сыҡҡан. Йырҙың аҙаҡҡы өндәре ҙур тиҙлектә эшләгән теген машинаһын хәтерләтә.

Ҡош туйы мәлендә ата ҡош ерҙән саҡ ҡына күтәрелә лә, туп-тура юғары осоп, оя ҡорған ерендә ботаҡтан ботаҡҡа күсеп һайрай. Инә ҡоштоң иғтибарын йәлеп итер өсөн башын ҡуҡҡа сөйөп, кәүҙәһен бер яҡтан икенсе яҡҡа сайҡалдыра. Ҡайны саҡта ултырған ерендә ҡанаттын йәйеп йырлай.

Тотош Европа киңлегендә оя ҡороп йәшәй, ареалдың көнсығыш сиге Көньяҡ Уралға ла етә. П.П. Сушкин (1897) яҙыуынса, Өфө губерниаһында сипылдаҡ төйөт һирәк осрай, ул Өфө тирәһендә, Бәләбәй ҡалҡыулығының урмандарында күренә, әммә таулы урмандарҙа юҡ. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) Урал алдында Ағиҙел йылғаһы аҡҡан киңлектәрҙә, республиканың төньяҡ-көнсығышындағы Яңы Балаҡатай ауылы тирәһендә (1976 йылдың 24 майында 1 км маршрутҡа 3-4 һайраусы сипылдаҡ төйөт тура килә), Өфө платоһының төньяҡ өлөшөндәге урмандарҙа (Көрөш ауылы эргәһендә һәр 1 сәҡрым һайын 7-9 ата сипылдаҡ төйөт осрай), Нефтекама ҡалаһынан көньяҡта урынлашҡан ылыҫлы урмандарҙа Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә теркәй.

Беҙ иһә сипылдаҡ төйөттө ике тапҡыр М. Ғафури исемендәге паркта күрҙек. Был 1993 йылдың июне ине. 1986 йылдың майында Әй-Йүрүҙән йылғалары араһындағы аҡ ҡайынлы, ҡарағайлы яҡты урмандарҙа күп осраттыҡ, ул унда күпләп йәшәй ине. Һәр 70-100 м һайын йырсы ата ҡоштар осрап ҡына торҙо. 1990 йылдың майында Краснокама районы Сауз ауылы эргәһендәге ҡарағай урмандары шулай уҡ сипылдаҡ төйөттөң яратҡан урыны ине. Университеттың Нуғай ауылы янындағы уҡыу базаһында, Өфөнөң Башҡортостан урмансылары паркында шулай уҡ осраған булды. Аҙаҡҡы тапҡыр сипылдаҡ төйөттө 2006 йылда Балаҡатай урмандарында тап иттек.

Ояһын урмандың асыҡ, яҡтылыҡ яҡшы төшкән урынында, ерҙә ҡора. Ояһының башы ҡаплы, ослайыбыраҡ тора, инеү уныны ҡабырғанан. Ояһына неҫкә, йомшаҡ ҡына үләндәр, ат ялы, йөнлек йөнө түшәй. Ояның диаметры 100-175 мм. 5-7 аҡ йомортҡа һала, ул шәмәхә төҫөндәге таптар менән ҡапланған. Инә ҡош 13 көн баҫа. Ояларғы бәпкәләрҙе 3 аҙна буйына икәүләп ашаталар.

Силәбе өлкәһе менән сиктәге таулы урмандарҙа ла һайраусы ата сипылдаҡ төйөт күренгәне булған.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 6 АПРЕЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера сезона. "Павел. Первый и последний". [16+]
0.00 "Рокот космодрома". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00, 3.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Д/ф "Спутник. Русское чудо". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Материнство и детство. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**17.15 Формула здоровья. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/с Города-герои. [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ.**
**0.00 Х/ф "Любовь и другие иллюзии". [16+]**
**1.45 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 7 АПРЕЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера сезона. "Павел. Первый и последний". [16+]
0.00 "Рокот космодрома". [12+]
0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00, 3.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Д/ф "Второй. Герман Титов".
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15, 20.15 Материнство и детство. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры". [12+]**
**23.45 Х/ф "Элли". [16+]**
**2.00 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 8 АПРЕЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера сезона. "Павел. Первый и последний". [16+]
0.00 Премьера. "Рокот космодрома". [12+]
0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00, 3.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Д/ф "Алексей Леонов. Прыжок в космос".
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [12+]**
**11.00, 21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Формула здоровья. [12+]**
**17.00 Д/ф "Вопрос науки". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Совесть". [16+]**
**2.00 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 9 АПРЕЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера сезона. "Павел. Первый и последний". [16+]
0.00 Премьера. "Рокот космодрома". [12+]
0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00, 3.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 Д/ф "Валентина Терешкова. "Чайка" и "Ястреб".
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Специальный репортаж. [12+]**
**16.15 Полезные новости. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00, 20.30 Креативный код. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Осторожно, дети!" [12+]**
**1.30 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 10 АПРЕЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.50 "Сегодня вечером". [16+]
23.45 "Голос". Новый сезон. Прямой эфир. [12+]
1.55 Х/ф "Викинг". [12+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". [12+]
0.10 Х/ф "Салют-7". [12+]
2.15 Д/ф "Салют-7. История одного подвига". [16+]
3.05 Х/ф "Мой папа лётчик". [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Формула здоровья. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Приключения экспоната". [12+]**
**1.30 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 11 АПРЕЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Хочется праздника". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Рокот космодрома". [12+]
13.10 Д/ф "Крещение Руси". [12+]
16.00 Премьера. "Князь Владимир". Николай Расторгуев, Шаман в этно-рок-опере Игоря Матвиенко. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 4.15 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.50, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.10 Д/ф "Три дня Юрия Гагарина. И вся жизнь". [12+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.30 Х/ф "Розы на стекле". [12+]
23.35 Х/ф "Отогрей моё сердце". [12+]
1.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.
5.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Формула здоровья. [12+]**
**8.30, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 "Елкән". [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Сказание о добродетели". Театрально-концертное представление. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфы.**
**2.30 Д/ф "Матушка Зосима". [12+]**
**3.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 12 АПРЕЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "На Соловки за чудом". [12+]
11.10 Д/ф Премьера. "Первый отряд космонавтов". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Гагарин. Человек, сошедший с небес". [12+]
13.10 Д/ф "Путь Христа". [0+]
14.55 Х/ф "Укрощение огня". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Между прошлым и будущим". Концерт к 90-летию Леонида Дербенева в Кремле. [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30 Х/ф "Под дождём не видно слёз". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.55 Х/ф "Лидия". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 День космонавтики. Торжественный концерт на космодроме Байконур.
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.40 Х/ф "Салют-7". [12+]
3.30 Д/ф "Салют-7. История одного подвига". [16+]
4.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 "Курай даны". [12+]**
**8.30 Кустәнәс. [12+]**
**9.00, 14.45 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Башкортостанского Филарета. [6+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 Крылья. [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Д/ф "Гагарин. Последний миг". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Д/ф "Передвижники "Русской Атлантиды". [6+]**
**18.00 Концерт Алены Завьяловой. [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45, 4.30 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**0.45 Х/ф "Цой". [16+]**
**2.30 Спектакль "Касатка". [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Апрель (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (18) дүшәмбе | 4:42 | 6:36 | 13:30 | 17:50 | 20:00 | 21:47 |
| 7 (19) шишәмбе | 4:40 | 6:33 | 13:30 | 17:51 | 20:02 | 21:50 |
| 8 (20) шаршамбы | 4:38 | 6:31 | 13:30 | 17:53 | 20:03 | 21:53 |
| 9 (21) кесе йома | 4:36 | 6:28 | 13:30 | 17:54 | 20:05 | 21:55 |
| 10 (22) йома | 4:35 | 6:26 | 13:30 | 17:55 | 20:07 | 21:57 |
| 11 (23) шәмбе | 4:33 | 6:23 | 13:30 | 17:57 | 20:09 | 21:59 |
| 12 (24) йәкшәмбе | 4:31 | 6:21 | 13:30 | 17:58 | 20:11 | 22:01 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*✓ Янсыҡтарҙың төү тәғәйенләнешен дә асыҡланыҡ. Оҙон юлға сыҡҡанда дарыу үләндәре, ҡорот кеүек ризыҡтар, башҡа ваҡ-төйәк кәрәген һалып йөрөтөр булғандар икән был янсыҡтарға боронғо ата-бабалар.*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ЕҢГӘ БҮЛӘГЕ - ХАЗИНА,

## тиңһеҙ уның баһаһы!

**Учалы районы Ҡолош ауылы ағинәйҙәре район ағаинәйҙәрен үҙҙәренең мәҙәниәт йортона ошондай матур атамалы этнографик күргәҙмәгә саҡырҙы. Тема күптәрҙең күңеленә хуш килгәндер, райондың 13 ауылынан ҡатнашырға теләк белдерҙеләр.**



Саҡырыу ташлау менән ауылда әҙерлек эштәре лә башланып китте. Бына ошондай мәлдәрҙә күренә лә инде халыҡтың берҙәмлеге. Клуб мөдире, ауылдың килене Римма Сәғит ҡыҙы: "Ауылым халҡына ҙур рәхмәтлемен, ҡуш йоҙроҡтай бергә тупланып, һәр кем сараға үҙ өлөшөн индерҙе: кем бешеренде, кемдер кәрәкле әйберен ташыны, кем кәңәш-төңәшен еткерҙе. Беҙҙең Ҡолош халҡы һәр саҡ шулай ул!" - тине сикһеҙ бер ғорурлыҡ менән.

Билдәләнгән көнгә мәҙәниәт йорто килгән ҡунаҡтар, халыҡ менән шығырым тулды. Иркен генә фойела күргәҙмәгә килтерелгән еңгә бүләктәре урын алғас, доньяә аллы-гөллө нурҙар менән балҡып китте, күҙҙәр ҡамашты. Сараны асып, килгән халыҡты сәләмләп, район башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гүзәлиә Ишбай ҡыҙы, район мәҙәниәт бүлеге начальнигы урынбаҫары Юлиә Фаит ҡыҙы, район башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы Фәнүз Ғайнан улы, урындағы хакимиәт башлығы Жәмил Шайкамал улы, Өфөнән республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы - барыһы ла Ҙур һәм берҙәм ғаиләйылына арналып ойошторолған сараның әһәмиәтен, бөгөн бигерәк тә халыҡтың берләштерер өсөн кәрәклеген ҙурлап баһаланы һәм район "Ағинәй" ойошмаһына, Ҡолош ауылы халҡына ҙур рәхмәттәрен еткерҙе.

Артабан килгән ҡунаҡтарға күргәҙмә менән танышыу, аралашыу мөмкинлеге бирелде. Сараның икенсе өлөшөндә бәйгелә ҡатнашыусы һәр кем үҙенең еңгә бүләктәре тураһында һөйләргә, күрһәтергә тейеш ине. Бына шунда башланды ла инде иң мауыҡтырғыс, иң ҡыҙыҡлы сығыштар. Һәр ҡатнашыусы залдағыларҙы тарих төпкөлдәренә алып инеп китте. Әлбиттә, бүләктәр төрлө, еңгәләрҙең матди хәленә ҡарап әҙерләнгән. Ҡотойҙан Баныу Гәлләм ҡыҙы, мәсәлән, һүҙен күкрәгенә тағып алған боронғо яғаны (селтәр, һаҡал) күрһәтеүҙән башланы. Әсәһе бала сағында үҙенең еңгәһенән алған икән был ҡәҙерле һәм зиннәтле бүләкте.

Ҡобағоштар иһә еңгә бүләктәрен барлап, борондан килгән бер йоланы ҡыҫҡа ғына итеп сәхнәләштереп күрһәтте. Ире үлеп ҡалған бәләкәй балалы киленен ҡайнһе 14 йәшлек тәнәйенә (ҡәйнешенә) йәрәштерә. Етем ҡалған баланың үҙ яҡындары араһында атайлы булып үҫергә тейешлегенә баҫым яһап, ҡоҙағыйы алдында үҙ һүҙен һүҙ итә ҡәйнә кеше. Бар нәмәне алдан самалаған ҡәйнә килене таратасаҡ еңгә бүләктәрен дә ҡәстәрләп ҡуйған була. Уларҙың барыһын да күрһәтеп һөйләп, был ҡарарына килене менән ҡоҙағыйын ризалатып ҡуя.

Килмәктәрҙең бүләктәре араһында һуғылған йөҙәктәр иғтибарҙы йәлеп итте. Инде оло ғына йәштә булған Зөбәйҙә Ишбирҙина апайға атаһы, еңгә булып барғас, ҡыҙҙарына тарату тип, аҡсанан йөҙәктәр һуғып бирген була. Йәтеш кенә, ҡыҙҙар бармағына ярарлыҡ ҡына итеп һуғылған үҙҙәре. Ә бына ултырғыстарға йәйергә яраҡлы итеп йөндән һуҡтырылған баҙлап торған кескәй келәмдәрҙе иһә хәҙерге килендәр, еңгәләр әҙерләп килтерә икән улар яғында.

Әүешкүл ағинәйҙәре лә бай мәғлүмәт менән килгәйне. Һөйләүҙәренсә, ауылдарына килен булып килгән ҡыҙҙарҙың бер нисә һандыҡы булған икән. Еңгә бүләктәре шуларҙың береһендә тултырылған була. Римма апай Байрамғолова нисек еңгә күрергә барыуы, уларҙан алған көмөш йөҙәктәрҙе әле булһа кейеп йөрөүе тураһында һөйләне. Бер еңгәнән алған төрлө төҫлө туҡыманан буй ҡормыш итеп тегелгән түшелдеректе күрһәтеп, былай тине: "Туҡымаларҙы ошолай буй итеп һалыуҙың ғиллһе шунда: ул бүләк алыусының тормошо уңған барын тигәнде аңлата". Ике элмәле итеп сигелгән янсыҡтарын күрһәтеп, уларҙың бәләкәс малайҙарға ла ҡурмас йә башҡа бер нәмә һалыу өсөн кәрәкле әйбер булыуын матур итеп еткерҙе. Ололарҙың янсығында иһә оҙон юлға сыҡҡанда кипкән ҡорото, тәсбихе ятҡанлығын Бөйҙә ауылы ағинәйҙәре өҫтәп ҡуйҙы.

Көсөк-Маяҡтарҙың еңгә бүләктәре лә ифрат мул ине. Улар һөйләгәнсә, йәйге селләлә лә, ҡышҡы селләлә лә килен төшөрмәгәндәр, икенсе унайлы мәлдә һайлағандар. Килен һандығының өҫтөндә ҡыҙҙарына, тәнәйҙәренә әҙерләнгән айырым бүләкле ҡумта булған. Аҫылыраҡ бүләктәр иң яҡындарына тәғәйенләнгән. Мәсәлән, ҙурыраҡ тәнәйҙәренә мәрйен ҡушып сигелгән ҡулъяулыҡ, ҡыҙҙарына тәғәйенләп көмөш йөҙөк бүләк иткәндәр. Күрше-тирә, ауыл балаларына суҡлы ығырмауҙар (үнербау) әҙерләнгән. Суҡлы бауҙарҙы "суҡташ" тип тә атағандар. Көсөк-Маяҡ ауылы музейында һаҡланған билбау - үҙе бер хазина. Уны 1940 йылдарҙа Фирҙәүес әбей эшләгән, ә ҡыҙы уны музейға бүләк иткән. Билбауҙың остары өсәргә бүленеп, һәр өлөшө сұһына тиклем төҫлө йөн ептәр менән тығыҙ итеп уралған. "Хәҙер ҙә еңгәләр ошо суҡлы бауҙарҙы матур итеп ишеп, балаларға бүләк итеп әҙерләһә, ҡалай ҙа шәп булыр ине. Бигерәк тә ҡыҙҙар ҡул беләҙектәренә урап йөрөтөп ҡыуанырҙар ине", - тип тә өҫтәне ауыл ағинәйҙәре етәксеһе Гөлсирә Ғаҡил ҡыҙы.

Күргәҙмәгә килтерелгән әйберҙәр араһында ҡасандыр еңгәләренән алып, бөгөн һандыҡтарҙа ҡәҙерле ҡомартҡы булып ҡына һаҡланғандары ла күп ине. Ғәлиәхмәрҙәр 93 йәшлек Лиф һәм 85 йәшлек Ғилман бабайҙарының янсыҡтарын күрһәтте. Мәҫкәүҙәрҙә янсыҡ, ҡульяулыҡ, алъяпҡыстар менән бергә, үҙҙәре әйткәнсә, инде бер быуаттан ашыу һаҡланған кейәү муҡсаһы ла бар ине. Ишмәкәй ағинәйе Райда апай ағаһы Мәүлит Ямалетдиновтың еңгәһенән алған тәүге бүләген күрһәтте. Был ҡысмауҙы (ҡысмау - сарыҡтың ҡуныһын аяҡ бөгәре тапҡырынан ике тапҡыр уратып бәйләп ҡуя торған ишелгән бау) яҙыусының әсәһе ҡомартҡы итеп һаҡлап тотҡан, ә Райда апай шуға оҡшатып, ҡысмауҙарҙы үҙе эшләй икән.

Күргәҙмәгә ҙур тырышлыҡ менән ихлас әҙерләнеп килгән Рәсүл, Ыҫтамғол, Һөйөндөк, Бөйҙә, Наурыз ағинәйҙәренең дә күрһәтере байтаҡ ине: ҡомартҡылар араһында янсыҡтар ҙа, еңгәләрен һыу башлатҡан ҡыҙҙарға биргән алъяпҡыстар ҙа, түшелдеректәр ҙә урын алған. Аралашып сит-ситтәре матур итеп селтәрләп ҡайылған, еңгәнең саф тойғолары һеңгән ҡулъяулыҡтар бигерәк тә күҙҙең яуын алып тора. Наурыз ағинәйҙәре, булғас булһын типтер инде, ваҡытында еңгәнән алған "Чебурашка" исемле еҫле һабын төргәген дә, "Ландыш" исемле хушбуй шешәһен дә күргәҙмәгә ҡуйған.

Ваҡыт ҡатламы аҫтында ҡала барған ҡомартҡыларҙың санын ҡаҡҡылап-һуҡҡылап өҫкә ҡалҡытыуҙың, һис һүҙһеҙ, файҙаһы ҙур булды. Беренсенән, ошо сарала ҡатнашырға теләүселәр төрлө эҙләнеү эштәре алып барған, ололарҙан һорашҡан, белешкән. Улар сараға йыйылыусыларға һандыҡтарҙа һаҡланғандың тарихын ишеттереп, ҡомартҡыларҙы тамаша ҡылыу мөмкинлеге бирҙе. Ҡыҙыңа ете булғанда, ете төйәнсәгең булһын, тигәнде белеп тә әйткән шул инде халҡыбыҙ. Икенсенән, инде телдән төшөп ҡала барған ығырмау, кейәү муҡсаһы, ҡысмау, сукташ тигәндәренең нимә аңлатҡанын белдек. Янсыҡтарҙың төү тәғәйенләнешен дә асыҡланыҡ. Бәҡтиһән, күптәр аңлағанса, тәмәке һалып йөрөү өсөн түгел, оҙон юлға сыҡҡанда дарыу үләндәре, ҡорот кеүек ризыҡтар, башҡа ваҡ-төйәк кәрәген һалып йөрөтөр булғандар икән был янсыҡтарға боронғо ата-бабалар. Әйткәндәй, мин үҙем һандыҡтарҙан сыҡҡан янсыҡтарҙың сигеүенә иғтибар иттем. Ауылдарҙың сигеү алымы бер төрлө генә түгел ине. Төбәгенә ҡарап, сигеп биҙәк һалыу алымы, тимәк, айырылып торғанлығына тағы бер инандым. Иң мөһиме, иҫ киткес матур йолабыҙҙы тамаша ҡылдыҡ, халҡыбыҙҙың аҫыл мәҙәни мираҫы менән һоҡландыҡ!

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

### СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

**М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры**

**3 апрель "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов). 16+
**4 апрель "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов). 12+
**5 апрель "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 12+
**9 апрель "Кеше булып ҡалырға"** (Е.Коллегова, Х. Үтәшев). 12+

**М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры**

**3 апрель "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләҙев, Ф. Ғәрипов), драма. 19:00. 12+
**4 апрель "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 18:00. 12+
**5 апрель "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М. Күлбаев). 12:00. 6+
**5 апрель "Мәйсәрә мутлыҡтары"** (Х. Ниязи, Р. Хәкимов), комедия. 18:00. 16+
**7 апрель "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф, Т. Карелина, М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 0+
**8 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 11:00. 6+
**8 апрель "Брат Чичиков"** (Н. Гоголь, М. Күлбаев), сатирик комедия. 19:00. 12+
**9 апрель "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), 11:00. 6+
**9 апрель "Отец"** (М. Горький, Д. Хөснийәров), ғаилә драмаһы. 19:00. 12+

**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры**

**3 апрель "Гуси-лебеди"** , рус халыҡ әкиәте. 12:00. 0+
**3 апрель "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А.Верхоземский). 18:00. 6+
**4 апрель "Царевна-Лягушка"**, рус халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+
**4 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 14:00. 0+
**4 апрель "В последний путь под рок-н-ролл"** (В.Денисов). 19:00. 16+
**5 апрель "Винни-Пух"** ( А.Мили). 12:00 һәм 15:00. 6+
**5 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 14:00. 0+
**9 апрель "Тьма египетская"** (М. Булгаков). 19:00. 16+

**Башҡорт дәүләт филармонияһы**

**3 - 5 апрель "Розовая пантера"** XXIX Халыҡ-ара джаз фестивале. 16+
**8 апрель "Квартет имени Вайнберга"** (Мәскәү) камера ансамбле. 12+
**9 апрель "Тарпан"** этно-фолк төркөмө концерты. 6+

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры**

**3 апрель "Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәнһүҙин), комедия. 16+
**4 апрель "Считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 13:00. 0+
**4 апрель "Йәнекәйем, мин өйләнәм"** (С. Юзиев), лирик комедия. 18:00. 16+

**Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе**

**3 апрель** БР халыҡ артисы **Эльвира Даутованың** юбилей концерты. 12+
**4 апрель "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәнһүҙин), музыкаль комедия. 12+
**5 апрель "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12:00. 0+
**5 апрель "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н.Ғәйетбаев), комедия. 18:00. 12+
**9 апрель "Яңып һүнгән ғүмерҙәр..."** (А.Дударев, Ф.Кәримов), драма. 12+

**Сибай концерт-театр берекмәһе**

**6 апрель "Нескучная классика"** концерты. 6+
**7 апрель "Тормош түгел - әкиәт" "Мунса ташы"** төркөмө сығышы. 12+
**8 апрель Ризат һәм Зинира Рамаҙановтарҙың** концерты. 6+
**9 апрель "Тарпан"** этно-фолк төркөмө концерты. 6+

**БР Милли музейы**

**4 апрель "Мир заповедной природы"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 0+
**7 апрель "Ат образы"** Ҙур һәм татыу ғаилә йылына арналған күргәҙмәне асыу. 11:00. 6+
**7 апрель "Увлечение длиною в жизнь"** күргәҙмәһен асыу. 12:00. 6+
**8 апрель "Оҫта. Остаз. Кеше"** Ф. Абдрафиҡовтың күргәҙмәһен асыу. 15:00. 0+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ФОЛЬЛОРСЫ БАЛАЛАР ЙЫЙЫЛА




**Республикала 23-27 июндә үтәсәк III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһында ҡатнашыусылар билдәләнде.**

Башҡортостандың баш ҡалаһына Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 86 ҡатнашыусы (78 ижади коллектив һәм 8 солист) килә. Балаларға 10-18 йәш. Йәш артистар халыҡ ижадын халыҡ йыры, халыҡ бейеүе, халыҡ уйын ҡоралдары, традицион мәҙәниәт номинацияларында күрһәтә. Программа бик бай. Өс көн рәттән ҡаланың йәмәғәт киңлектәрендә концерттар була. Тамашасылар фольклориаданы асыу һәм ябыу тантаналарын ҡарай ала. Сәхнәлә төрлө төбәктәрҙән килгән ижади коллективтар, солистар һәм махсус саҡырылған ҡунаҡтар - хедлайнерҙар сығыш яһай. Бынан тыш, Өфөлә "CIOFF VI Бөтә донъя фольклориадаһы мираҫы" күргәҙмәһе асыла. Һуңынан илдең төрлө төбәктәренән ҡатнашыусылар "Дуҫлыҡ әйлән-бәйләне"нә ҡушыла, артабан улар Ленин урамы буйлап Совет майҙанына тиклем ҙур сағыу парадҡа теҙелә. Балаларҙы экскурсиялар, урындағы халыҡ ижади коллективтар менән ижади осрашыуҙар һәм оҫталыҡ дәрестәре көтә. Ойоштороусылар улар өсөн "киске уйын" үткәрә, шулай уҡ Дәүләт ҡурсаҡ театрына алып бара.

Әйткәндәй, беренсе Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһы 2022 йылда Сыуашстанда уҙҙы. Ул саҡта 76 төбәктән ҡатнашыусылар килде. 2024 йылда икенсе халыҡ ижады байрамы ҡунаҡтарын Татарстан ҡабул итте.Фестивалде ойоштороусылар - Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы һәм Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

# ТАҺИР КҮСИМОВҠА АРНАЛА

**Өфөлә үткән X "Театр яҙы" республика конкурс-фестивалендә Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимовтың тормош һәм хәрби юлына арналған "КанАтлы генерал" спектакле менән сығыш яһаны.**

Спектаклдә Хәмит Иргәлиндең повесы буйынса Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрының баш режиссеры Денис Нурғәлин ҡуйған. Әйткәндәй, ул үҙе генерал Миңлегәле Шаймортов ролен башҡара. Спектаклдең йөкмәткеһе пьесаның төп геройы тормошо ваҡиғалары менән байытылған - аслыҡ йылдарына тура килгән бала саҡ, Урта Азия тарафтарында йөрөү, Ҡазанда уҡыу, хәләл ефете Сәйҙә менән танышыу, хәрби үткәне, Днепр аша сығыу (ошо ваҡиғанан һуң Т.Кусимовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә), легендар Семен Буденный менән аралашыу. Башҡорт халҡының данлы улы, һуғыш йылдарында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының беренсе полкы командиры булған Таһир Күсимов тамашасылар күҙе алдына ябай ауыл көтөүсеһенән генерал дәрәжәһенә тиклем күтәрелгән сағыу шәхес булып килеп баҫа. Спектаклдә оло йәштәге генерал ғүмеренең һуңғы көнөндә - 1986 йылдың 10 майында хәтирәләр ебен һүтә. Таһир Күсимов ролен - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Сәйфуллин, уның ҡатыны Сәйҙә ролен Башҡортостандың халыҡ артисы Айгөл Хәкимова башҡара. Сюжет ир менән ҡатындың хәтирәләренә ҡоролған. Йәш Таһир Күсимов образын - актер Нәфис Сәйетов, бөләкәй Таһирҙы Айгиз Әбдрәшитов уйнай. Әлеге ваҡытта Айгиздең атаһы Махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Спектаклдән һуң малайҙы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың рәхмәт хаты менән бүләкләнеләр.

Спектакль аншлаг менән үтте, залда мәҙәни йәмәғәтселек вәкилдәре, данлыҡлы генералдың туғандары, Әбйәлил районынан яҡташтары бар ине. Тамашанан һуң театр тәнҡитселәре Галина Вербицкая, Айһылыу Сәғитова, Лариса Каневская, Глеб Ситковский һәм Нияз Игламов составындағы эксперт советы фекер алышыу ойоштороҙо һәм "КанАтлы генерал"ды фестивалдең "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында билдәләне.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# ЯҠТАШЫБЫҘ - ЯҢЫ ВАЗИФАЛА

**Санкт-Петербургта Михайлов театрының яңы художество етәксеһе итеп Рәсәйҙең халыҡ артисы Илдар Абдразаҡов тәғәйенләнде. Был хаҡта театр коллективы менән осрашыуҙа ҡала губернаторы Александр Беглов иғлан итте.**

Сарала Абдразаҡовты тәғәйенләү тураһында бойороҡ уҡып ишеттерелде. "Абдразаҡов Илдар Әмир улын эшкә алырға. Вазифа: театрҙың художество етәксеһе", - тиелә бойороҡта.

"Мусоргский исемендәге Санкт-Петербург дәүләт академия опера һәм балет театры - Михайлов театрының художество етәксеһе вазифаһын ҡыуанып, ҙур яуаплылыҡ менән ҡабул итәм һәм һоҡланғыс театр коллективының бер өлөшө булыуым менән бәхетлемен, - тип яҙа Илдар Абдразаҡов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Михайлов театры - бай тарихы, шәп труппаһы һәм тоғро, һиҙгер тамашасыһы булған үҙенсәлекле донъя. Бар ғүмеремде сәнғәткә һәм операға бағышлайым. Хәҙер мин Михайлов театры быуаттар буйына тупланған традицияларын артабан да һаҡлап ҡалһын һәм шул уҡ ваҡытта ҡыйыу рәүештә алға ҡараһын, яңы исемдәр асһын өсөн бөтә көсөмдө, тәжрибәмде һәм белемемде йүнәлтергә әҙермен. Михайлов театрының Севастополь опера һәм балет театры менән (мин унда ла художество етәксеһе) хеҙмәттәшлеге ике коллектив өсөн дә яңы офоҡтар асыр һәм тамашасыларға уртаҡ сағыу проекттар бүләк итер тип ышанам. Алда күп эштәр көтә, мин данлыҡлы Михайловский театрында сәнғәткә хеҙмәт итеү мөмкинлеге булыуына ысын күңелдән шатмын".

ТЕЛҺӨЙӘР

# ЭШЕМТӘЙГӘ ЭШӘНӘМ

**Башҡорт теленең ун томлыҡ академик һүҙлеге - халҡыбыҙҙың эшемтәй заттары тиҫтәләрсә йыл атҡарған оло хеҙмәт. Уны ҡулға алып, ғалимдарыбыҙ берәмтекләп йыйған һүҙҙәрҙең һирәк ҡулланылғандарын барлайбыҙ.**

**Әсмә.** Тәнгә эре генә булып ҡалҡҡан ҡыҙыл сабыртма. *Әсмә - һыу сәсәгенең бер билдәһе. Шундуҡ дауалаһан, әсмә аҙна-ун көндән үтә ул.*

**Этаяҡ.** Эткә аш һала торған һауыт шулай атала. *Уңайлы этаяҡ. Күсәк этаяҡтан һыу эсә.*

**Эҫтәт.** Ямғырға шыйығайып, иҙелеп ятҡан балсыҡ, тупраҡты эҫтәт тиҙәр. *Эҫтәт ер. Урман сите эҫтәтҡә әйләнгән.*

**Эшемтәй.** Күңел һалып, ихлас эшләгән кеше була эшемтәй. *Өмәгә эшемтәйҙәр генә килгән. Эшемтәйҙе һәр кем ярата.*

**Эшәнеү.** Диалектҡа хас һүҙ, мәғәнәһе - "ышаныу". *Кешегә эшәнеү. Эшәнер дуҫ. Ялғансыға эшәнмә.*

**Шулай итеп, эшемтәйҙең абруйын матур, бай телмәр ҙә күтәрә.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТҺЕҘЛЕГЕҢ МЕНӘН МАҠТАНМА!

Сүлдә йөрөгән ҡуңыр ҡаҙ күл ҡәҙерен белмәҫ; күлдә йөрөгән ҡара өйрәк сүл ҡәҙерен белмәҫ; тауҙа йәйләп, ташта үҫкән ил ҡәҙерен белмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшәү - тимәк, минут һайын яңынан тыуыу.

**(Эрих Фромм).**

Кәңәш биргәндәрҙең һәр һүҙен ҡабул ит; үҙ кәңәшеңде һорамағанға биреүҙән тыйыл.

**(Вильям Шекспир).**

Әйҙәгеҙ, шундай итеп йәшәйек: кәбергә күмгәндә хатта һине белмәгән кеше лә иларлыҡ булһын.

**(Марк Твен).**

Әгәр ҙә кешеләр бер ни менән дә маҡтана алмай икән, улар үҙҙәренең бәхетһеҙлеге менән маҡтана башлай.

**(Артур Граф).**

Кешене уның индивидуаль сиренән түгел, ә универсаль сиренән дауалау кәрәк.

**(Джуна Бернас).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Матур сыуаҡ бер көндә, кешеләр күрергә, үҙен күрһәтергә, тип, фырт, дорфа, тәкәббер бер әфәнде урам ҡыҙырырға сығып китә. Быны тәүге урам сатында уҡ танышын осратып, шатланып китә был.**

**- Һине танырлыҡ та түгел! - тип һүҙ башлай һәм ҡыҙыҡһыныуын ҡандырыр өсөн төрлө ахмаҡ һорауҙар яуҙырырға тотона: - Нинә улай ҡүҙәрең һүнгән? Берәй бәләгә тарыныңмы әллә?**

**- Ҡыҙғаныска ҡаршы, минең хәлем шулай тиҙ үҙгәрә, әгәр... - тип, башлаған һүҙен дауам итә алмай танышы, фырт әфәнде уны бүлдерә һала:**

**- Һин нисек был турала шулай тыныс ҡына һөйләй алаһың? Кисекмәҫтән беҙҙең танылған табиптарға мөрәжәғәт ит. Теләһә ниндәй сирҙе лә үҙ ваҡытында дауаларға кәрәк икәнен белмәйһеңме ни?..**

**Фырт әфәнде шулай төрлө сирҙәр, сиргә юлыҡҡан таныштары тураһында сурытып хәбәр һөйләй, танышына ауыҙ асырға ла бирмәй. Шунан:**

**- Әйт әле, дуҫҡайым, һинең кәйефеңдең үҙгәреше күптән киләме? - тип һорай.**

**- Ҡыҙғаныска ҡаршы, һинең үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт физиономияңды күргәндә генә минең кәйефем шулай тиҙ үҙгәрә, ауырыуға һабышам һәм бөтөн яҡты донъя ҡараңғыға әйләнә... - тип яуап бирә танышы һәм әйләнеп китеп бара".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 2.04.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 2.04.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 3.03.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 583